ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

12-18 сентябрь (нарысай) 2020

№37 (923)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Сентябрҙән 2021 йылдың тәүге яртыһы өсөн гәзит-журналдарға яҙылыу башланды. ПР905 индекслы "Киске Өфө" аҙналығына республиканың һәр район-ҡалаһында, ауылында 725 һум 58 тингә яҙылып, дуҫлыҡты дауам итергә саҡырабыҙ. Бер-беребеҙгә кәрәкле, бер-беребеҙгә терәкле фекер уртаҡлашыусылар булайыҡ!**

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Аҡса ҡотороғо ла - эпидемия** 3



**Милләт холҡо...** мәҡәләләрҙә һәм әйтемдәрҙә 7



**Был тарих...** тәрбиәләй, һабаҡ бирә, рухты уята 11



**Ризыҡты тәләфләргә ярамай!** 12-13



**ТВ-программа** 14

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Алтаҡталарҙа ғына түгел, торaҡ пункттар, ер-һыу, тау-таш атамаларында хаталар күҙегеҙгә салынамы? Ғөмүмән, хаталарға иғтибар итәһегеҙме?

***Зариф БАЙҒУСКАРОВ, РФ Дәүләт Думаһы депутаты:*** Эш буйынса республика райондары, ауылдары буйлап күп йөрөргә тура килә. Юл буйындағы күрһәткестәр булһынмы ул, башҡа урындамы - тәржемәләр йәки яҙылыш дөрөҫ булмаһа, хакимиәттәрҙә район башлыҡтарына һәр ваҡыт: "Ни өсөн шуларҙы ҡарамайһығыҙ, дөрөҫләтеп ҡуймайһығыҙ. Башҡортса бит улай булмай", - тип әйтеп йөрөйөм. Улар минең менән килешә. Ә бит үҙҙәре лә шул хаталарҙы күрә. Башҡорт теле рус теле менән бер ҡатарҙан дәүләт теле тип иғлан ителгән икән, уға мөнәсәбәт тә бер кимәлдә булырға, башҡорт телендәге атамалар һ.б. дөрөҫ яҙылырға, тәржемәләр дөрөҫ булырға, тел боҙолмаҫҡа тейеш.

Яңыраҡ бер ҙур магазинда булдым, башҡортса тәржемәләрҙе шундай дөрөҫ һәм матур итеп яҙғандар - ҡарап тороуы ҡыуаныс. Ҡабат-ҡабат уҡып, бер хата ла тапманым - күңелгә рәхәт булып китте.

***Фәнүзә ХӘБИРЙӘНОВА, Салауат районы:*** Мин ябай ауыл ҡатыны, шулай булһа ла, бөгөн алтаҡталарҙа ғына түгел, хатта рәсми ҡағыҙҙарҙағы, гәзит-журналдарҙағы хаталарҙы күҙгә төшкән сүп кеүек күрәм. Радио-телевидение тапшырыуҙарындағы һүҙҙәрҙең урынһыҙ ҡулланылышы ҡолаҡты ярып үтә. Ирекһеҙҙән, әллә ҡағиҙәләр үҙгәргәнме икән, тип уйлап ҡуям, ни тиһәң дә, беҙ ауылдан сыҡмаған, юғары белем алмаған кешеләр, ә ул алтаҡталарҙы эшләүселәр, гәзит-журнал сығарыусылар, тапшырыуҙар әҙерләүселәр бит махсус белемле, улар беҙгә ҡарағанда күберәк беләләр, донъянан артта ҡалғанбыҙҙыр, тип һығымта яһайым. Бына, мәҫәлән, Силәбе өлкәһендәге Усть-Катавты Ҡатау-Тамаҡ ҡалаһы тип башҡортсалап атап йөрөтәбеҙ. Ул башҡорттарҙың аҫаба ерҙәрендә урынлашҡан, барлыҡ рәсми документтарға ла шулай ингән, шулай ҡабул ителгән. Әммә шунда йәшәгән халыҡ ундағы йылғаны бер ҙә Ҡатау йылғаһы тимәй, Катайка тип йөрөтә, йәғни Ҡатай йылғаһы, башҡорт ырыуы атамаһынан алынған. Башҡа милләттәр уның үҙ исемен онотмаған һәм бөгөнгәсә шулай атай, ә беҙ уны күптән инде Ҡатауға әйләндергәнбеҙ.

Был хәл-торош мәмерйәләребеҙгә лә ҡағыла: Эҫем йылғаһы буйында урынлашҡан мәмерйәләр теҙмәһенең башҡортса Ямаҙыташ икәнен дә күптәр белмәйҙер, сөнки улар Игнатьев мәмерйәләре тип атала, йәнәһе, элек унда Игнат исемле ҡарт йәшәгән дә, шуға уның исеме бирелгән. Иҙрис мәмерйәһен хәҙергә тиклем күптәр Краснополь мәмерйәһе тип атап йөрөтә, ғәмәлдә уның дөрөҫ исеме - Иҙрис мәмерйәһе. Шөкөр, һуңғы йылдарҙа уның үҙ исеме тергеҙелде һәм йышыраҡ яңғырай башланы. Шул уҡ Йүрүҙән йылғаһы буйындағы, әммә Силәбе өлкәһенә ҡараған икенсе мәмерйә - Колокольная. Уның башҡортса атамаһы - Шайтанбикә. Атаманың килеп сығышы тураһында легенда ла бар. Бындай күренештәргә битараф булһаҡ, киләһе быуын ер-һыу атамаларының русса вариантын ғына телдә йөрөтәсәк, тип эс боша.

**(Дауамы 2-се биттә).**

## ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**Башҡортостанда 11-13 сентябрҙә V Халыҡ-ара "Евразия йөрәге" фестивале үтә. "Был ике ҡитғаны тоташтырырлыҡ йәш тауыштарҙы һәм башҡарыусыларҙы Өфөгә - Урал тауҙарына, Салауат Юлаев һәйкәле янындағы этнопаркка йыйыусы милли йыр-моң фестивале республикала бер нисә йыл рәттән үтә һәм халыҡҡа тәбиғи амфитеатрҙа ярым космик донъяны тыңлау - төрлө халыҡ йырсыларын һәм музыканттарын күреү мөмкинлеге биреүе менән дә уникаль булып тора", - тип билдәләй Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова.**

# МИЛЛИ КЕЙЕМ АША...

## рухты яңыртабыҙ



Фестиваль программаһының айырылғыһыҙ бер өлөшө - милли кейемдәгеләр парады булырға тейеш ине, тик ул был юлы билдәле сәбәптәр арҡаһында күмәк сара булараҡ кисектерелде. Әммә Башҡортостан Хөкүмәте ҡарары менән үткәрелеүсе Милли кейем байрамы ла ошо көндәргә тура килеүен иҫәпкә алып, республика райондары, ҡалалары һәм ауылдары кимәлендә милли кейемдәгеләр барыбер ҙә бер сафҡа теҙелеп, ошо рухи хазинаның гүзәллеген, илаһилығын күрһәтеү мөмкинлеген тормошҡа ашырҙы. Ошо саралар һәм Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы менән Өфө ҡала башҡорттары ҡоролтайының Өфөлә Милли музейҙа ойошторған милли кейемгә арналған түңәрәк ҡорондағы һөйләшеүҙәр тураһында гәзитебеҙҙең киләһе һанында уҡырһығыҙ.

12+

✓ *Ул атамалар барыһы ла башҡорт халҡының тарихын һөйләп торған, быуындан-быуынға тапшырылған берҙән-бер "тере" шаһит тип әйтә алабыҙ, сөнки улар беҙгә тиклем дә йәшәгән, әле лә йәшәй, беҙҙән һуң да йәшәргә тейеш.*



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

(Башы 1-се биттә).

# Алтаҡталарҙа ғына түгел, тораҡ пункттар, ер-һыу, тау-таш атамаларында хаталар күҙегеҙгә салынамы? Ғөмүмән, хаталарға иғтибар итәһегеҙме?

***Мәрйәм БУРАҠАЕВА, "Тормош һабаҡтары" дәреслеге авторы, Салауат Юлаев ордены кавалеры:*** Ғөмүмән, бөгөн хаталар - матур башҡорт теле баҡсаһын баҫып барған сүп үләне кеүек. Әйтеп, төҙәтеп тораһың, шул уҡ хаталар икенсе ерҙә тағы килеп сыға. Хаталы яҙыуҙарҙы төҙәтербеҙ ҙә ул, әммә телмәрҙәге хаталарҙы нисек бөтөрөргә? Мин "Бәйләнештә" социаль селтәрендә үҙ сәхифәмдә ошо тема буйынса фекер алышыу асып, хаталарҙы төҙәтеүҙе телмәребеҙҙән башлайыҡ, тигән мәсьәлә күтәрәм. Мәҫәлән, урам исеме русса "улица Кирова" тип әйтелһә, уны туранан-тура тәржемә итеп Кирова урамы тип әйтәбеҙ. Кирова урамы түгел ул, ә Киров урамы. Ленина урамы түгел - Ленин урамы. Цюрупы түгел, Цюрупа. Шулай уҡ был ауыл, ҡала, ҡасаба исемдәрен дөрөҫ әйтеүгә лә ҡағыла: "Мин Карповала йәшәйем", - тиҙәр. Карпов, Шамонин, Булгаков, Иҫәнғол, Мораҡ, Йөйәк, Йомағужа һ.б. - һәр беребеҙ, һис юғы, үҙебеҙ йәшәгән төбәкте дөрөҫ әйтһәк, башҡалар ҙа дөрөҫләр.




Халҡыбыҙ борон-борондан ғилемле булған. Астрономияны яҡшы аңлаған - ҡояштың да, айҙың да, йондоҙҙарҙың да ҡайҙалыр инеп китеп, килеп сыҡмауын белгән. Шуның өсөн: ҡояш ҡалҡа, ҡояш байый (ҡояш сыҡты түгел), ай ҡалҡты, яңы ай тыуҙы һ.б. тигәндәр.

Туғанлыҡ атамаларына ла иғтибарлы булайыҡ, йәштәргә өйрәтәйек. Юғиһә, хәҙер "ҡайны, ҡәйнә, бейем" урынына "атай, әсәй" тип әйтеү күҙәтелә башланы. Ғаиләлә ирле-ҡатынлы түгел, ағалы-һеңлелеләр йәшәй кеүек килеп сыға бит был. Төптәнерәк уйларға кәрәк. Шулай уҡ башҡорт "йәнле һөйләү теле", ти. Ә ни өсөн улайһа телмәребеҙгә "тере тауыш" тигәнде көсләп индерәбеҙ? Тере тауыш булғас, үле тауыш та буламы? Халыҡта, матурлабыраҡ һөйлә әле, әллә нисек һөйләүең йәнһеҙ, тигәнде ишеткән бар. Бөгөн иһә телмәребеҙ ошолай яңғырай: "Концерт шәп булды, йырсылар бөтәһе лә тере тауышҡа йырланы"...

Текә тау, текә яр йәки һөҙәк тау, һөҙәк яр була. "Текә" йырсы тигәнде аңлап етмәйем. Һуң "шәп" тигән һүҙ бит ул, тип аңлатырһығыҙ. Ә ни эшләп, шәп йырсы, тип кенә әйтмәҫкә? "Шәп бүләк отҡоғоҙ киләме?" - тиһәк, аңлашылмаймы ни? Ни өсөн текә самокат, текә телефон отторалар?

Беҙ сәскәне фәҡәт сәскә тибеҙ. Яһалма сәскә булһа, алдына исемдән яһалған сифат ҡушыла: ҡағыҙ сәскә, таҫма сәскә. Ундайҙы беҙ "үле сәскә" тимәйбеҙ. Ә "тере сәскә" тигәне ҡайҙан килеп сыҡҡан - "Йырсыны тере сәскәләргә күмделәр"... Тағы ла шуныһы - башҡорт донъяға бар булғанда уҡ, әле күбебеҙ әйткәнсә, ромашкалар булған. Әммә тәбиғәт балаһы - ололарыбыҙ уны "боланкүҙ", ә тармаҡлы булып үҫкән ваҡтарын "аҡсәскә" тип атаған. Ошондай матур атамаларыбыҙҙы юғалтмайыҡ, телебеҙгә хилафлыҡ килтермәйек, милләттәштәрем!

***Илдар Ғәбитов, Өфө ҡалаһы:*** Байтаҡ көсөмдө, ваҡытымды ошо хаталар менән көрәшеүгә бүлеп, Өфө ҡалаһы хакимиәтенең премияһын алған кеше булараҡ, был хаталар тураһында түбәндәге фекер менән уртаҡлашып китәйем. Бала саҡтан алып төрлө баҫмаларҙа, башлыса "Һәнәк" журналында, ошо көрәштең шаһиты булдым. Был хаталарҙың төп сәбәбе булып айырым вазифалы кешеләрҙең наҙанлығы тора тип уйлай торғайным. "Улица Рабкоров"ты "Һыйырҙар ҡоло урамы" тип тәржемә иткәндәрен күреп, аңланым: был айырым "йәшерен хөкүмәт" алып барған аҫтыртын сәйәсәт икән. Был хаталарҙы булдырмау өсөн республика Хөкүмәтенең тейешле ҡарарына ошо хаталарҙы баштан уҡ булдырмаҫлыҡ пункт индерергә кәрәк. Ана, тауар этикеткаларын хатаһыҙ яҙа алалар бит. Нишләп бында ла ошо шартты булдырмаҫҡа? Иң мөһиме, алтаҡталағы яҙыу эленгәнгә тиклем тикшерелергә тейеш, ул эленгәс, ни файҙа! Тел өсөн көрәшкәндәргә генә артыҡ эш...

***Илузә ҒӘЙНУЛЛИНА, Әбйәлил районы, Таштимер ауыл биләмәһе депутаты:*** Беҙҙең ауылда Мунсыҡ йылғаһы аға. Ололар ҙа, ауылдаштар ҙа уны барыһы ла ошо атама менән белә һәм шулай тип атап йөрөтә. Әммә алтаҡтала уны Йәнгел (Янгелька) тип яҙалар. Беҙ был йылғаның үҙ атамаһын ҡайтарыу өсөн эшмәкәрлек алып барып ҡараныҡ. Тәүҙә атаманы үҙгәрттеләр ҙә, бер айҙан һуң ҡабаттан Йәнгел тип яҙылған алтаҡта ҡуйылды. Мәсьәләне артабан юллап йөрөй торғас, шул асыҡланды: күпер төҙөү проектында ул Йәнгел тип атала һәм йылғаға үҙ исемен ҡайтарыу өсөн проектты үҙгәртергә кәрәк. Ә проектты үҙгәртер өсөн Рәсәйҙең һыу реестрына үҙгәрештәр индереү зарур, сөнки был исемлектә йылға Йәнгел тип теркәлгән. Ҡыҫҡаһы, әгәр ер-һыу, йылға-таш һ.б. атамалар, йәғни объекттар реестрға халыҡ араһында йөрөгән атама менән инмәгән икән, уларҙы үҙгәртеүе һәм алтаҡталарҙы алмаштырып ҡуйыуы еңел түгел. Бындай проблема бер беҙҙә генә түгелдер, тип уйлайым. Һәр урында ла ер-һыу, тау-таш атамаларының шулай халыҡ телендә генә ҡалған һәм йәшәгән атамалары барҙыр, моғайын. Уларҙы кире ҡайтарыу йәһәтенән БР Дәүләт Йыйылышы депутаттары инициатива менән сыҡһын ине.

Ә әлегә беҙ, Таштимер ауылы халҡы, һөйләшеп, аҡса йыйып, урындағы властарҙан рөхсәт алып, күпергә етәрәк йылғаның башҡортса атамаһын, уның тарихын яҙып, баннер эшләтеп ҡуйырға тип планлаштырабыҙ.

***Миңһылыу УСМАНОВА, филология фәндәре докторы, БР Хөкүмәте ҡарамағындағы Терминология комиссияһы етәксеһе:*** Географик объекттарҙың дөрөҫ яҙылыуын, дөрөҫ әйтелешен кире ҡайтарырға кәрәк. Һуңғы ваҡытта урындарҙа был йүнәлештә бик дөрөҫ эш алып баралар. Сөнки ошо атамаларҙы боҙоу арҡаһында халҡыбыҙҙың тарихы юғала, тарихы боҙола. Ул атамалар барыһы ла башҡорт халҡының тарихын һөйләп торған, быуындан-быуынға тапшырылған берҙән-бер "тере" шаһит тип әйтә алабыҙ, сөнки улар беҙгә тиклем дә йәшәгән, әле лә йәшәй, беҙҙән һуң да йәшәргә тейеш. Мәҫәлән, Ырымбур өлкәһе архивында эшләгәндә ундағы ауылдарҙың һыҙмаларын ҡараным. Ундағы Шарлыҡ районындағы Преображенка тигән ауылдың исеме ошо документта йәйә эсендә "Сыскан-Сайыскан" тип яҙылған. Һуңынан мин уның нимә аңлатҡанын эҙләп, артабан тикшерә башланым. Кузеевтың китабының артында карта бар, шунда Сысҡан-Һайыҫҡан тигән атаманың Бөрйән ырыуына ингән ара исемдәре икәне күрһәтелгән. Тимәк, шул ваҡытта Преображенка ауылының территорияһында Бөрйән ырыуы кешеләре йәшәгән булып сыға. Әле лә ошо ауыл эргәһенән аҡҡан йылғаның исемен дә урыҫтар Сысканчик тип атай. Шуға күрә географик объекттарҙың исеменә бик һаҡ ҡарарға кәрәк, уларҙы юғалтырға ярамай. Уларҙың беҙҙең башҡорт атамаһы икәнен тергеҙеп ҡалдырырға тырышыу зарур. Бының өсөн атамаларҙы йыйырға, легендаларын өйрәнергә һәм яҙып ҡалдырырға кәрәк. Был бик мөһим һәм ҙур эш. Ғөмүмән, дөрөҫ тәржемә ителмәгән, исеме дөрөҫ булмаған географик объекттар тураһындағы мәғлүмәттәр иң тәүҙә урындағы халыҡтың күҙенә эленергә, улар саң ҡағырға тейеш. Бына әле Премьер-министр урынбаҫары вазифаһына Фәнүр Мөхәррәм улы Йәғәфәров килгәс, Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһындағы законды ғәмәлгә ашырыу буйынса комиссия, шулай уҡ ошо комиссия эсендәге Терминология һәм Топонимика хеҙмәттәре үҙ эшен әүҙемләштерергә тора. Был хеҙмәттәр халыҡтың хаттары, мәғлүмәттәренә таянып, һуңғы ваҡытта ысынлап та ишәйеп киткән хаталарҙы төҙәтеү эшен көйләп ебәрергә тейеш.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**яҙып алды.**

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

## ТӘРТИПКӘ...
### ил менән өйрәнәләр йә ил менән өйрәнмәйҙәр



**Йәмғиәттә төрлө тәртип һәм ҡағиҙәләр йәшәй, уйлап сығарыла, барлыҡҡа килеп, юғалып тора. Миҫалға алғанда, бөгөн, мәҫәлән, йәмәғәт урындарында тәмәке тартмаҫҡа, киске ун берҙән һуң спиртлы эсемлектәр һатмаҫҡа, дауахана һымаҡ урындарға бахилалар кейеп инергә һәм һуңғы айҙарҙа биткә битлек кейеп йөрөргә тигән ҡағиҙәләр йәшәй. Былар ниндәйҙер дөйөм тәртип булдырыу, сәләмәтлеккә зыян килтермәү һәм шундай төрлө мөһим сәбәптәр арҡаһында барлыҡҡа килгән. Ҡағиҙәләрҙе тотоусылар ҙа, шул уҡ ваҡытта инҡар итеүселәр ҙә бар.**

Иртәнсәк эшкә килгәндә автобуста күңелһеҙ күренештең шаһиты булдым. Вирустан һаҡланыу һәм санитар нормаларҙы тотоу өсөн биткә битлек кейеп йөрөү ғәҙәткә инде бит инде. Инергә тейеш ине, һәр хәлдә. Тик беҙҙең ил халҡы тәртипте тотоу урынына уны нисе-

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓11 сентябргә мәғлүмәттәр буйынса Башҡортостанда коронавирус йоҡтороуҙың 30 осрағы теркәлгән. Пандемия башланғандан алып Башҡортостанда бөтәһе 8131 COVID-19 осрағы раҫланған. Әле 490 кеше сирләй, коронавирустан вафат булыусылар һаны үҙгәрешһеҙ ҡалып, 30 кеше иҫәпләнә. Һуңғы тәүлектә 88 кеше дауахананан сығарылған, 7611 кеше һауыҡҡан. Рәсәйҙә барлығы 1 051 874 кешенең коронавирус менән сирләүе билдәле. Үлеүселәр һаны 18 365 кеше. Һуңғы тәүлектә 5504 яңы осраҡ теркәлгән, шул уҡ ваҡытта 5734 кеше һауыҡҡан.

✓Башҡортостанда яңы коронавирус инфекцияһы йоҡторған 323 уҡыусы өйҙән тороп уҡыуға күсте. COVID-19 менән сирләү осраҡтары Ишембай, Мәләүез һәм Иглин райондарында теркәлгән, тип хәбәр итте мәғариф министры Айбулат Хажин. "Һәр осраҡта алгоритм буйынса эш ителә. Ике сәғәт эсендә Роспотребнадзорҙың территориаль идаралығына һәм Һаулыҡ һаҡлау министрлығына мәғлүмәт ебәрелә. Бәйләнештә булғандар, шул иҫәптән уҡытыусы (кәрәк булһа) дистанцион режимға күсә. Мәктәпкәсә учреждениелар менән дә шулай уҡ", - тине Башҡортостандың Мәғариф министрлығы етәксеһе.

✓Уҡытыусылар коронавирусҡа ҡаршы вакцинаны үҙ теләгенә ҡарап яһатырға мөмкин, уларҙы прививка эшләтергә мәжбүр итмәйҙәр, тип белдерҙеләр Мәғариф министрлығынан. Министрҙың беренсе урынбаҫары Дмитрий Глушко әйтеүенсә, "Балаларҙан да бер кем дә тест алмай, төп бурыс - ингән урында сифатлы контроль ойоштороу, ул юғары температуралы балаларҙы асыҡларға мөмкинлек бирергә тейеш. Балалар бик аҙ сирләгәнгә күрә, төп иғтибар мәктәптә эшләгәндәргә: уҡытыусыларға, етәкселеккә".

✓Эшһеҙ граждандар сентябрь айында балиғ булмаған һәр балаға түләү ала. Тейешле ҡарар Рәсәй Хөкүмәте сайтында баҫылған. Балаһы булған һәр эшһеҙ эшһеҙлек буйынса пособиеға 3 мең һум алырға тейеш. Түләүҙәр билдәләнгән тәртиптә эшһеҙ тип танылған һәм 18 йәшкә тиклемге балалары булған 2,8 миллионға яҡын кешегә өҫтәмә социаль ярҙам булып тора. Ошо маҡсатҡа аҡса - 8,5 миллиард һум - федераль бюджеттан бүленә.

✓ *Индерелгән тәртиптәргә ҡаршы сығыусыларҙа еңәйәтселек башланғысының йәшерен күренештәре йәшәй. Кеше араһында тәртип боҙоуҙар, ҡуйылған талаптарға ҡаршы сығыу ынтылышы тап ошоноң күрһәткесе икән.*



*БЫНАҒАЙЫШ!*

**Телетапшырыуҙарҙы, айырыуса ҡыҙыҡлыраҡ фильм-сериалдарҙы ҡарап бөткәнсе сәсең ағарыр. Зәңгәр экрандарҙа барған көсөргәнештән дә түгел, ә шундағы әкиәти иллюзиянан ысынбарлыҡҡа ҡайтарыусы һуңғы ваҡыт әүҙемләшә төшкән SOS кадрҙарҙан.**

# АҠСА ҠОТОРОҒО ЛА - ЭПИДЕМИЯ

Телетапшырыуҙы 5 минут һайын бүлдереп, 10-ар минутҡа һуҙылған әрһеҙ реклама ролигында бирелһә лә, әлеге кадрҙарҙы реклама тип әйтергә һис тел әйләнмәй. Һуңғы ваҡыт ауырыу, зәғиф балаларҙы дауалауға аҡса йыйыу маҡсатында ана шулай ярҙам һорап мөрәжәғәт итеүҙәр йышайҙы. Күрәһең, сирле сабыйҙар һаны ла арта бара һәм был яҡшы, етеш, социаль имен тормоштан түгел, әлбиттә, уныһын дәлилләп тороу кәрәкмәй. Хәйер, тормошобоҙ кимәленең ике ҡапма-ҡаршы ҡотопҡа бүленеп, байҙар менән ярлылар араһының бер-берененән алыҫлаша, һыуына барыуына дәлилдәр артабан булыр түбәндәрәк.

Үҙе фәҡирлек сигендә көн күрһә лә, ябай халыҡтың күңеле ҡатмаған, шөкөр: мөмкинлектәренән сығып, 50-шәр, 100-әр тәңкәләп булһа ла, шул сирле балалар иҫәбенә аҡса күсереүселәр байтаҡ икән. Айырыуса пенсионерҙар араһынан. Тиндәрҙән һумдар йыйыла, тинәләр ҙә, барыбер кәрәкле сумма йыйылмай йә уны туплау бик оҙаҡҡа һуҙыла, ә сир аҙа йә инде аҡсаның кәрәге лә ҡалмай - ул һуңлай. Ә дауалау хаҡтары көндән-көн ҡимммәтләнә бара, айырыуса, әгәр ата-әсәнең сит ил табиптарына көндәрә төшһә. Ә бына ошо мәлдә ил менән идара итеүсе власть әһелдәре майҙа йөҙә. Улар араһында иң байҙары - депутаттар һәм ҡайһы бер министрҙар.

"АиФ" аҙналыҡ гәзитенең ошо айылғы 34-се һанында "Беҙҙең власть бер йылда күпме аҡса эшләгән" тигән баш менән аҡылы камил кешене аяҡтан йығырлыҡ ғибрәт мәғлүмәттәр биргән инфографика баҫылып сыҡты. Рейтинг лидеры Камчатканан сенатор В.Пономарев. Ул бер йыл эсендә 2,76 млрд (!) килем алған. Унан ҡала - Дәүләт Думаһы депутаты Г.Аникеев - 2,34 млрд һум "эшләгән". Шулай уҡ бер йыл эсендә. 3-сө урында РФ сәнәғәт һәм сауҙа министры Д.Мантуров - 586 млн, артабан вице-премьер Д.Чернышенко - 432 млн, уға етәгеләре РФ Президентының Алыҫ Көнсығыштағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Ю.Трутнев - 180 млн, РФ ауыл хужалығы министры Д.Патрушев - 159,9 млн, РФ Дәүләт Думаһы спикеры В.Володин - 100 млн. Артабан 50 млн һумдан кәмерәк йыллыҡ килем алыусыларҙан РФ Һалым хеҙмәте башлығы Д.Егоров, "Роскосмос" башлығы Д.Рогозин, Рәсәй "Сбербанк" рәйесе Э.Нәбиуллина, Федерация Советы спикеры В.Матвиенко һәм башҡалар. 6 сенатор һәм уларҙың ғаиләһенен, Дәүләт Думаһының 12 депутатының, 14 парламентарий ҡатындарының Франция-



яла, Испанияла, Италияла, Германияла, Бөйөк Британияла, Швейцарияла, Кипрҙа, Черногорияла, Болгарияла күсемһеҙ милектәре бар. Төбәк депутаттары ла юғары рангтағы "халыҡ ялсыларынан" ҡалышмай икән. Әлеге лә баяғы, "алтын балыҡ"ты ҡулға төшөрөп, үҙҙәренә хеҙмәт иттереүсе һәм Үҙәк контроленән ауыраҡ, әллә уларға ла өлөш сығарыусы Камчатка эшмәкәрҙәренән берәү - урындағы депутат И.Евтушок бер йылда 2,35 млрд һум килем алған. Шул әкиәттәге "алтын балыҡ"тың ғына эше инде был. Әлек ҙур ғына бер компанияның хужаһы булып эшләп алған Төмән депутатының килеме иһә бер йылда 4 тапҡырға арттан һәм йөмгеһе 143 млрд һум тәшкил итә. Бынан тыш, уның 51 ер участкаһы бар. Их, мең йәшәгер Лев Толстой бөгөн иҫән булһа, кешегә күпме ер кәрәген төшөндөрөп бирер ине бындай ҡомһоҙҙарға...

Коронавирус нимә ул, беҙҙең власть чиновниктары, депутаттар араһында унан да хәүефлерәк эпидемия - аҡса ҡотороғо таралған һәм ныҡлы тамырланған: буржуйҙар туҡтай алмай аҡса туплай ҙа аҡса туплай (әллә урлай - этем белә...), йәғни улар, күрәһең, туя белмәү билдәһе - булимия менән яфалана меҫкенкәйҙәр. Был осраҡта аҡсаға туйына алмау сиренә ҡарата ла тап ошо термин урынлы булыр.

Былар хаҡында яҙғанда әлеге зәңгәр экрандарҙан, гәзит биттәренән ярҙам көтөп, өмөт менән төбәлгән сирле балаларҙың ялбарыулы ҡараштары күҙ алдынан китмәй. Ошо сама байлыҡ эйәләре, әҙәп өсөн генә булһа ла, исмаһам, сирле балаларҙы ҡотҡарыу фонды булдырып, бер аҙ ғына аҡса күсереп барһалар, күпме сабый ғүмерҙәрен ҡотҡарырға ярҙам итерҙәр, сауаплы булырҙар ине. Юҡ, үҙҙәренең һәр тине иҫәпле, ә бына закон уйлап сығарыу ирке үҙ ҡулдарында булғас, ябай халыҡтың хәйерсе аҡсаһына яҫҡына әле улар: нисек тә хәләл көсө менән үҙ көнөн күрергә тырышҡан кешеләргә "үҙмәшғүлдәр" ҡушаматы тағып, уларҙан һалым түләтеп, кәмһетәләр, мыҫҡыл итәләр. Яңыраҡ ҡына "Бизнес-ФМ" радио каналы ана шундай бер ғибрәт хәл хаҡында бәйән итте. Ярославль ҡалаһынан үҙ автомобилендә Мәскәүгә юлланыусы бер водитель Бла Бла Кар сервис хеҙмәте аша үҙенә бер юлдаш ултыртып ала. Мәскәүгә еткәс, быларҙы гаишниктар туҡтата һәм законһыҙ эшҡыуарлыҡта (!) ғәйепләп, водителдән штраф түләтәләр, ә машинаһын штраф туҡталҡаһына ҡыуып алып китәләр...

Шулай итеп, Рәсәй законында ябай кеше кесәһенә инеп ятҡан 500 тәңкә лә хатта (юл хаҡы) күренеп бара һәм ҙур килем иҫәпләнә, тик ниңәлер был закондар "халыҡ ялсылары"ның үҙҙәре өсөн генә эшләмәй. Улар кесәһен бүсергән хәрәм малда бер кемдең эше юҡ, уларҙың миллиондары законлылығын тәпсенөүсе лә юҡ: "гонаһ"тан ары тороуың хәйерле, үҙеңә ҡиммәткә төшөүе бар, тип ҡурҡалар, ахыры, контроль органдары, һәр кемгә лә үҙенең йылы урыны ҡәҙерле шул...

Яңыраҡ ҡолаҡҡа салына бирепә ҡалған хәбәр - чиновник һәм депутаттарҙың хәләл килем икәне иҫбат ителмәгән милкен һәм аҡсаларын конфискациялау һәм Пенсия фондына күсереү ниәте тураһындағы һүҙ имеш-мимеш кенә булып сыҡты, ахыры. Әллә был пауза байҙарға аҡсаларын йәшереп өлгөрөргә, килем "легендалары" уйлап сығарырға "таймаут" булдымы, юғиһә? Һәр хәлдә, закон уларҙың үҙ ҡулдарында, ә үҙҙәре ултырған ботаҡҡа үҙҙәре балта сабырға депутат һинә Хужа Насретдин түгел...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

---

гәрәк итеп боҙоу юлдарын яҡшыраҡ башҡара шул. Битлекһеҙ йөрөгән пассажирҙар ҙа етерлек. Автобустарға был хаҡта аҡыл райтып яҙып ҡуйылған, водителдәр ҙә ураған һайын оло ҡағыҙәне иҫкәртә, юҡ, халыҡҡа ул һеңмәй. Барыһы ла түгел, әлбиттә, әммә был ҡағыҙәгә буйһонмаусылар ҙа етерлек.

Бына автобусҡа тикшереү органдары вәкилдәре килеп инде һәм граждандарҙан битлек талап итте. Тәртип боҙоуҙары өсөн ғәфү үтенеп, башҡаса был хәл ҡабатланмаясаҡ, тип вәғәҙә биреп ҡотолоп ҡалыу урынына әлеге ҡағыҙә боҙоусылар: "Мин нимә, ауырыуға оҡшағанмынмы?", "Уйлап сығарылған вирус менән ялҡыттығыҙ",- тигән репликалар менән әрепләшергә тотонмаһынмы! Транспортта оло ғауға сығып китеп, автобусты туҡтатып, битлекһеҙҙәрҙе административ штрафҡа тарттырыу өсөн төшөрөп ҡалдырҙылар. Тик торғанда, бер битлек өсөн ун биш меңгә тиклем штраф түләүгә дусар булды шул арҡырыбаштар.

Кис һайын һуғылып ҡайта торған супермаркетта йыш ҡына Азия халҡын осратам, ғаиләләре менән магазинға инәләр (күрше подъезда йәшәйҙәр). Һәр ваҡыт битлектәрҙә, балаларына тиклем бирсәткәләрҙә. Магазиндан сыҡҡанда антисептиктар менән бер-берененә һиптереп, бирсәткәләрен алмаштырып китәләр. Ә күптәр салонға битлекһеҙ үтеү өсөн һаҡсылар менән һүҙгә килешеп, бушлай бирелгән бирсәткәләрҙе лә кеймәй ҡарылаша. Бына ошо бәләкәй генә сағыштырыу ҙа халыҡтарҙың тәртипкә илдәре менән өйрәнә, өйрәнмәһә, илдәре менән өйрәнә алмай икәнен күрһәтә лә.

Беҙҙә бит йәмәғәт урындарында борхотоп тәмәке тартыу ғәҙәти күренеш, "Тартмаҫҡа" тигән яҙыу аҫтында ла тороп тәтәтергә мөмкиндәр. Бер көн туҡталышта ике үҫмер ҡыҙ бер сигаретты алмашлап быҫҡыталар, үҙҙәре ямғырҙан ҡасып, туҡталышҡа тулған кешеләргә һыйынған. Нисә кеше өндәшһә лә, шелтәләһә лә, ҡыҙҙар тыңламаны. Кеше балаһының ҡулына һуғып булмай, күптәр ошоно белеп, хатта һүҙ ҙә әрәм итмәй. Йәмғиәт өндәшмәй, күнә, күҙ йома. Икенсенән, ошо хәлдә төртөп күрһәтеп, яҙаға тарттырыуҙы һорарлыҡ власть вәкилдәре лә юҡ. Тәртип яҙылған, әммә уны үтәүҙе контролдә тотоу уйланылмаған.

Шулай уҡ магазинда кистәрен сәғәт 11 тулып үткәндән һуң да спиртлы эсемлек алам тип ғауғалашҡан һатып алыусыларҙы осратырға була. Улар был ҡағыҙәне белә, әммә алкоголь тотоп, кассаға килеп баҫалар. "Ғәфү итегеҙ, ваҡытты ҡарамағанмын", тип кенә китер урынға, илде, закондарҙы һәм мотлаҡ кассирҙы һүгеп, тауыш сығарып ҡуйыуҙы хуп күрәләр.

Ҡағыҙәләргә буйһонорға теләмәү индивидлыҡ күрһәткесе лә, үҙаллылыҡ та, башҡаларҙан аҡыллыраҡ, белемлерәк булыу ҙа түгел, ә мәҙәниәтһеҙлек, эске хаос, агрессия, үҙ-үҙең менән ҡәнәғәт була белмәү, үҙеңде ҡабул итмәү ул. Психологтар әйтеүенсә, индерелгән тәртиптәргә ҡаршы сығыусыларҙа енәйәтселек башланғысының йәшерен күренештәре йәшәй. Улар быны үҙҙәре лә белмәҫкә мөмкин, әммә кеше араһында тәртип боҙоуҙар, ҡуйылған талаптарға ҡаршы сығыу ынтылышы тап ошоноң күрһәткесе икән.

Шулай итеп, йәмәғәт тәртиптәренә буйһоноу, дәүләт тарафынан индерелгән ҡанундарҙы тотоу һәр кемдең шәхси тәрбиәһе лә ул.

**Әлиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

---

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Росстат мәғлүмәттәре буйынса, Башҡортостанда ағымдағы йылдың 7 айында былтырғы ошо уҡ осорға ҡарағанда 1083 сабыйға аҙыраҡ тыуған. Ғинуарҙан июлгә тиклем республикала 23 599 бала донъяға килгән, 2019 йылда ошо уҡ ваҡытта 24 642 бала тыуған. 2020 йылдың тәүге 7 айында Башҡортостанда 31 470 кеше вафат булған, был бынан алдағы осорға ҡарағанда 2 283 кешегә күберәк (29 187). Халыҡтың тәбиғи кәмеүе - 7 911 кеше.

✓"Полекс Урал" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте һөт һәм аҙыҡ-түлек сәнәғәте өсөн полипропилендан төргәкләү һауыты һәм юғары сифатлы бер тапҡыр ҡуллана торған һауыт-һаба етештереү буйынса ҙур сәнәғәт предприятиеһы булып тора. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров предприятиеның эшмәкәрлеге менән танышты. Предприятие Рәсәй баҙарының яҡынса 30 процентын тәьмин итә. Уның клиенттар базаһы - Рәсәй буйынса 300-ләгән компания, завод һәм Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһенән 25 компанияһы.

✓Башҡортостанда өлкән йәштәге граждандарға капиталь ремонт өсөн түләүгә компенсацияны 2022 йылдың 31 декабренә тиклем оҙайтырға йыйыналар. Республика Дәүләт Йыйылышы депутаттары законға тейешле төҙәтмәләр индерергә йыйына. Льготаға яңғыҙ йәшәгән эшләмәгән милекселәр йәки бергә йәшәгән эшләмәгән граждандарҙан торған ғаилә составында йәшәгәндәр, эшләмәгән I һәм II төркөм инвалидтары хоҡуҡлы. Етмеш йәшкә еткән граждандарға льгота - 50 процент, 80 йәшкә еткәндәргә 100 процент күләмендә бирелә.

✓Башҡортостанда ҡарттар йорттарында урындар һанын арттырырға һәм стационар учреждениеларҙа уңайлы шарттар булдырырға ниәтләйҙәр, тип хәбәр итте республиканың ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрының беренсе урынбаҫары Юрий Мельников. Уның һүҙҙәренсә, әле министрлыҡ ике стационар социаль хеҙмәтләндереү объекты - "Именлек" республика геронтология үҙәгенең торлаҡ комплексын һәм Благовещенда өлкән йәштәге граждандар өсөн 60 урынлыҡ торлаҡ корпусты төҙөүгә аҡса бүлеү өсөн Федераль адресլы инвестиция программаһына ғаризалар әҙерләй.

✓ **Предприятие директоры Эдуард Давыдов ҡыҫҡартыуҙар планлаштырылмауын, ә улар, нигеҙҙә, Башҡортостан Хөкүмәтен шантажлау ысулы булыуын таныны.**



ҠЫҪҠАСА

# ИКМӘК БУЛА!

✓ **Быйылғы уңыш һуңғы бер нисә йылда иң юғарыларҙың береһе булырға вәғәҙәләй.** Бөтә культураларҙы йыйыу тамамланғас, уның 4 миллион тоннанан ашыуыраҡ булыуы ихтимал. Башҡортостан вице-премьеры - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә майҙандарҙың 80 проценты йыйып алыныуы хаҡында һөйләне. Был - 1 миллион 415 мең гектар. "Республика игенселәре бөтәһе 3 миллион 198 мең тонна иген йыйып алған, уртаса уңыш - гектарынан 22,6 центнер, был уҙған йылғы күрһәткестән 2,9 центнерға күберәк", - тип билдәләне Илшат Фәзрахманов. Республиканың ун районы 100 мең тоннанан ашыу яңы уңыш йыйған. Мәҫәлән, Илеш районында игендең тулайым йыйымы 167 мең тоннанан, Саҡмағошта - 159 мең тоннанан, Стәрлетамаҡ районында 155 мең тоннанан күберәк. Саҡмағош, Илеш, Ҡырмыҫҡалы, Бүздәк, Дәүләкән, Дүртөйлө райондары, һәҙәттәгесә, иген культуралары уңышы буйынса алдынғылыҡты бирмәй.

✓ **Дәүләт комитеты һәм Мәғариф министрлығы менюҙың өс вариантын әҙерләгән, муниципалитеттар шулар араһынан тейешлеһен һайлап алған. Беренсе сменала уҡыған бала иртәнге аш менән тәьмин ителергә тейеш.** Икенсе сменала уҡыусыларға төшкө аш бирелә. Иртәнге аш еңел ашамлыҡтан, ҡайнар ризыҡтан һәм ҡайнар эсемлектән торорға тейеш, йәшелсә, еләк-емеш индерергә тәҡдим ителә. Төшкө аш - еңел ашамлыҡ, беренсе, икенсе (төп ҡайнар ризыҡ - ит, балыҡ йәки ҡош ите) һәм татлы ризыҡ. Башҡортостанда федераль һәм республика бюджеттары аҡсаһы иҫәбенә 1-4-се класс уҡыусылары һәм ишле аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙән 5-11-се класс уҡыусылары - бер тапҡыр бушлай ҡайнар аш, һаулыҡ мөмкинлектәре сикле һәм инвалид балалар - ике тапҡыр бушлай аш менән тәьмин ителә.

✓ **Башҡортостан биләмәһендәге урмандарҙа законһыҙ ағас ҡырҡыу күләме кәмей. Әйтәйек, быйыл 8 айҙа законһыҙ әҙерләнгән ағас күләме 4,4 мең кубометр тәшкил иткән, был 2019 йылдың ошо уҡ осоро менән сағыштырғанда ике тапҡырға аҙыраҡ.** "Ыңғай һөҙөмтәләргә өлгәшелде, тәү сиратта, урмандарҙы файҙаланыуҙы йыһандан тикшереү арҡаһында, - тип билдәләне Башҡортостан Республикаһының урман хужалығы министры Марат Шәрәфетдинов. - Быйыл мониторинг республиканың 10 урмансылыҡ биләмәһендә (дөйөм майҙаны - 2,1 миллион гектар) үткәрелә, был урман фонды биләмәһенең 40 процентын тәшкил итә. Мониторинг һөҙөмтәһендә 30 проценттан ашыу законһыҙ ҡырҡыу асыҡланды". Урман ведомствоһы башлығы һүҙҙәренсә, хоҡуҡ һаҡлау органдары менән һөҙөмтәле хеҙмәттәшлек яйға һалынған. Әйтәйек, 2020 йылдың тәүге ярты йыллығында ике оператив-иҫкәртеү операцияһы уҙғарылған һәм урман үҫентеләрен законһыҙ ҡырҡыуҙың 128 осрағы асыҡланған, ә сентябрҙә сираттағы "Урман" операцияһы планлаштырылған.

✓ **Башҡортостандың Хәйбулла районы баҫыуҙарының 151 гектар майҙанында хәүефле ҡый үҫемлек - тимрәү үләне таралыу сәбәпле, Россельхознадзор белгестәре 600 гектар майҙанда фитосанитар карантин иғлан итте.** Был Башҡортостанда теркәлгән тәүге осраҡ. Тимрәү үләненең орлоҡтар менән таралыу ҡурҡынысы бар, айырыуса уның бойҙай араһында таралыу хәүефен киҫәтеү кәрәк, сөнки уның тамырҙарындағы фенол һәм башҡа токсиндар йәнәш үҫкән культураларҙы ағыулай, бойҙайҙың сифатын боҙа, ондан әсе тәм килә. Был үләнде ашаған һыйырҙарҙың һөтө лә әскелтем тәм бирә, ә йылҡы малы унан бөтөнләй һәләк булыуы ла бар, шуға күрә тимрәү үләне үҫкән урындарҙа мал көтөү ҡәтғи тыйыла. Район халҡына, шулай уҡ фермерҙарға карантин мәлендә белгестәр кәңәшен теүәл үтәү, иғтибарлы булыу кәрәк. Район биләмәһенән продукцияны фитосанитар сертификат булған осраҡта ғына ситкә сығарырға рөхсәт ителә.

ТӨРЛӨҺӨНӨН

# ШИК АҪТЫНА ҠУЙМАҠСЫЛАР

**Башҡортостан сода компанияһының Директорҙар советы РФ Президентының йөкләмәһен - предприятиены, шәхси ҡулдарҙа булған акцияларҙы дәүләт файҙаһына кире ҡайтарыуҙы - шик аҫтына ҡуя. Ошо көндәрҙә Григорий Рапота етәкселегендә Директорҙар советының ултырышын үткәреүҙең төп маҡсаты ошо, тип белдерә макроиктисад буйынса белгес Илдар Хәсәнов.**

"Акционерҙар көн тәртибенән артта ҡалған, улар һаман да үҙҙәрен предприятиеның тулы хоҡуҡлы хужаһы тип уйлай, сөнки улар һәр ваҡыт бөтөн нәмәне үҙҙәре хәл итеп өйрәнгән, ә бында беренсе тапҡыр "тештәрен һындырҙылар". Экология йәһәтенән, технологияларҙы камиллаштырыу буйынса ташламалар һарға әҙерлектәрен белдерһәләр ҙә, хәҙер улар менән кем һөйләшер икән, улар һөйләшеүҙәр алып барыу процесында икенсе яҡ булып тора аламы - бына был мөһим мәсьәлә", - ти Илдар Хәсәнов. Уның менән политолог Дмитрий Журавлев та килешә

БСК-ның Директорҙар советы һәм менеджменты уларҙың төбәк власын шантажлау ысулы эшләмәүен аңланы, сөнки низағ юғары федераль кимәлгә сыҡты, тип иҫәпләй Илдар Хәсәнов. "Шул уҡ ваҡытта улар үҙҙәрен предприятиеның контроллөүсе акционерҙары кеүек тота һәм һөйләшеүҙәргә өмөтләнә. Ләкин һөйләшеүҙәр ваҡыты үтте, минеңсә, барыһы ла судта хәл ителәсәк һәм, әлбиттә, власть еңеп сығасаҡ", - ти ул.

БСК-ның Директорҙар советы ултырышында акционерҙар һәм етәкселек вәкилдәре ғәмәлдәге яткылыҡта эзбиз запасы 2027 йылға тиклем етәсәк, тип белдерҙе. Өҫтәүенә, предприятие директоры Эдуард Давыдов ҡыҫҡартыуҙар планлаштырылмауын, ә улар, нигеҙҙә, Башҡортостан Хөкүмәтен шантажлау ысулы булыуын таныны. Уның һүҙҙәренсә, предприятие шулай уҡ экологик программаларға һәм производстволы модернизациялауға күберәк сығымдар тотонорға әҙер. Уның һүҙҙәренсә, предприятие, йәнәһе, Стәрлетамаҡтың ике предприятиеһында дөйөм күләме 2,2 миллиард һум булған экологик проекттарҙы тормошҡа ашырырға планлаштырған. Аныҡлап әйткәндә, статик тоҡомдарҙа тәрәнлеге 2 километр булған Төньяҡ-көнбайыш скважиналар комплексы төҙөргә ниәтләгән. Улар аша билдәле "Аҡ дингеҙ" һаған шыйыҡлыҡ түгеләсәк, 500 миллион һум торған проект уларҙың Ағиҙел йылғаһына әлегеүен 50 процентҡа кәметәсәк. Был проектты тиҫтә йыл осоронда тормошҡа ашырыу планлаштырыласаҡ.

Бер нисә йыл элек тә компания сода производствоһының ҡалдыҡтарын ҡулланыу һәм шулай итеп "Аҡ дингеҙ"ҙе кәметеү планы тураһында белдергәйне инде. Ул ваҡытта һүҙ дистиллирланған шыйыҡлыҡты фильтрлау тураһында бара ине. Уны ҡулланыуға индереү өсөн БСК 600 миллион һум тотонорға тейеш ине. Яңы ҡоралам ярҙамында ойошма сода производствоһының карьерҙарҙы һәм ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтарын рекультивациялауҙа ҡулланыласаҡ минерал продукт алырға ниәтләнеүен белдергәйне. Әммә "Аҡ дингеҙ" проблемаһы әлегә тиклем хәл ителмәгән. Юғары концентрациялы тоҙҙар иретмәһенән торған производство ҡалдыҡтары тирә-яҡ мөхиткә, атап әйткәндә, Ағиҙел йылғаһына ағыҙылыуҙы һәм тирә-яҡ мөхиткә кире йоғонто яһауҙы дауам итә.

# ЯРАТТАР ҠЫУАНДЫ

**Баймаҡ районы Ярат ауылында фельдшер-акушерлыҡ пункты былтыр октябрь айында төҙөлә башлаған. Проект-смета документацияһы халыҡтан аҡса йыйыу һәм Мырҙаҡаев крәҫтиән-фермер хужалығының бағыусылыҡ ярҙамы иҫәбенә эшләнгән.**



Бөгөн Баймаҡ районына эш сәфәре менән килгән Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров яңы фельдшер-акушерлыҡ пунктының эше менән танышты. Әйткәндәй, ул - ошо ауылға килгән тәүге республика етәксеһе, шуға күрә ауыл халҡы республика Башлығын ҙур түҙемһеҙлек менән көттө һәм Радий Хәбировты бик йылы ҡабул итте. Баймаҡ районы хакимиәте башлығы Фәнис Әминев әйтеүенсә, ауылдың иҫке фельдшер-акушерлыҡ пункты 1976 йылда уҡ төҙөлгән, уны хатта ремонтларға рөхсәт ителмәгән. Хәҙер медицина учреждениеһы барлыҡ заманса талаптарға яуап бирә, халыҡ уңайлы шарттарҙа медицина ярҙамы алырға мөмкин. Ярат фельдшер-акушерлыҡ пункты 296 кешене хеҙмәтләндерә, уларҙың 52-һе - бала, 119-ы - пенсионер.

"Баймаҡ районы Ярат ауылы халҡы өсөн яңы фельдшер-акушерлыҡ пункты күп осраҡта - ҡотолоу сараһы. Хәҙер район үҙәгенә тиклем 46 саҡрым барырға кәрәкмәй, яңы ФАП-та дауалау өсөн бөтә нәмә бар. Иң мөһиме - был фельдшер-акушерлыҡ пунктында фельдшер Ҡунысбаева Динә Урал ҡыҙы эшләй. Ул күптәр өсөн травматолог та, хирург та, невропатолог та булып тора. Бинаның проект-смета документацияһы өсөн аҡсаны халыҡ йыйған. Уларға фермер ярҙам иткән, ләкин башланғыс менән тап халыҡ сығыш һаған", - тип яҙҙы республика Башлығы социаль селтәрҙә ауыл халҡы менән аралашҡандан һуң.

Яраттар менән һөйләшкәндән һуң Радий Хәбиров район етәкселәренә бер нисә йөкләмә бирҙе. Улар араһында - ауылға газ үткәрергә, Яраттан Баймаҡҡа тиклем юл һалырға, урындағы ФАП өсөн дарыуҙар һатыу буйынса лицензия алырға һәм быйыл Күгиҙел фельдшер-акушерлыҡ пунктын төҙөй башларға.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Республика Хөкүмәтенең тейешле бойороғона ярашлы, Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында, Өфөнөң 44-се һәм 162-се полилингваль күп профилле мәктәптәрендә Рәсәй Федерацияһы Геройы Минлегәли Шайморатов исемендәге кластар ойошторолдо. Был мәктәптәрҙә Шайморатовҡа арналған кабинет-музейҙар була. Шайморатов кластарында уҡыусыларға берҙәм мәктәп формаһы индереү планлаштырыла, уҡыусылар ҡаҙаныштары өсөн "Йәш шайморатовсы" билдәһе менән бүләкләнә.

✓Өфөлә бер аҙнала ОРВИ менән ауырыуҙар 25 процентҡа артҡан, тип хәбәр итте Роспотребнадзорҙың Башҡортостан буйынса идаралығы вәкиле Зөлфиә Камаева шишәмбе мәрияла уҙған оператив кәңәшмәлә. Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы башлығы Максим Забелин республиканың 516 мең доза грипҡа ҡаршы вакцинаның беренсе партияһын алыуҙары, 9 мең кешегә прививка эшләтеүҙәре тураһында хәбәр итте.

✓Сентябрҙән Өфөлә "Төрлө төҫтәге өмәләр" таҙалыҡ марафоны башланды. Марафон "Таҙа Өфө" автономиялы коммерцияға ҡарамаған ойошма башланғысы буйынса бишенсе йыл рәттән уҙғарыла. Быйыл проект президент гранты аҡсаһына бойомға ашырыла. Былдай өмәләрҙең ғәҙәттәгеләренән айырмаһы шунда: ойоштороусылар сараны һый-ниғмәт, конкурстар һәм көтөлмәгән бүләктәр менән таҙалыҡ байрамына әүерелдерә.

✓11 октябрҙә Республика көнөн билдәләү уңайынан Башҡортостанда йәшәүселәрҙе өҫтәмә ял көнө көтә. 11 октябрь - Республика көнө - Башҡортостанда эшләмәгән ял көнө булып тора. Быйыл 11 октябрь йәкшәмбегә тап килә, шуға күрә эшләмәгән байрам көнө дүшәмбе 12 октябргә күсерелә. Шулай итеп, биш көнлөк эш аҙнаһында 10, 11 һәм 12 октябрь ял тип иҫәпләнә. 9 октябрҙә эш көнө ҡыҫҡармай.

✓Мәктәптәрҙә туҡланыу сифаты менән ҡәнәғәт булмаған ата-әсәләр өсөн ҡыҙыу элемтә ойоштороллдо, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Республикаһының Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау буйынса дәүләт комитетынан. Эш көндәрендә +7 (347) 292-11-52 номеры буйынса иртәнге сәғәт 9-ҙан киске 6-ға тиклем шылтыратырға мөмкин, тәнәфес - көндөҙгө 1-ҙән 2-гә тиклем.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ҺОРАУ-ЯУАП

# ЯҢЫ ҠАҒИҘӘЛӘР



**Башҡортостанда Берҙәм аҡсалата компенсация (ЕДК) - торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә дәүләт ярҙамы түләүҙең ҡағиҙәләре үҙгәрә. Республикала уны 665 мең кеше ала. Башҡортостандың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы ошоға ҡағылышлы һорауҙарға яуап бирә.**

**➔ Нимә ул Берҙәм аҡсалата компенсация һәм ул кемдәргә тейеш?**

Рәсәйҙә ҡайһы бер ташлама менән файҙаланыусылар торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн, йәғни торлаҡты ҡараған өсөн, шулай уҡ һыу, электр энергияһы, газ өсөн дәүләттән ярҙам алыу хоҡуғына эйә. 2009 йылға тиклем улар ташлама менән файҙаланды, ә аҡса туранан-тура һыу, йылылыҡ һәм газ менән тәьмин итеүселәр иҫәбенә күсерелә ине. Был ҡайһы бер унайһыҙлыҡтар тыуҙырғанлыҡтан, хәҙер ташлама туранан-тура кешеләрҙең үҙҙәренә түләнә һәм улар үҙҙәренә уңайлы шарттарҙа иҫәпләшә ала. Бына шул Берҙәм аҡсалата компенсация була ла инде. Быңдай ярҙамға Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашыусылар, инвалидтар, инвалид бала ҡарауҫы ғаиләләр, Чернобыль һәләкәтен бөтөрөүҙә ҡатнашыусылар, тыл эшсәндәре, хеҙмәт ветерандары, күп балалы һәм аҙ килемле ғаиләләр эйә. Түләүҙе алыу өсөн Күп функциялы үҙәктең (МФЦ) үҙегеҙгә яҡындағы офисына, социаль ярҙам үҙәгенә мөрәжәғәт итергә йәки документтарҙы "Госуслуги" аша ебәрергә кәрәк.

Яңы ҡағиҙәләр буйынса Берҙәм аҡсалата компенсация һәр ташлама менән файҙаланыусы өсөн, ҡайҙа йәшәүенә ҡарамаҫтан, айырым иҫәпләнәсәк - күберәк тотонған һайын, күберәк алаҫаҡ. Ташлама алыусының ниндәй категорияға ҡарауы, фатир майҙаны, унда йәшәүселәр һаны иҫәпкә алынмай. Ғаиләнең дөйөм килеме түләү күләменә йоғонто яһамаясаҡ.

**➔ Түләү күләме нисек иҫәпләнәсәк?**

Фатирға түләү хаҡында бер ниндәй ҙә белешмә биреү кәрәкмәйәсәк - социаль хеҙмәттәр уны электрон документтар әйләнеше буйынса коммуналь хеҙмәтселәрҙән алаҫаҡ. Түләү күләмен иҫәпләүсе формулалар ярайһы ҡатмарлы ғына һәм һәр категория ташлама менән файҙаланыусы - үҙенсә: ветерандарҙың - бер төрлө, инвалидтарҙыҡы - икенсе, күп балалы ғаиләләрҙең - өсөнсө. Өҫтәүенә, байтаҡ ҡына башҡа мәсьәләләр ҙә бар. Мәҫәлән, федераль законда күрһәтелеүенсә, шәхси йорттарҙа йәшәүсе ветерандарға торлаҡты ҡараған өсөн түләү иҫәпкә алынмай. Әгәр бер фатирҙа төрлө категориялағы ташлама менән файҙаланыусы йәшәй икән, аҡса уларҙың бөтәһенә лә түләнә.

Коммуналь хеҙмәттәр менән файҙаланыу нормативтары бар, улар фатирҙа иҫәп приборҙары булмаған осраҡтарҙа ҡулланыла. Ғәҙәттә, был норматив уртаса ҡулланыу кимәленән күпкә артығыраҡ. Мәҫәлән, Башҡортостанда һыуыҡ һыу ҡулланыу нормативы айына кеше башына 5 кубометр самаһы. Тимәк, шуға ярашлы, өс кешенән торған ғаилә 15 кубометр һыу тотона, тигән һүҙ. Әгәр һеҙ 20 йә булмаһа 100 куб тотонаһығыҙ икән, ти, норматив буйынса барыбер 15 куб өсөн иҫәпләнә һәм аҡса бер айҙан элеккеге осор өсөн иҫәпләнә, йәғни, сентябрҙә июль өсөн компенсация аҡсаһы алаһығыҙ, ләкин быныӊ өсөн фатирға түләүҙе мотлаҡ 10 августа тиклем башҡарып ҡуйыу шарт.

**➔ Бурыслыларға ни өсөн аҡса түләнмәй?**

Ысынлап та, Берҙәм аҡсалата компенсация коммуналь түләүҙәрҙә бурыслы булғандарға бирелмәй. Башҡортостанда ундайҙар 92 мең кеше. Бында башҡаса булыуы мөмкин дә түгел: дәүләт фатир хаҡын түләргә ярҙам итә икән, уны ваҡытында түләп барыуҙы ла талап итә. Компенсация аҡсаһын башҡа маҡсаттарҙа тотонорға ярамай. Торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр буйынса бурыслы булып ҡалмаҫ өсөн уны һәр айҙың 10-ына тиклем түләргә кәрәк. Ваҡытында түләмәгәнде автоматик система күреп ҡала ла компенсация түләүҙе туҡтата. Бурыслыға был турала хәбәр ебәрелә һәм бурысты ҡапламай тороп Берҙәм аҡсалата компенсация түләнмәй.

"Бурысым бар ине, уны түләнем. Хәҙер миңә ҡайтанан иҫәпләнәсәкме?"- тигән һорау бар. Эйе, башҡаса бурысығыҙ юҡ икәнде система күрәсәк һәм һеҙгә компенсация туҡтатылған көндән алып күпме түләнергә тейешле булһа, шунса ҡайтанан иҫәпләнәсәк һәм артабан ул элеккесә ай һайын килә башлаясаҡ.

**Станислав ШАХОВ әҙерләне.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

## ӨМӘГӘ!

**Башҡортостанда Бөтөн донъя таҙалыҡ көнөнә әҙерлек башланды, тип хәбәр иттеләр төбәк Экология министрлығынан. Ошо көн сиктәрендә илдең бөтә төбәктәре лә ҡатнашаҫаҡ "Йәшел Рәсәй" Бөтөн Рәсәй экологик шәмбе өмәһе үткәреү планлаштырыла.**

Ошо киң ҡоласлы экоакция барышында Рәсәйҙең барлыҡ төбәктәрендә лә Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булғандар иҫтәлегенә ағастар ултыртыласаҡ. Башҡортостанда был акция 19 һәм 26 сентябрҙә үткәреләсәк тип көтөлә. Экология министрлығында билдәләүҙәренсә, "Йәшел" акцияла ҡатнашыусылар һаны буйынса Башҡортостан, ҡағиҙә булараҡ, төүге урындарҙа килә - йыл һайын унда 130 меңдән ашыу кеше ҡатнаша. Бөтөн донъя таҙалыҡ көнө - сүп-сар менән көрәшкә йүнәлтелгән йыл һайын үткәрелеүсе социаль программа. Айырыуса урмандар, аҡландар, йылға һәм күл буйҙары таҙалыуына иғтибар бирелә. Былтырғы акцияла Башҡортостандан 150 меңдән ашыу кеше ҡатнашты һәм барлығы 25 мең кубометр сүп-сар йыйып алды. Сентябрҙә "Йәшел Башҡортостан" республика акцияһы барышында 25 мең ағас үҫентеһе ултыртыу планлаштырыла. Был хаҡта Башҡортостан Республикаһы вице-премьеры - торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Борис Беляев хәбәр итте. Бөтә Рәсәй өмәһе донъялағы күп кеше ҡатнашҡан экологик сара булараҡ Гиннестың Рекордтар китабына инеүгә дәғүә итә.

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ЭШҺЕҘҘӘР КҮП,

## эш урындары ла бар



**Тыйылған емеш татлы була тигәндәре хаҡмы, әллә халыҡтың властарға ғына түгел, иртәгәһе көнгә ышанысы юҡмы, әммә рәсми эшкә урынлашмай эшләүселәр һаман да бар. Шулай булмаһа, дәүләт пенсия, лайыҡлы ҡартлыҡ, бушлай медицина хеҙмәтләндереүе һәм башҡа уңайлыҡтар гарантиялауына ҡарамаҫтан, бәғзеләр эш биреүсенең кеҫәһен ҡалынайтып (улар эшселәре өсөн һалым, пенсия фондына, медицина страховкаһы фондына һ.б. түләүҙәрҙе түләмәй), конверттағы эш хаҡына риза булып йөрөмәҫ ине.**

Был йүнәлеш буйынса ҡала-райондарҙа алтынсы йыл етди тикшереү эше алып барыла, хатта прокуратура вәкилдәре менән берлектә рейдтар ойоштороло. Өфө ҡала хакимиәтенең сираттағы оператив кәңәшмәһендә лә был тема көн үҙәгенә сығарылды һәм уның буйынса хакимиәттең Кадрҙар менән тәьмин итеү һәм муниципаль хеҙмәт идаралығының хеҙмәт һәм социаль мөнәсәбәттәр бүлеге начальнигы Гүзәл Байғусҡарова сығыш яһаны.

Уның белдереүенсә, 2017 йылдан алып махсус комиссия ултырышында 18 мең ойошма тикшерелгән, 219 рейд яһалған. Һөҙөмтәлә рәсми теркәлеү үтмәй эшләгән 87352 граждан һәм 223 эшҡыуар асыҡланған. "Бөгөн Өфөлә иҡтисади йәһәттән әүҙем халыҡтың етенән бер өлөшө легалләштерелгән, - ти Гүзәл Байғусҡарова. - Был күрһәткес буйынса республика Рәсәй субъекттары араһында 9-сы урында тора. Республиканың Ғаилә һәм хеҙмәт министрлығының контроль күрһәткесе 5 йылда 103 процентҡа үтәлгән. Был эшмәкәрлектең һөҙөмтәһе булып төрлө кимәлдәге бюджеттарға һәм пенсия фондына аҡса килә. Быңдай хоҡуҡ боҙоуҙарҙы булдырмау өсөн граждандар, уҡыусылар һәм эшҡыуарҙар араһында аңлатыу эштәре алып барыла.

Рәсми теркәлмәй эшләүселәр шулай уҡ мәшғүллек үҙәктәрендә тороп, унан да аҡса алыуы мөмкин һәм бәғзеләр шулай итә лә. Был иһә рәсми эшһеҙҙәр һанын арттыра.

Өфө ҡалаһының Мәшғүллек үҙәге директоры вазифаһын башҡарыусы Ридан Ахьямов белдереүенсә, 3 сентябргә ҡарата мәғлүмәттәр буйынса, эшһеҙҙәр һаны бер аҙнала 941 кешегә артып, 37054-кә еткән. Сығыш яһаусы белдереүенсә, коронавирус инфекцияһы таралыуы осоронда эшен юғалтҡан граждандарға апрель-августа эшһеҙлек буйынса юғары күләмдәге пособие түләнгән һәм был маҡсатта Өфөлә 1 миллиард һумдан ашыу аҡса тотонолған. Әммә 1 сентябрҙән юғары пособие түләү туҡтатылған. Эшһеҙҙәр һаны артыу менән вакансиялар һаны ла артҡан. Бөгөн 22043 эшсе вакансияһы бар. Был эшһеҙҙәрҙе эшкә урынлаштырыу мөмкинлеген дә арттыра. Мәҫәлән, йыл башына 6273 кеше эшкә урынлаштырылһа, уҙған аҙнала ғына 317 кеше эшле булған.

Мәғлүм булыуынса, быйыл республикала Зауыҡлы биләмәләр йылы иғлан ителде. Өфө ҡалаһы территорияһында был йәһәттән башҡарылған эштәр тураһында Дим, Калинин, Киров, Ленин район хакимиәттәре башлыҡтары сығыш яһаны. Теманы дауам итеп, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин 19, 26 сентябрҙә республикала "Йәшел Башҡортостан" акцияһы үтеүен хәтергә төшөрҙө һәм район башлыҡтарына, коммуналь хеҙмәттәргә ағас ултыртыу урындарын, ултыртыласаҡ ағастарҙы билдәләргә һәм әҙерләргә ҡушты.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Арҡа, бил һыҙлағанда

❖ Арҡа ҡарай аҙым яһағанда организмдың эшкә һәләтлеге күтәрелә. Сөнки был осраҡта хәрәкәт үксәнән башлана. Башта арҡа 10 аҙым яһап ҡарағыҙ, шунан көн дә йәйап ҡына арттыра барығыҙ. Арҡа атлағанда кәүҙәне төҙ тоторға кәрәк, тубыҡтар бөгөлмәҫкә тейеш. Ҡытай табиптары был рәүешле йөрөү арҡа һәм бил һыҙлағанда ғына түгел, аяҡтар ауыртыуын да баҫа, вегетатив нервы системаһын тынысландыра һәм артериаль баҫымды нормаға килтерә, тип иҫәпләй. Арҡа ҡарай яһалған 100 аҙым алға атлаған 1000 аҙымға торошло икән.

### Һарымһаҡ

❖ Инфаркт, инсульт сирҙәрен иҫкәртеү, ҡан баҫымын түбәнәйтеү, коронар тамырҙарҙы тарайтыу өсөн һарымһаҡ төнәтмәһен ҡулланалар. Уны әҙерләү өсөн 40 грамм төйөлгән һарымһаҡты үтә күренмәгән һауытҡа һалып, 100 грамм һыуыҡ һыу ҡойорға һәм 10 көн һалҡын урынға ҡуйып төнәтергә. Төнәтмәне көнөнә 3 тапҡыр, ашарҙан ярты сәғәт алда унар тамсы эсергә.

### Баш ауырығанда

❖ Ике ҡалаҡ боланутты термосҡа һалып, 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, төнгөгә ҡалдырырға. Иртәнсәк һөҙөргә, көнөнә 4 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда эсергә.

❖ Баш ауырығанда тағы ла аҡ икмәк йомшағынан өшә яһап, аш һеркәһе менән еүешләргә. Уға бөтнөк үләне ҡайнатмаһын ҡушырға ла була. Ошо өшәне сикәләргә яҡынараҡ итеп, маңлайға һалырға кәрәк. Тыныста, барлыҡ көсөргәнештәрҙән бушанып, ятып дауаланыу һөҙөмтәлерәк була.

### Ашҡаҙан аҫты биҙе

❖ 300 грамм бөтнөк үләне (мята перечная), 100 грамм һары мәтрүшкәне термосҡа һалып, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Иртәнсәккә тиклем төнәтергә. Иртәнсәк һөҙөргә һәм төнәтмәне көн дауамында эсеп бөтөргә. Ашҡаҙан аҫты биҙен дауалау - 14 көн.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙӨН ТАП!

# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

Ҡандракүл, Асылыкүл буйҙарында һәм Дим, Ҡариҙел тамағында урынлашҡан ауылдарҙа осраған биҙәкле әйберҙәр орнаменты ят үҙенсәлекле булыуы менән айырылып торған. Биҙәге айырымланыбыраҡ торған өлөштәрҙән хасил булған, ҡуш йәки ябай элмә ярҙамында ҡайылған. Мөһөрҙәрҙән тыш композицияла йөморайтылған (тегеү техникаһына бәйле) ҡыя шаҡмаҡ, оҙонса түңәрәк, сығынтылы түңәрәктәр, ярым венок ("даға"), уйымдарына сәскәләр сигелгән кәкерсәктәр, "болан мөгөҙлө" ҡыя шаҡмаҡтар һәм башҡа төр тармаҡлы фигуралар булған. Күп төҫтән ҡайылған биҙәктәр ҡыҙыл туҡымаға эшләнгән. Фигураларҙың ситен әллә нисә тапҡыр йөртөп, төрлө төҫлө һыҙаттар итеп сигеп сыҡҡандар. Йәшел, һары, ҡара ҡыҙылдан тыш биҙәктә йыш ҡына аҡ һәм ҡара ептәр ҙә ҡулланылған.



Таҫтамал остарын ҡушып тегелгән шаршау. БР ММ. Т.К. Сурина фотоһы

1960 йылда Дәүләкән районы Буранғол ауылына экспедиция менән барғанда осраткан һары-ҡыҙғылт һары шаршауҙағы орнамент матур ине, ул ҙур берешәр һәм ҡуш ҡусҡарҙарҙы бер нисә бағана итеп теҙеп сигелгән ине. Аҫҡа ҡарай боролоп торған ҡуш ҡусҡарҙар өҫкә ҡарап торған кәкерсәктәр менән сиратлашып килгән. Ҡусҡарҙан ике ҡатлы, төҫтәре айырылған тешле кәкерсәк һыҙатынан тороп, остары сәскә менән тамамланған. Биҙәктең һәр бағанаһының ҡап уртаһында тамыры асалы итеп сигелгән, төҙ һабаҡлы сәскә күтәрелгән. Ҡусҡарҙар ҡуш элмә ярҙамында ҡайылған,сәскәләр ҡайма һымаҡ, таҫмаға оҡшаған ҡалын элмә һыҙаты менән йөрөтөп сығылған. Ҡайыуҙа ҡыҙыл, ҡуйы ҡыҙыл, ҡыҙғылт-һары, һары, йәшел, һоро ептәр ҡапма-ҡаршы йәки бер-береһенә тап килтереп сиратлаштырып ҡулланылған: ҡыҙыл - йәшел, ҡыҙыл - һары, ҡыҙыл - ҡыҙғылт һары, ҡыҙыл - ҡуйы ҡыҙыл, һары - һоро; ҡыҙыл төҫ күп ҡулланылыуы күренеп торған.



Шаршауҙағы ҡусҡар биҙәк (Дәүләкән районы, Буранғол ауылы). Автор фотоһы. 1960

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

КӨНАУАЗ

# ТЫУЫМ КӘМЕЙ ӘЛЕГӘ...



**Бер киренең бер ыңғай яғы була йәки бәхетһеҙлек булмаһа, бәхет булмаҫ ине тиҙәр. Коронавирус донъяға хәүеф менән янап, күптәрҙе эшһеҙ, аҡсаһыҙ ҡалдырһа ла, хөкүмәт яғынан ярҙам күләме артыуы, йәғни 16 йәшкә тиклем балалары булған ғаиләләрҙең төрлө пособиелар алып, ғаилә бюджетын нығытыуы шул турала һөйләмәйме ни? Быға тиклем дә илебеҙҙә икенсе генә түгел, беренсе балаға ла әсәлек капиталы түләүе индерелгәйне. Әммә илдә тыуым кимәле йылдан-йыл кәмей. Уны финанс ярҙамы менән генә арттырыу мөмкинме? Был күренештең тағы ла беҙ уйламаған сәбәптәре бармы? Ошо һәм башҡа һорауҙарға БР Стратегик тикшеренеүҙәр институтының фәнни хеҙмәткәре Рената КОМЛЕВА менән әйҙәүсе фәнни хеҙмәткәре, тарих фәндәре кандидаты Гөлдәр ХИЛАЖЕВА яуап бирә.**

**➔ Ошо көндәрҙә "Башинформ" агентлығы үткәргән онлайн-конференцияла ғалимдар белдереүенсә, яҡын арала тыуым кәмеүе һәм айырылышыуҙар һаны артыуы ихтимал икән. Быңдай раҫлауҙар нимәгә нигеҙләнә?**

**Рената Комлева:** Халыҡ-ара тәжрибә күрһәтеүенсә, карантин ваҡытында социаль ҡурсаланыу бик йыш айырылышыуҙар һанының артыуына килтерә. Тормош рәүешенең үҙгәреүе, стресс, аралаша белмәү ғаилә низағтарына сәбәп булып тора. Был осраҡта Ҡытайҙың Дачжоу ҡалаһын миҫалға килтерергә мөмкин: унда карантин талаптары йомшарыу менән шунда уҡ 300 пар айырылыша, ә Фучжоу ҡалаһы хакимиәте айырылышыу тураһында ғаризаларға күмелә һәм карантиндан һуң көнөнә 10 ғаризаны ғына ҡабул итеү лимитын индерергә мәжбүр була. Австралияла талашыусы ир менән ҡатын өсөн махсус психологик хеҙмәттәр ойошторғандар. АҠШ-та ғаиләлә көс ҡулланыу артыуы күҙәтелә. Шуға күрә, быңдай күренештәр Рәсәйҙә лә күҙәтелеүе ихтимал.

**➔ Дәүләт беренсе бала тыуғанда ла, икенсе балаға ла Әсәлек капиталы түләүҙе тормошҡа ашыра, әммә был да тыуымды арттырмай. Бөгөн, ата-әсәләр белдереүенсә, бала табып-үстереүҙең хаҡы бик ҡиммәт. Ә бит элек бындай түләүҙәр ҙә булмаған, һәр бала үҙ ризығы менән тыуа, тип ҡабул иткәндәр. Ни өсөн бөгөн хатта Әсәлек капиталы ла тыуымды арттырмай?**

**Рената Комлева:** Тыуымға килгәндә, бында, киреһенсә, артыуҙы көтөргә кәрәкмәй, сөнки тотороҡлолоҡ булмағанда, эш хаҡтары кәмегәндә, хеҙмәт баҙары тарайғанда, киреһенсә, ғаиләләр был бурысты кисектереп торорға тырыша. Тарихтан күренеүенсә, көрсөк һәм башҡа социаль тетрәнеүҙәр һәр саҡ тыуымдың кәмеүенә килтерә. Ике-өс ай социаль ҡурсаланыу һөҙөмтәһендә урыны-урыны менән тыуым артыуы ихтимал, әммә ул дөйөм статистикаға йоғонто яһамай. Пандемия эҙемтәләре тыуым кимәле өсөн, киреһенсә, кире булыуы ихтимал.

Ысынлап та, Әсәлек капиталы ғына бала тыуыу һәм уны тәрбиәләү, үҫтереүгә бәйле сығымдарҙы ҡапламай. Әммә был түләүҙәрҙе барлыҡ сығымдарҙы ҡаплай тип ҡабул итергә түгел, ә бары тик дәүләттең бала тыуғанда ғаиләгә өҫтәмә социаль ярҙамы тип ҡарарға кәрәк. Матди сараларҙың төп сығанағы булып халыҡтың эш килеме торорға тейеш. Шуға күрә, минеңсә, дәүләттең төп бурысы - иҡтисадты үҫтереү һәм ғаилә өсөн иң ауыр осорҙарҙа - бала тыуғанда, мәктәпкә барғанда һ.б. - уларға өҫтәмә ярҙам тәҡдим итеп, граждандар ғаиләләрен ҡарай алһын өсөн шарттар булдырыу.

**➔ Донъя статистикаһына күҙ һалғанда, милләт артһын өсөн ғаиләләрҙә мотлаҡ 3 бала булырға тейеш. 1 йәки 2 бала ғына тәрбиәләгән ғаиләләр һаны артҡан һайын милләт тә әкренләп юҡҡа сыға бара, тиҙәр. Был, ғәмәлдә фәнни нигеҙҙә раҫланғанмы?**

**Рената Комлева:** Халыҡтың һанын арттырыу өсөн (шул иҫәптән айырым этник төркөмдөкөн) ғаиләләрҙең кәм тигәндә 50 процентында өс бала булырға тейеш. Башҡорттар һәр саҡ юғары репродуктивлығы һәм балалар һаны буйынса башҡа этник төркөмдәрҙән айырылып торған. Әммә 2010 йылғы халыҡ иҫәбен алыу буйынса бары тик башҡорт ҡатындарының 27 процентының ғына балаһы өсәү һәм унан күберәк булған, шуға ҡарамаҫтан, Башҡортостандың башҡа халыҡтары менән сағыштырғанда, был да юғары күрһәткес (рус ҡатындары -13,5 процент, татар ҡатындары - 19,6 процент. Статистика бары тик ҡатын-ҡыҙҙарҙың милләте буйынса ғына алып барыла һәм бала табыу мөҙҙәте үткән йәштәгеләр ҙә индерелә). Был башҡорттарҙың бөгөнгө быуынының һаны артһын өсөн етерлек түгел. Шуға күрә, башҡа халыҡтарҙыҡы кеүек һиҙелерлек булмаһа ла, башҡорттарҙың да кәмеүен күҙәтәбеҙ.

**➔ Ғәҙәттә, был тормошта бөтә нәмә тулҡын рәүешендә бара: ниндәйҙер этапта аҫҡа тәгәрәй, ниндәйҙер мәлдә өҫкә үрләй. Демография мәсьәләләрендә лә шундай "тулҡындар" барҙыр, моғайын? Ғәҙәттә, ниндәй мәлдәрҙә тыуым артыуы күҙәтелә?**

**Рената Комлева:** Тыуым һәм үлем күрһәткесе туранан-тура халыҡтың йәш структураһына бәйле. Һуғыштар, аслыҡ, көрсөк халыҡтың бер быуынын алып китеп, башҡа йылдарҙа икенсе быуындың һаны тотороҡлолоғына электән килә. Һөҙөмтәлә демография тулҡыны барлыҡҡа килә - күп һанлы быуын аҙ һанлыһын алмаштыра, ә күп һанлы быуындың балалары һәм ейәндәре социаль тетрәнеүҙәрҙән зыян күргән быуын вариҫтарына ҡарағанда күберәк була. Уҙған быуаттың 80-се йылдарында тыуым артыуы уларҙың ата-әсәләренең быуыны - һуғыштан һуңғы 1960 йылғыларҙың күп һанлы булыуына бәйле. Шундай уҡ күренеш 80-се йылдарҙа тыуғандар үҙҙәре ата-әсә булыу йәшенә еткәс, 2000-2010 йылдарҙа ла күҙәтелә. Әлеге мәлдә беҙ имен булмаған йәш структураһы фазаһында торабыҙ, сөнки әле репродуктив йәшкә уҙған быуаттың 90-сы йылдарында тыуған аҙ һанлы быуыны инде.

**➔ Мәскәү белгестәре 2025 йылға ил халҡының 1 миллионға кәмеүен күҙаллай. Тимәк, үлем арта, тыуым артмай. Ә Башҡортостан буйынса ниндәй фараздар бар?**

**Рената Комлева:** Росстат фараздарына ярашлы, Башҡортостан Республикаһы халҡының һаны уртаса вариантта 2025 йылға 3958 мең кешегә һәм юғары вариантта 4006 мең кешегә ҡалыу ихтималлығы фаразлана (2020 йылдың 1 ғинуарына 4038 мең кеше). Быға йәш структураһының имен булмаған факторы йоғонто яһай - республикала 10 йыл инде 60-69 йәшлектәр һаны арта, ә хеҙмәткә яраҡлы халыҡ һаны, киреһенсә, кәмей. Тимәк, үлеүселәр һаны тыуыусылар һанынан артыҡ буласаҡ.

**➔ Бынан бер нисә йыл элек Башҡортостанда халыҡ һаны миграция һөҙөмтәһендә арта, тигәйнегеҙ. Бөгөн был мәсьәлә нисек тора?**

**Гөлдәр Хилажева:** Башҡортостанда миграция хәрәкәте Рәсәйҙең күпселек төбәгендәге кеүек үк сценарий буйынса бара. Республика халҡы насар үҫешкән, алыҫ ауылдарҙан сығып, ҙурыраҡ ауылдарға йәки ҡалаға күсергә тырыша. Ә инде бәләкәй ҡалалар халҡы, үҙ сиратында, ҙур ҡалаларға күсенергә тырыша. Процесс шулай дауам итә.

Башҡортостанда, тәү сиратта, республика эсендәге миграция иҫәбенә халыҡ һаны ҙур ҡалалар тирәһендә арта. Мәҫәлән, Өфө һәм Стәрлетамаҡтың эргәтирәһендә ауылдар йылдам үҫә.

Әммә Башҡортостан халҡы республика эсендә генә күсенмәй, Рәсәйҙең башҡа төбәктәренә лә сыға. Төбәк-ара миграцияға килгәндә, илдең башҡа төбәктәре менән сағыштырғанда, беҙ - "урталыҡта", йәғни ситкә миграцияланыусылар кимәле юғары түгел.

**➔ Был процесты туҡтатып буламы?**

**Гөлдәр Хилажева:** Юҡ, сөнки йәштәрҙең ситкә китергә, белем алырға, үҙен эш менән күрһәтергә ынтылыуы тәбиғи. Бында шул мәлгә иғтибар бирергә кәрәк: ошо ситкә китҡан йәштәр өсөн республика улар кире ҡайтырға ынтылып торған урын булырға тейеш. Тимәк, яңы эш урындары булдырырға, кешеләрҙе лайыҡлы эш хаҡы менән тәьмин итергә, балалы йәш ғаиләләргә ярҙам итергә кәрәк.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**"Дөйөмләштереп әйткәндә, барлыҡ социаль, ғаилә, мәшғүллек, мәғариф өлкәһендәге сәйәсәт республиканың миграция хәл-торошона ла, халыҡ һаны артыуға йәки кәмеүгә лә йоғонто яһай. Шуға күрә, дәүләт сәйәсәтенең барлыҡ йүнәлештәре бер-береһе менән тығыҙ бәйләнештә эшләргә тейеш", - ти Гөлдәр Фәрит ҡыҙы, йәғни эшмәкәрлек комплекслы алып барылырға тейеш. Был инде белгестәрҙең генә фекере түгел, көн, заман талабы.**

**Земфира ХӘБИРОВА әҙерләне.**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

6

# Туған телем!

12-18 сентябрь (һарысай)

2020 йыл

№37 (923)

ҮӘТ, ШУЛАЙ!



## ШЫЛТЫРАТЫП ЙОНСОТАЛАРМЫ?

**Бергилке банк хеҙмәткәрҙәре аҡса тәҡдим итеп аптыратты. Һеҙгә лә шулай итә торғандарҙыр. Көн һайын, хатта төрлө фирма исеменән көнөнә бер нисә тапҡыр шылтыратҡан саҡтары ла булды. Трубканы алмаһаң, смс-хәбәр яҙып ебәрергә лә иренмәйҙәр.**

Күптән түгел бик яғымлы тауышлы ҡыҙ шылтыратты. Ғәҙәтенсә, дежур һорауҙарын теҙә генә башлағайны, ҡапыл шып туҡтаны. Быға тиклем "Юҡ, һөйләшә алмайым. Минең өсөн уңайлы ваҡыт түгел. Башҡаса шылтыратмағыҙ!"- тип әйткәндән һуң да үҙенең ятлап алған һүҙҙәрен әйтеп бөтмәйенсә туктамаған тауыш тынып ҡалды. Ни сәбәпле, тиһегеҙме? Мин уның һорауҙарына үҙенән дә яғымлыраҡ тауыш менән башҡортса яуап бирҙем. Трубканың теге осондағы ҡыҙ тағы телгә килде һәм руссалап, тупаҫ итеп: "Һеҙгә кем кәрәк? Кемгә шылтыратаһығыҙ?" - тине. Ундай аралашыуҙы көтмәгән әңгәмәсемдең албырғап ҡалыуын күңелем менән тоям. Шулай ҙа минә ҡаршы башҡортса яуап бирһә, матур итеп һөйләшергә, туған телен белгән ҡыҙға рәхмәт әйтергә иҫәп юҡ түгел. Аңлаһа ла, аңлайҙыр, бәлки, әммә үҙе эшләгән ойошма этикетын һаҡлап, өндәшмәскә лә мөмкин. Әммә ҡыҙыҡҡай ризаһыҙлыҡ белдереп, нимәләр мығырҙаны ла, телефонын бөтөнләй һүндереп ҡуйҙы.

Бының менән генә туктамаҫ, тағы шылтыратыр тип көтөп йөрөйөм. Ысынлап та, иртәгәһенә шылтыратты был. Уның менән тағы ла башҡортса һөйләштем. Шунан бирле был банк бәләкәй процент менән кредит тәҡдим итмәй башланы...

Теңкәгә тейгән банк тәҡдимдәренән ҡотолоуҙың был алымы бик оҡшап ҡалды. Тағы шылтыратмаҫтар инде, тип, ҡыҙыҡ күреп, көтөп йөрөйөм. Көтөүем бушҡа булманы, яңыраҡ икенсе бер банк тағы шылтыратты. "Беҙҙең банк һеҙгә бәләкәй процент менән..." - тип, бер туған апайым һымаҡ иркә тауыш менән өндәшеүе булды, мин тағы ла туған телемдә: "Әлегә кредитҡа мохтажлығым юҡ, мине ҡайғыртыуығыҙ, хәстәрләүегеҙ өсөн ҙур рәхмәт", - тигәйнем, яңы ғына әкиәттәрҙәге фәрештәләй һөйләшкән әңгәмәсем тупаҫ тауыш менән: "Нимә танау аҫтығыҙҙан быҙырҙайһығыҙ, нормаль телдә һөйләшә алмайһығыҙмы?"- тимәһенме. Мин иһә башҡорт теле донъялағы иң матур, бөйөк телдәрҙең береһе булыуын, ул минең ҡиммәтле байлығым һәм хазинам икәнен әйттем. Был хеҙмәткәр бигерәк түҙемһеҙ булып сыкты. Минең әйтеп бөткәндә лә көтмәй, трубканы һалып ҡуйҙы. Шунан алып был банк та шылтыратҡаны юҡ әле.

Һеҙҙе лә ошоға оҡшаш шылтыратыуҙар йонсотоуы ихтимал. Үҙ телегеҙҙә яуап бирел ҡарағыҙ, бәлки, һеҙгә лә ярҙам итер. Туған телебеҙҙең ҡулланыу даирәһен киңәйтеүҙең бер юлы ла был. Моңло ла, һутлы ла, бай ҙа башҡорт телен белмәгән, ә бәлки, ишетмәгән кешегә танытыу алымы ла...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

УЙЛЫҒА - УЙ

**"Киске Өфө" гәзитендә милли идея тураһында һөйләшеүҙәр булып тора. Минеңсә, һәр халыҡ үҙ идеяһын ғәмәлгә ашырыу юлдарын үҙ менталитетынан сығып эҙләргә тейеш. Һәр халыҡтың менталитеты быуындан-быуынға күсә килгән ижадында һаҡлана. "Тормош һабаҡтары" дәреслеген яҙғанда, беҙгә, авторҙарға, башҡорт халҡының ғына түгел, үҙенсәлекле мәҙәниәтен һаҡлап алып ҡала алған һәм донъя кимәленә сығарыу юлдарын эҙләгән байтаҡ халыҡтарҙың ижады менән танышырға, сағыштырырға тура килде. Шул саҡта менталитет менән ижад төшөнсәләрен өйрәнгәндә, беҙ был ике төшөнсәнең үҙ-ара бик тығыҙ бәйле булыуын асыҡланыҡ.**



## МИЛЛӘТ ХОЛҠО...

### мәҡәлдәрҙә һәм әйтемдәрҙә

...Менталитетҡа ҡарап, төрлө халыҡта бер үк мәҡәлдең ҡапма-ҡаршы мәғәнә алған осраҡтары ла бар. Мәҫәлән, Кавказдың ипле, тыныс холоҡло кабардин халҡы "Йөҙ кешенән маҡталған йөҙ кешегә тиң" тиһә, сая тәбиғәтле абхаздарҙа ошо ук мәҡәл "Йөҙ кеше берәүгә нәфрәтләнһә, тимәк, ул йөҙ кешегә тиң", тип яңғырай. Һәр һүҙендә, бигерәк тә тостарында һәм хатта киң таралған көләмәстәрендә лә милләтенең бөсен күтәргән грузин халҡында: "Нәсеңең ҡороһа ла йола юғалмаһын", - тигән мәҡәл бар. Ә төрлө шарттарға һәм мөхиткә енел ҡулайлашып, үҙ мәнфәғәтен тормошҡа ашырып өйрәнгән әрмәндәрҙә: "Тәүҙә һарыҡ бәрәсе булып ҡылан, аҙаҡ бүре булырһың", "Бер ишек асылһын өсөн ете ишеккә шаҡырға кәрәк", - тигән мәҡәлдәр бар. Әгәр бала мәктәптән туҡмалып ҡайтһа, тыныс холоҡло кабардин уға, бәлки, "Йоҡлаған айыуҙы уятма, көслө кешене асыуландырма", тип әйтәләр, ә үҙен бер кемдән дә йәберһетеүгә юл ҡуйырға теләмәгән ғорур чечен иһә: "Йоҙроҡҡа таяҡ бар, таяҡҡа хәнйәр бар", - тип туҡмалғаны өсөн балаһына асыуланасаҡтыр.

Әйтергә кәрәк, сағыштырып өйрәнеүҙәр барышында беҙ мөһим бер һығымтаға килдек: ижад аҡылының асҡысы - тел. Телен юғалтҡан халыҡтар ижады менән бергә менталитетын да юғалта. Һәм, әлбиттә, башҡа милләттәрҙән йотола башлай. Телен юғалтҡан милләттәр, айырым кешеләр кеүек үк, үҙ халҡы ижадының эске энергетикаһынан көс ала алмай, хатта йырҙарынан да.

...Зөһрә һылыуым Мәскәүҙә, Горький исемендәге Әҙәбиәт институтында уҡыған йылдарында шундай бер ваҡиға һөйләгәйне: "Бер мәжлестә ултырабыҙ. Арабыҙҙа ике грузин бар. Улар бер-береһе менән грузинса нимәләр әйтешә лә, көләп ебәрҙе. Был күренеш башҡаларға оҡшаманы. Мин торҙом да: "Бында байтаҡ милләт вәкилдәре бар. Беҙ ҙә үҙ телдәребеҙҙә һөйләшә алабыҙ. Шуға ла, әйҙәгеҙ, бөтөнөбөҙ өсөн дә аңлайышлы рус телендә һөйләшәйек", - тинем. Грузиндарҙың береһе: "Беҙ мәжлес өсөн әйтмәйбеҙ, һеҙҙән дә көлмәйбеҙ. Һин, Зөһрә, дөрөҫ әйтәһең, беҙ һине аңлайбыҙ. Тик һин дә беҙҙе аңла: нисек инде, мин, грузин, үҙемдең грузиным менән ят телдә һөйләшәйем? Был минең башыма һыймай..."

Көслө милләт вәкиленең көслө һүҙҙәре! Үҙ-ара, хатта үҙ балаһы менән дә телен вата-емерә русса һөйләшеп килгән башҡорт йәки татар кешеләрен күргән һайын шул һүҙҙәр иҫемә төшә. Грузиндарҙың көсө ниҙә икән? Ҡасандыр гәрәптәрҙән дә, монголдарҙан да, төрөктәрҙән дә, фарсы халыҡтарынан да, мосолман динен ҡабул иткән тау халыҡтарынан да аяуһыҙ ҡырылып, бөтөп барған халыҡтар иҫәбенә ингән был халыҡ, Рус дәүләтенә ҡушылған дәүерҙә етмеш биш мең генә кешегә ҡалған булған. Ун һигеҙенсе быуатта ижад иткән яҙыусылар ҙа грузиндар тураһында бик үк юғары фекерҙә булмаған. Грузиндарҙың көсөнөң асылын: "Һине кешеләр хөрмәт итһен өсөн, тәүҙә үҙ-үҙеңде хөрмәт итеп өйрән", - тигән мәҡәлдәрендә күрәм.

..."Нишләп беҙгә "Башҡорт мәҙәниәте" тигән уҡыу предметы кәрәк? Үткәндәрҙе өйрәнеп, балаларға киндер ыштан кейҙереп, тирмәләрҙә йәшәтергә уйлайһығыҙмы? Боронғоларҙы өйрәнеп, балаларыбыҙ Лондондағы Биг Бенды белмәй ҡаласаҡ бит! Англияға барһалар, ни эшләрҙәр?" - тип мәсьәләне ҡырҡа ҡуйғайны ваҡытында юғары вазифа биләгән бер ханым. Шул йыйылышта ҡатнашҡан күренекле ғалимдарыбыҙ бер тауыштан уға ҡаршы сыҡты һәм мәҙәниәт, халыҡ педагогикаһы һәм ғилеме тигән төшөнсәләр менән киндер ыштандың айырмаһын аңлатып бирҙе.

Халыҡтарҙың ижадын, менталитетын сағыштырғанда, ошо бәхәс ҡатҡат иҫемә төшә. Сөнки ҡайһы бер халыҡтарҙың ижады ихлас ҡыҙыҡһындырһа, икенселәренеке бөтөнләй тиерлек ҡыҙыҡһыныу уятмай. Төп ғилләулар ижадының ҡыҙыҡлы йәки фәһемле булмауында түгел. Эш икенселә...

Мәскәүгә барып ҡайтҡан, башҡортса икмәк-тоҙлоҡ ҡына белгән танышымдың: "Баҡһаң, беҙ, башҡорттар, Мәскәү интеллигенцияһын да, сит ил вәкилдәрен дә башҡорт булараҡ ҡына ҡыҙыҡһындырабыҙ икән", - тип, уҡытыусы яллап, телде лә, мәҙәниәтебеҙҙе лә ныҡлап өйрәнергә тотоноуы был мәсьәләгә яуап булып яңғырай.

Әлбиттә, донъя мәҙәниәтен дә, Биг Бенды ла белергә кәрәк, тик шуны ла онотмайыҡ: үҙенең милли йөҙөн юғалтҡан халыҡтар милләт булараҡ береһендә лә ҡыҙыҡһыныу уята алмай. Үҙенсәлеген һаҡлап ҡалған көслө халыҡтар ғына ҡыҙыҡлы. Үҙҙәре лә, менталитетын асып биргән ижады ла.

**Илгизәр БУРАҠАЕВ.**

Аһ-Аһ!

## АТАМАЛАР БОҘОЛА

**Был һорау мине күптән борсой. Ни өсөн кафе, магазин, сауҙа нөктәләре атамалары башҡортса булһа ла, урыҫ теленә яраҡлаштырып бирелә, ә сит ил фирмалары үҙ исеменең логотибын үҙгәртмәй бирә? Ни өсөн беҙ "Ляйсан", "Чулпан", "Салават" тип яҙырға тейешбеҙ? Ярай, Ләйсән һүҙендә башҡорт теленең үҙенсәлекле өнө бар. Ә Сулпан, Салауат тип башҡа милләттәр әйтә алмаймы ни?**

Фирма, магазиндарҙы теркәгәндә хужаһы нисек әйтһә, һалым хеҙмәте шулай яҙырға тейеш, минеңсә. Һәм беҙҙең үҙебеҙгә лә үҙ фекеребеҙҙе яҡлап өйрәнергә кәрәк. Ғөмүмән, башҡорт атамаларын башҡалар нисек уҡыр, тип ҡурҡырға ярамай. Беренсенән, Башҡортостанда йәшәгән башҡа милләттәр башҡорт хәрефтәрен күреп өйрәнгән, белә. Икенсенән, халҡыбыҙ вәкилдәре туған телебеҙҙә яҙылған атамаларҙы күберәк күргән һайын үҙен ошо ерҙең хужаһы итеп тояса. Өсөнсөнән, башҡалар, сит илдән килгән ҡунаҡтар ҙа был башҡорт иле икәнен таныясаҡ.

Тағы шуға иғтибар иткәнем бар: башҡорт телендә генә булған хәрефтәр осрамаһа ла, исемдәрҙе барыбер үҙгәртеп яҙалар. Нимә, Ынйы тип әйтә алмайҙармы ни? Югинә, Ынжи, Инжи, Ынжы тип яҙалар - телендә һындырырлыҡ хатта. Бында, әлбиттә, бала тыуыу тураһында таныҡлыҡ тултырған ЗАГС хеҙмәткәрҙәренең дә роле ҙур. Ундай урындарҙа, минеңсә, мотлаҡ ике телдә лә яҡшы белгән кеше эшләргә тейеш. Сыңғыҙҙы Чингиз тип түгел, ә Сынгыз тип яҙыу дөрөҫ һымаҡ. Беҙ үҙебеҙ балаларыбыҙҙың исемен яҙғанда быны талап итә алабыҙ. Барыһы ла үҙебеҙҙән тора...

**Радмир МӨХӘМӘТШИН.**

✓ *Бөгөн күп ирҙәр атын "тпру" тип туҡтата, "на" тип ҡыуа, артҡа бирҙергәндә "назад" тип бойора. Этҡә команданы ла "взять", "фу", "апорт" тиҙәр. Үҙҙәре генә түгел, малдары ла урыҫлашҡан, күрәһең.*



БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР



# ҠЫЛҒАНДАРЫҢ...
## баш бармаҡ күрһәтерлек булһын!

**Ым-ишара менән дә күпте аңлатырға була икәнен бәләкәйҙән беләм.**

Беҙ, бирьяҡтың урта тош балалары, аръяҡтар, өҫ яҡтар менән әллә ни дуҫ булманыҡ. Хәйер, бала саҡта икәүгә өсөнсө ҡушылһа, ҡан туғаның булһа ла, күҙ асып йомғансы "дошман"ға әйләнеп китеүсән булаһың бит. Дуҫ ҡына булып уйнап йөрөгән ерҙән бер әтнәкәһе сығып ҡына тора шул: шунан китә "һин шулай ҙа, һин былай" тип кәмләүҙәр, үсекләүҙәр, ауыртҡан ерәнә баҫыуҙар. Былар ярҙам итмәһә, "ҡорал"дың икенсе төрлөһө ярҙамға килә - ым-ишара менән "төпәләү".

Беҙҙең урамда иң еңеле - һыңар ҡулдың бармаҡтарын усҡа йомарлап, ҡуҡыш күрһәтеү, уныһы ярҙам итмәһә, ике ҡуҡышты бер-береһенә һуғып күрһәтеү, унан ауырырағы - һуҡ бармаҡ менән урта бармаҡ араһына баш бармаҡты тығып, ҡуҡыш еҫкәтеү (фикушка була быныһы), иң яманы - "дошман" яғына арт һының менән туңҡайып, ике бот аша теге елле ҡуҡышты күрһәтеү. Тәүҙә - һыңарын, аҙаҡ бер-береһенә тапылдата һуғып, икәүһен дә! Башың да ҡуша инеп китә яҙа әле аяҡтар араһына. Быны ошо була инде иң ояты, ауыры! Ошо хәлгә барып еткәнсе, хәл-әхүәлдә ыңғай яҡҡа тәҙәтеп өлгөрмәһән, ошо ҡатмарлы ҡуҡыштан һуң, һис шикһеҙ, "оятлы һәм еңелгән" яҡ гәрлегенән үсекләгестәрҙең төрлөһөн һинең яҡҡа осороп, һыҙмаҡ менән була, йә гәрлегенә сыҙамай, алыш та бар, һалыш та бар, тигән акиәти алымды тормошҡа ашырыу өсөн һинә ажарланып ташлана...

Ошолайыраҡ "хәл асыҡлай" инек бала саҡта. Хәҙер уйлайым да, бөгөнгө балаларҙың үҙ-ара мөнәсәбәтенә күҙ һалам да, аптырауға ҡалам: беҙ ихтираз булғанбыҙмы, әллә бөгөнгөләрме? Бөгөн социаль селтәрҙәге төрлө смайликтар, эмоцияны, хәл-торошто белдереүсе һүрәттәр ошо беҙҙең ҡуҡыш-муҡыштарҙың заманса сағылышылыр ул!

Сағылыш, тигәндәй. Яңыраҡ Күҙәмбәттә физик мөмкинлектәре сикләнгәндәрҙең республика Паратуры үтте. Беҙ ҙә шул сараны гәзит биттәрендә яҡтыртырға барҙыҡ. Йәшел футболкалар кейгән Хәйбулла районы командаһы эргәһендә торҙом. Журналист халҡы ҡыҙыҡһыныусан зат бит инде - тик яткан түңгәккә лә һорау бирмәһәк, исем юғала. Тегеләрҙән: "Беҙҙең башлыҡ (элекке район хакимиәте башлығы Рөстәм Динислам улы Шәриповты күҙ уңында тотоп әйтәм инде) нисек эшләй унда?" Яуап ым-ишара менән булды - бер юлы ике-өс кеше баш бармағын күрһәтте, "Во!" тине. Эскә йылы булып китте, хатта ғорурлыҡ хисе тоҡанды. Тимәк, беҙҙеке тегендә лә һынатмай, афарин! Иң мөһиме, кәмләп, сикә тәңгәлен һуҡ бармаҡ менән бырауламаны-лар, ҡул һелтәп, йүнһеҙ, тимәнеләр, баш бармаҡ күрһәттеләр.

Үҙенә күрә аралашыу, уй-фекерҙе еткереү, баһа биреү алымы шул ым-ишара ла. Телһеҙ ҙә аңлатыу...

**Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА.**
**Бөрйән районы.**

ИҪКӘ ТӨШӨРӘЙЕК!

**Интернетта фекерле, ҡыҙыҡлы, фәһемле итеп яҙыша торған бер төркөм кешеләр бар. Сәхифәләренә йыш ҡына инеп ҡарап сығам. Ниндәйҙер матур ғына яҙмаһын гәзиткә алырға йәки ул әйтергә теләгәнде үҫтереп ҡулланырға, тигән уй менән үҙҙәренә лә өндәшәм. Барыһы ла тотоп ҡына баҫмаға ҡуйырлыҡ кимәлдә яҙмай, әлбиттә, әммә уларҙағы халыҡсанлыҡ арбай.**

# ТИПӘ-ТИПӘ, ЗӘБ-ЗӘБ-ЗӘҮ,

## йәки Ымлыҡтар ҙа онотола бара



Шуларҙың араһында Ләлә Рафиҡова торғаны бер хазина. Күптән түгел генә сәйәхәттәре тураһында яҙғандарын һыу кеүек эскәйнек, әле бына ошо көндәрҙә ымлыҡтар тураһында ҡыҙыҡлы яҙмалары хасил булды. Беҙҙең онотоп бөтөп барған тел байлығын иҫкә төшөрҙә ул. Был теманы оҡшатып, мин дә әйҙә шул хаҡта һүҙ сығарһам, балалар бесәйҙе һәм тауыҡтарҙы саҡырыуҙан башҡа ымлыҡтарҙы белмәй икәнлеге асыҡланды. Аптырарға ла түгел, телдәр руссалашып, ярлыланып, этте "на-на", бесәйҙе "кил-кил" тип саҡырыуға тороп ҡалғанбыҙ.

Ләлә апай социаль селтәрҙәге төркөмөндә беҙгә лә: "Колонсаҡты нисек саҡырырға?" - тигән һорау ҡуйҙы. Бер көн көнө буйына эҙләнем яуапты, берәү ҙә белмәй. Ауылға агайҙарға шылтыратһам, улар: "Атай "чүк-чүк-чүк" тип өндәшә торғайны шикелле, беҙ бер нәмә тип тә саҡырмайбыҙ ул", - тип көлдө лә ҡуйҙылар. Аптырағас, йылҡы малы менән эш итеүсе нуғай дуҫтарға яҙҙым, улар беҙҙә ҡолондарҙы, йәш тайҙарҙы "көс-көс-көс", "кос-кос-кос" тип саҡыралар тип яуапланы. Беҙҙә нисек булалыр инде? Һарыҡ бәрәсен уларҙа "мәш-мәш-мәш" тип йыйлар икән. Беҙҙә лә күп райондарҙа бәрәстәргә "мәш-мәш-мәш" тип өндәшәләр.

Халыҡта малдың, ҡоштоң һәр төрөнә үҙ өндәшеү, мөрәжәғәт итеү ымлыҡтары булған. Беҙ уларҙы онотҡанбыҙ ғына. Ауылдарҙа ла хатта бөгөн быларҙы белмәгәндәр барҙыр әле. Мәҫәлән, этте "маһ-маһ" тип, көсөктө "көтә-көтә" тип саҡырһаң, "себә" тип ҡыуаһың, ә "пшол" тип түгел. Бесәйҙе "бес-бес-бес" тип ("кис-кис-кис" түгел), әрләгәндә "брәс" тиһең. Һарыҡты "бәр-бәр-бәр" тип эҙләйһең, икенсе интонацияла "бәрә", "бәрәкәй" тип еберәһең. Кәзәгә "кзә" тип янайһың да, "гәз-гәз-гәз" тип икмәк һонаһың. Һыйырға ҡырҙан "һәү-һәү-һәү" тип һөрәнләйһең, "һәүкәш" тип ҡыуаһың, һауғанда тынысландырыу өсөн "һәүкә", "һәүкәй" тиһең. Быҙауҙың үҙенә айырым өндәше бар, саҡырғанда "зәб-зәб-зәб-зәү", ҡыуғанда - "безәү", иркәләткәндә - "безәүкәй". Кәзә бәрәстәрен яратҡанда "төпә-төпә", һарыҡтарҙыҡын "бәрә-бәрә", көсөккә "көтө-көтө-көтө" тигән булаһың. Ҡайһы бер яҡтарҙа малды "гжжә" тип көжгөп, тауыҡтарҙы "төтөй" тип, һарыҡтарҙы "дөррә" тип туҙҙырып ебәрәләр. Былар барыһы ла малдың ҡылығына ҡарап, йәки ҡатыраҡ итеп, йәки иркәләтеп өндәшелә торған ымлыҡтар. Малдар был интонацияларҙы бик яҡшы аңлай.

Атайым атты "Ды-ы-ыу" тип ҡыуа торғайны, яйлатмаҫ өсөн атлаған ритмына "oh-oh-oh" тигән өкө тауышы һымағыраҡ өн сығарып бара ине. Уның эргәһендә барған бәләкәй ейәндәре ошо тауышты отоп алып, оҙаҡ ҡына ҡысҡырып йөрөй торғайнылар. Асыуланғанда был "ды-ыу" ҡырҡыу ғына "дыу"ға әйләнә. Туҡтатҡанда "тыр" тип түгел, ә ирендәре менән генә "пррр" тигәндә сығара. Ҡуҙғалып китеү командаһы ла "на" түгел, ә төптән сыҡҡан ҡыҫҡа ғына "һы", "һыу", "һеү" тигән өн. Һыбай йөрөгәнендә менгеһенең башын шаҡарып борғанда ла, ҡыуып юртып киткәндә лә ошо "һеү-һеү-һеү" тигәнө ишетеләп ҡала. Сығынлаған йәки өрккән атҡа "чү-чү-чү" тигәнерәк итеп яҡынлай. Алыҫтан күреп саҡырғанда йәки эҙләгәндә ат ишетеп тауыш бирһен өсөн өҙөк-өҙөк итеп талғын ғына һыҙғыра ла, иренән ослайтып, үпкәндә сыҡҡан өндә сығара. Был тауышҡа өйрәнгән ат та шундуҡ фырылдап яуаплай, ҡаршы килә. Йылғаға тура килгәндә атын һыҙғырып эсерә йәки үҙәк төбөнән өҙләгәнерәк бер һыҙыҡы өн сығара. Уны һулышы бөткәнсе һуҙа ла, тәрән тын алып, тағы яңынан башлай. Был ауаз аттың һыуһынын ҡандырамы, әллә уға күберәк эсергә ҡушамы, әллә юҡ-барға иғтибар итмәй, өркмәй торорға өндәп тынысландырамы - кем белә инде бөгөн?

Үҙебеҙ ҙә бала саҡта һыйырҙарҙы мәкегә төшөргәндә "се-е-еү-ү-ү" тип һуҙып тора торғайныҡ. Уны шул ололарҙан күргәнбеҙҙер инде. Бөгөн күп ирҙәр атын "тпру" тип туҡтата, "на" тип ҡыуа, артҡа бирҙергәндә "назад" тип бойора. Этҡә команданы ла "взять", "фу", "апорт" тиҙәр. Үҙҙәре генә түгел, малдары ла урыҫлашҡан, күрәһең. Бала саҡта, русса белмәгәс, һунар эттәрен "һоп-һоп" тип агас аша һикертә, "һәс-һәс" тип һөсләй, "һәй-һәй" тип әйәртеп алып китә торғайныҡ. Бик яҡшы төшөнәләр ине.

Ҡоштарҙың да һәр береһенең үҙ ымлығы бар. Ҡаҙҙарҙы "гел-гел-гел", өйрәкте "үти-үти-үти", тауыҡты "тип-тип-тип", күркәне "гөр-гөр-гөр", себештәрҙе "сип-сип-сип" тип саҡыраһың. Ҡыуғанда ҡош-ҡортто "көш", "көшә", тауыҡтарҙы "типә" тип ҡыуа торғайныҡ.

Мал-ҡоштан тыш, балаларға өндәшкәндә лә ҡулланыла ымлыҡтар. Мәҫәлән, бала шаулаһа, уға "сеү" тиҙәр ине. Илағанында "сеү-сеү" тип йыуаталар. Ашарға биргәндә "мәм-мәм" тип һоналар. Йоҡларға ваҡыт икәнде "бәү-бәү" тип, мунсаға барыуҙы, йыуыныуҙы "сәп-сәп", "тәс-тәс" тиҙәр. Бала баҫып торорға ынтыла башлаһа, "ай-һа-ай" тип дәртләндерәләр. Матурлыҡты төртөп күрһәтеп, тел сартлатып "тә-тә-тә" тип һоҡланырға өйрәтәбеҙ. Ҡайҙалыр алып барыуҙы "әйҙә-әйҙә" тибеҙ. Мәҫәлән, кейендергәндә, төргәндә ҡаршылашмаһын өсөн сабыйға "әйҙә-әйҙә" тиһәң, ул ҡайҙалыр барыуҙы аңлап ынтыла башлай. Һикерткәндә "һоп-һоп" иттерәбеҙ. Ололар (ғәҙәттә, әбейҙәр) усына ултыртып, өҫкә күтәреп бейеткәндә "лиҙер-луҙер-ләритә" тигәнерәк оҙон һамаҡ та ҡуллана. Аяғын тотҡанда "бессс" тип әйәп торалар. Бөгөнгө памперстар "бес"те телдән алып ташлағандыр ҙа инде... Һәм, ниңәһе ҡыҙыҡ, бәләкәстәрҙең теле асыла башлау менән улар шул малды, ҡоштарҙы ымлап саҡыра, өндәшә башлай. Бесәйҙе күреп "бес-бес" тип, ҡоштарға "тип-тип" тип ынтыла. Был уларҙың уртаҡ теле, күрәһең.

Уйлап ҡараһаң, оло кешеләр бер ҙә бер-береһенә ымлыҡтар менән мөрәжәғәт итмәй. Әйҙә "мәмәй" ашап алайыҡ йәки "бәй-бәй" булайыҡ, тимәйбеҙ бит. Был аралашыу ысулы бары тик мал-тыуарға, ҡош-ҡортҡа һәм бәләкәй балаларға ҡарата ғына ҡулланыла. Тимәк, улар мәғәнә биреүгә ҡарағанда, күберәк (күберәк кенә лә түгел, башлыса) эмоциональ, интуитив тәьҫиргә ҡоролған.

Үкенескә ҡаршы, ошо артыҡ әллә ни ҡағиҙә талап итмәгән ымлыҡтар ҙа онотолоп бөтөп бара. Бөтәһен дә "кил-кил" тип саҡыра ла ҡуябыҙ, этен дә, ҡошон да. Ә ниндәй тел байлығы ҡулланылмай әрәм була!

Мин бында үҙем белгән ымлыҡтарҙы иҫкә төшөрҙөм, ә һеҙҙең яҡта нисек итеп өндәшәләр мал-ҡошҡа?

**Миләүшә ХӘБИЛОВА.**

ЙӘНӘШӘБЕҘҘӘ...

**Хәҙерге көндә төрлө гәзиттәрҙә мәҡәләләрем сығып торһа ла, тәп һөнәремдең хәрби табип икәнен күптәр беләләр. Яҙыша башлағанда (ҡырҡ биш йәштәр тирәһендә) тел буйынса белемем - мәктәп программаһы буйынса үткән кимәлдә генә ине. Сирек быуат хәрби хеҙмәттә йөрөгән арала был белемем дә бер аҙ шыйығая төшкән булғандыр, тип уйлайым. Шунлыктан, баштараҡ яҙған хикәйә-маҙарҙарымды тел белгесенән уҡытып, төҙәттереп алыуҙы хәйерлерәк тип һанай инем.**

# БАШҠОРТСА ЯҘМАЛАРЫМДЫ...

## мәрйә киленебеҙ тикшерҙе



Иң тәүге башҡортса яҙмаларымды Анна Ивановна Гребневанан (ире буйынса фамилияһы - Арыҫланова) тикшертеп, хаталарын төҙәттереп алдым. Беҙгә килен тейеш кеше ул - Тәфтизән исемле бер туған ҡәйнешемдең ҡатыны. БДУ-ның филология факультетының башҡорт теле бүлеген тамамлаған... Бына шул Баймаҡ районы Икенсе Этҡол ауылында тыуып үҫкән Гребневтар ғаиләһенән сыҡҡан "мәрйә" киленебеҙ Аня һәм уның туғандары хаҡында һүҙем. Ҡәйнешемдең туйында ошо матур ғаилә менән таныштыҡ. Милләте урыҫ булыуына ҡарамаҫтан, бала саҡтарынан башҡорт араһында йәшәп, башҡорт рухында тәрбиәләнеп үҫкән улар. Башҡа ауылдарҙан, Баймаҡтан туғандары ла килгәйне. Ҡоҙаларҙың барыһының да "бәгзе бер башҡортондо һатып ебәрерлек" итеп беҙҙең телдә һөйләшеүҙәренә ғәжәпләнеп бөтә алманым. "...Бына, ҡоҙалар, тыңлағыҙ әле, Алла бойорһа..." тип һүҙ башлап ебәреүҙәре генә үҙе ни тора. Һүҙ араларында "Эй, Аллам!" тип тә ҡушып ебәрәләр. Мулла никах уҡығанда ирҙәре түбәтәй кейеп, ҡатын-ҡыҙҙарының яулыҡ ябынып ултырыуҙары ла, никах уҡылып, доға ҡылынғандан һуң беҙҙең ыңғайға бит һыйпауҙары ла күңелгә ятты. Гребневтарҙың беҙгә булған ана шундай мөнәсәбәтен мин үҙем, шәхсән, уларҙың бөтә башҡорт милләтенә, теленә һәм ғөрөф-ғәҙәтенә ихтирамы, тип ҡабул иттем.

Анна килендең башҡорт теленә бәйле бер нисә мәҙәк хәлдәрен һөйләгәнен дә хәтерләйем. Уның Икенсе Этҡол ауылында йылҡы үрсетеп, етеш кенә йәшәп ятҡан Леонид исемле бер туған ағаһы ла бар. Леня (Аня килен уны шулай тип атай) Совет армияһы сафына хәрби хеҙмәткә алынғас, бер аҙҙан һеңлекәшенә хат яҙа икән: "...Демократик Германияның Фәлән ҡалаһына килеп эләктем. Башҡорттарҙан мин бында бер үҙем генә..." Шул турала йыш ҡына һөйләшеп, көлөшөп алабыҙ.

Бер мәл Леонид Ивановичыбыҙ Баймаҡтан машинаһы менән ауылына ҡайтып барғанда юлда ике ҡатынды Фәлән ауылға тиклем ултыртып алған. Олораҡ йәштәрҙәге әлеге ике апай рәхәтләнеп башҡортса һөйләшеп киләләр икән. "Был урыҫ беҙҙән юл хаҡына күпме аҡса алыр икән?" тиғән һорау айырыуса борсоған был апайҙарҙың ауылына барып еткәс, ҡоҙабыҙ: "Килеп еттек, апайҙар. Аҡсағыҙ ҙа, бер нәмәгеҙ ҙә кәрәкмәй", - тип саф башҡортса хәбәр һалғас, был ике ҡатын албырғап ҡалған. "Уй, ауыҙыңа май булғыры, башҡортса белә лә баһа..." - тип, көлөшә-көлөшә төшөп ҡалғандар, имеш...

Ҡасандыр бер мәл Леонид ҡоҙабыҙ миңә "әре ҡорт" тигән һүҙҙең мәғәнәһен дә бик яҡшы ғына итеп төшөндөрөп биргәйне. Йәй буйына "бер ни ҙә эшләмәй", йәғни, бал йыймай, тик ашап ҡына йөрөгән ата бал ҡорттарының ана шулай тип аталғанын да белмәй йөрөгәнмен мин үҙем - саф башҡорт балаһы! Ялҡау кеше хаҡында "әреғорт" тиеүҙәрен генә белә инем дә ул... Гөлсөм исемле уңған башҡорт ҡыҙын көләш итеп алып, татыу ғаилә ҡороп, балалар үҫтереп, байтаҡ йылдар тыуған ауылында ғүмер итә Леонид ҡоҙа. Инде ныҡ ҡартайған, урынынан ҡуҙғала алмай ятҡан сирле әсәһен - Анастасия әбейҙе лә эшһөйәр Гөлсөм килене менән ҡәҙерләп ҡарайҙар.

Ә Анна киленебеҙ Тәфтизән ҡәйнеш менән биш бала тәрбиәләп үҫтереп алып киләләр. Барыһы ла башҡорт телендә генә һөйләшә, башҡорт мәктәптәрендә уҡынылар. Ғәиздәренә, кемдер әйтмешләй, "нейтральный" ҙа түгел, ә саф башҡорт исемдәрен биргәндәр. Малайҙары - Фиҙан, Даян, Раян, ә ҡыҙҙары - Ләйсән һәм Әминә. Даян улдары мәсеткә йома намаҙына ла йөрөй башлаған. Уңған мәрйә килен башҡортсалап бишбармаҡты ла телеңдә йоторлоҡ итеп бешерә. Күптән түгел уның үҙе менән дә башҡорт теленә ҡағылышлы бер ҡыҙыҡ хәл булған икән. "Әсәлек даны" миҙалы биреү өсөн хәҙер гүзәлдәребеҙҙе Өфө ҡалаһына саҡыртып, улар лайыҡ булған ана шул хөкүмәт наградаларын тантаналы рәүештә тапшыра торған йола бар бит әле. Баш ҡалаға килеп, миҙалдар тапшырылып бөтөлгәс, бәгзе әсәләрҙән телевидение хәбәрселәре интервью ала башлаған. Башҡорт хәбәрселәре - башҡорттарға, ә рус телендә тапшырыу алып барыусылар урыҫ ҡатындарына мөрәжәғәт итә икән. Йөҙгә лә "ысын мәрйә" булған һары сәсле, зәңгәр күҙле Анна киленебеҙгә корреспондент урыҫ телендә һәр төрлө һорауҙар яуҙырырға тотонған. Киленебеҙ ҙә, әлбиттә, уға урыҫса ғына яуап биргән. Тормош-көнкүреш, йорт хужалығы хаҡында ла һораша икән хәбәрсе. "Хужалығығыҙҙа ниндәй мал-тыуарығыҙ бар?" тигән һорауға яуап бирә генә башлағайным, тулҡынланыуҙан, "әре мөгөҙлө мал" тигән һүҙҙең урыҫсаһын онотгом да ҡуйҙым", - тип көлдөрҙө бер мәл беҙҙең Анна Ивановнабыҙ.

Күп милләтле республикабыҙҙа бына ошондай хәлдәр ҙә булғылап тора. Ата-әсәһе "сепсей" башҡорт булып, хатта Башҡортостанда йәшәп тә, балалары һөйләшеү генә лә түгел, ә бөтөнләйгә туған телен аңламаған ғаиләләр күп. Ана шундай күптәр өсөн фәһем булырлыҡ кешеләр хаҡында яҙмай булдыра алманым.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ



# НАҘАНҒА ЯУАП БИРМӘ,

## өндәшмә лә ҡуй...

**Ҡайһы берәүҙәр ғүмер буйы тупаҫ ғәҙәтле, ҡабынып китеүсән була. Уларҙың тәрбиәһе һәм иманы яуызлыҡ менән генә сикләнмәй, бындай тәртипте үҙгәртергә кәрәк, тип һанамай улар. Асыуланған саҡтарында бындай кешеләрҙең теленән йәмһеҙ һүҙҙәр ағыла ғына. Нисек кенә әйтһәң дә, уларҙы туктатып булмай. Тәрбиәле кешеләр ундайҙар менән мөғәмәлә иткәндә бер генә юл һайлай: бәхәскә инеүҙән тыйылып ҡала.**

Бер ваҡыт йәмғиәттә тәрбиәһеҙлеге менән танылған кешеләрҙең берәһе Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең өйөнә инергә уйлап, уның ишеген шаҡыған. Бәйғәмбәр уны өйөнә индерә, уның менән йомшаҡ, матур итеп һөйләшә. Ул кешене оҙатҡас, ҡатыны Ғәйшә: "Эй, Аллаһтың илсеһе! Был кешенең Һеҙҙең менән йәмһеҙ һөйләшкәнен ишетһәгеҙ ҙә, йөҙөгөҙгә һис борсолоу ғәләмәте сыҡманы, киреһенсә, уның менән бик ихтирамлы һөйләштегеҙ", - тигән. Бәйғәмбәребеҙ былай тип яуап биргән: "Йә, Ғәйшә! Һин берәй ваҡыт минең тупаҫ һөйләшкәнемде ишеттеңме әллә? Шундай тупаҫ һөйләшеүҙәрҙән ҡурҡып, бындай кешеләр менән осрашмай башлаған кеше Ҡиәмәт көнөндә иң насар кешеләрҙән һаналыр".

Был хәҡиҡәткә көндәлек тәжрибәбеҙ үҙе үк инандыра, сөнки наҙан кеше менән ихлас күңелдән һөйләшеп ултырыу уның тәрбиәлек ғәҙәттәренә зыян итә аламы ни? Ҡөрьән Кәримдә Аллаһы Тәғәлә сабырлыҡ сифатын беренсе урынға ҡуя: "Кемдәр ер йөҙөндә итәғәт менән йөрөй, шулар мәрхәмәтле Аллаһтың бәндәләре булыр. Улар наҙан ахмаҡтарҙың әҙәпһеҙлегенә ҡаршы сәләм менән яуап бирә" ("Фурҡан" сүрәһе, 63-сө аят).

Сәид бин Мүсәиб былай ти: "Бер ваҡыт, Бәйғәмбәребеҙ үҙенең иптәштәре менән ултырғанда, бер кеше хәҙрәти Әбү Бәкергә ҡаршы йәмһеҙ һүҙҙәр әйтте. Ул быға бик асыуланһа ла, өндәшмәне. Икенсе юлы теге кеше тағы ла ауырыраҡ һүҙҙәр әйтте, Әбү Бәкер өндәшмәй ултырыуын дауам итте. Инде өсөнсө тапҡыр ҙа рәнйеткәс, Әбү Бәкер уға яуап ҡайтарырға ынтылды. Шул саҡ Бәйғәмбәребеҙ урынынан ҡуҙғалды. "Һин минән риза түгелһеңме?" - тип һораны Әбү Бәкер. Бәйғәмбәребеҙ быға ҡаршы: "Күктән фәрештә төшөп, был кеше һөйләгәндәрҙе инҡар итеп торҙо. Ә һин яуап бирергә уйлағас, фәрештә осоп китте лә, уның урынына Иблис килеп ултырҙы. Иблис ултырған ерҙә минең ултырғым килмәй" (Әбү Дауыт).

Аҡылыҙ һәм тәрбиәһеҙ кешеләргә хөрмәт күрһәтеү - ул әле уларҙың түбән һәм мәғәнәһеҙ ғәмәлдәре ҡабул ителергә тейеш тигән һүҙ түгел. Был ике осраҡта ҙур айырма бар.

Беренсе осраҡ кешегә тәрбиәһеҙ һәм аҡылһыҙ кеше янында сығырынан сыҡмаҫҡа һәм уға үҙ асылын - яуызлығын һәм дыуамаллығын күрһәтергә мөмкинлек бирмәҫкә кәрәклеген аңлата.

Икенсе осраҡ - ҡапма-ҡаршы мәғәнәлә. Бында ул кешегә аҡылһыҙлыҡ һәм яманатҡа буйһонорға, ҡайһы бер аҡылһыҙ һәм яҡшы кешеләр рәхәтләнеп ҡабул итә торған ғәмәлдәрҙе ҡабул итергә өндәй.

Ҡөрьән Кәрим тәрбиәһеҙ кешеләргә ихтирамды, уларҙың түбән һәм алама ғәмәлдәрен һөймәүҙе бына нисек аңлата: "Һүгенеү һүҙен ҡысҡырып әйтеүселәрҙе Аллаһ яратмаҫ. Фәҡәт ғәҙелһеҙлеккә дусар ителгәндән башҡа. Аллаһ барыһын да ишетеп, күреп тора. Әгәр зарар итеүсегә изгелекте күрһәтеп, йәки йәшертен эшләһәгеҙ һәм ғәфү итһәгеҙ, был эш холоҡтоң яҡшылығынандыр. Шөбһәһеҙ, Аллаһ артығы менән ғәфү итеүсе һәм ҡөҙрәт эйәһелер" ("Ниса" сүрәһе, 148,149-сы аяттар).

✓ ***Дим бынан берәй ҡомаҡ килеп сыҡмаһын, тип, тиҙерәк тышҡа ашыҡты. Үҙе артынан люкты ябып торғанда ғына унның ҡолағына шыбырлау тауышы ишетелде. Ул тауыш өс кенә хәреф еткерҙе: "Дим..."***






Төҙөлөштә кран эшләй. Юҡ, төнөн унда бер кем дә юҡ, әлбиттә. Застройщик шулай, клиенттар иғтибарын йәлеп итә. Тәҙрәһеҙ ун биш ҡатлы бинаны тирә-яҡлап дүрт прожектор яҡтырта, ә төҙөүсе фирмаһы яҙылған кран, уттар менән яҡтыртылып, түңәрәк хәрәкәттәр яһай. Бындай шоу төнгө бергә тиклем генә дауам итә. Тимәк, ваҡыт әле бигүк һуң түгел. Әгәр Дим ошо ваҡытта инеп йоҡларға ятһа, иртән эшенә йоҡлап ҡалмаҫ. Тик кран ғына тышта ҡалырға өндәп, үҙ янына саҡырып, ҡул болғаған кеше кеүек борғоланып тора.

Дим шуға алданып, алға ынтылды һәм шул саҡта тайып йығылып, аҫҡа тәгәрәне. Ямғыр еүешләгән тауҙан шыуып төшөү ҡарлыһынан бер ҙә кәм түгел. Кейем генә бысрай шул, тән дә ауырта. Дим күлгә килеп етер-етмәҫ ерҙә туҡтап ҡалды. Күктә бер йондоҙ ҙа күренмәй, болоттар ҙа юҡ кеүек, бары ҡараңғылыҡ. Егет торорға тип эсенә боролоп ятты. Шул саҡта ҡулы менән нимәгәлер тотондо. Баҡа ғына булып ҡуймаһын! Юҡ, был ниндәйҙер баулы сепрәк. Дим тубыҡланып табышын ҡарарға кереште.

Ҡараңғыла бигүк күренмәй, әммә әйберҙең ни икәнен асыҡларға телефон яҡтыһы ярҙам итте. Кеда бит был. Ҡыҙыл төҫтә. Дим Ахунйәновҡа шылтыратып, хәҙер үк бында килеүен талап итте.

Тәк, бер кеда булғас, икенсеһе лә ҡайҙалыр ошонда булырға тейеш. Юҡ, был сәғәттә артыҡ соҡоноп йөрөү һөҙөмтәһеҙ булыр. Нисек тә булһа, шыуғалаҡ буйлап өҫкә үрмәләргә һәм өй янында полицияны көтөп алырға кәрәк.

Бер нисә секунд эсендә шыуып төшкән тауға кире үрмәләүе байтаҡ ваҡытты алды. Әгәр бейегерәк үлән һәм селек булмаһа, бөтөнләй менеп булмаҫ ине. Өҫкә еткәнсе ҡапҡаға туҡылдатыу тауышы ишетелде.

Дим Ахунйәновты урам эсенә лә индермәй, белгәндәрен һөйләй башланы. Төнгө ун берҙә малай ҡысҡырыуын ишетеүе тураһында ла, ун бер икәнен ут һүндереү һөҙөмтәһендә белгәне тураһында ла, Гөлдө юғалтып, яңы ғына унның һыңар аяҡ кейемен табыуы тураһында ла... Бер ни ҙә йәшермәне.

- Тимәк, һин ул ҡыҙ менән ут һүндереү аша аралашаһың, ҡайһы саҡта бергә трамвайҙа бараһығыҙ. Әммә һин унның фамилияһын да, туғандарын да, әхирәттәрен дә белмәйһең? - Ахунйәнов асыҡлыҡ индерергә тырышты.

- Эйе, әммә быларҙың барыһы ла мөһим түгел. Ул бит юғалды, уны шул уҡ енәйәтсе алған. Албаҫтымы, кемме, белмәйем. Хәҙер үк кинологтарҙы саҡырығыҙ, уларҙың эттәре кешеләрҙе таба ала, мин беләм!

- Туҡта, башта туғандар кеше юғалыуы тураһында ғариза яҙырға тейеш. Шунан ғына ниҙер эшләргә мөмкин. Әлегә бер кем дә мөрәжәғәт итмәне,- Ахунйәнов Димде ут бағанаһына яҡынырaҡ етәкләп алып өҫ-башын ҡарай башланы.

- Улар белмәйҙәрҙер, мин беләм. Гөл юғалған. Участкаға алып бар, фотороботын төҙөрбөҙ.

- Әллә эскәнһең, өр әле, - участка полицияһы егеттең йөҙөн үҙенә бороп, күҙенә ҡараны. - Беләһеңме нимә? Хәҙер үк өйөңә инеп йыуынып ал һәм йоҡларға ят! Тағы берҙе иҫереп мине саҡыртһаң- бикләп ҡуям!

- Ә Гөл?

- Ниндәй Гөл тағы? Хәҙер үк күҙемдән юғалмаһаң, үҙең ошо күл буйында юғалырһың! - Ахунйәнов ҡыҙа башланы.

Дим полицияны ышандырырға тип әллә күпме дәлил килтерергә теләне, әммә башына бер һүҙ ҙә килмәгәс, эстән генә һүгенде лә, ярһыуын йәшереп, ҡапҡа артында юғалды.

Ахунйәнов бер аҙ ҡойма буйында ятҡан ҙур аҡ этҡә ҡарап торғандан һуң трамвай юлдары буйлап атлап китте. Бында машина менән килеп туҡтауы ҡыйын шул. Уны алыҫтараҡ ҡалдырырға тура килде.

* * *

Дим ҡулына йыуылған кеды һыңарын тотоп, солан тәҙрәһе аша тышҡа ҡарап тора. Бында һалҡын булһа ла, түҙерлек. Сөнки ошонда ғына күлгә сыҡҡан тәҙрә бар. Унның ярында әлеге лә баяғы эт еҫкәнеп йөрөй. Әгәр Гөлдөң аяҡ кейеме нисек унда эләккәнен берәйһе белһә, ул - ошо эт кенә. Йәһәтерәк, хужаһын асыҡларға кәрәк.

Дим кеда һыңарын ҡалдырып, Тамара әбей йортона йүнәлде. Борондан бында йәшәгән ҡатын, моғайын, эт хужаһын беләләр. Әбей ниҙер ишетһен өсөн оҙаҡ һәм көслө генә ишеккә туҡылдатырға тура килде. Ниһайәт, тәҙрә аша кемдеңдер һыны күренде. Дим шул тәҙрә алдына тороп баҫҡас, ул ишек яғына атланы.

- Бәй, Дим, һинме ни? Мин әле кем килгән, тип баш ватам. Әллә берәй жуликтар йөрөймө икән, тим.

- Тамара инәй, бында уралып йөрөгән ҙур аҡ эттең хужаһы кем ул? - Дим һаулыҡ та һорашып тормайынса, килеү сәбәбен асыҡларға булды.

- Тороп тор, хәҙер сығам,- Тамара бер аҙ шым торғас, өйөнә боролоп инде. Әйләнеп сыҡҡанында ул башына яулыҡ ябынып, өҫтөнә плащ кейгән ине. - Әйҙә әле, улым, Сашкаға барып киләйек. Мин унның баҙында сөгөлдөр-кишеремде һаҡлайым. Врач минә йәшелсә ашарға ҡушты, - тип әбей күршеһен етәкләп алды.

Дим күлгә тағы бер ҡараш ташлап, һорауын ҡабатланы.

- Анау йөрөгән аҡ эт кемдеке ул?

Әбей туҡтап ҡалды. Бер аҙ күлгә тексәйеп торғас, яуап ҡайтарҙы.

- Былмы ни? Ул бит Маһмай. Маһмай унның ҡушаматы. Мин ниндәй эт, тигән булам. Хужаһыҙ ул. Уны көткән ғаилә бер-ике йыл элек күсеп китте. Шунан бирле ул тегендә-бында һуғылып йөрөй.

Маһмай һиңә, ул бит сусҡа кеүек, кем дә булһа этте ашатып тора, тип уйланы Дим. Былар Сашаның өй ҡырына етте. Егет тупһаға менә башланы.

- Ҡайҙа киттең? Бына бит баҙ! - Әбей баҙ ауыҙына эйелеп, асҡыс менән йоҙаҡты аса башланы.

Бындағы люк ҡоҙоҡ, йә бункер ҡапҡасына оҡшаш, баҙ тип уйламаҫһың да.

- Шунда баҫҡыс булырға тейеш, мә! - тип әбей пакет һуҙҙы. - Эрерәк сөгөлдөрҙәр йыйып бирһәң, дүртәү етер ул. Ах, онотҡанмын, фонаригың бармы?

- Телефонымда бар, күрәм ул, - Дим яуабын баҙ төбөнән ҡысҡырҙы. Әммә Тамара быны ишетмәне, ахыры. Үҙалдына һөйләнә башланы:

- Ошонда ҡайҙалыр свите тоҡанырға тейеш. Баҙында ут бар ул. Ҡайҙа икән?

- Кәрәкмәй! Сөгөлдөр алдым! - тип ҡысҡырҙы Дим.

Баҙ үҙе буйы-арҡырыһына метрҙан саҡ ҡына киңерәк. Әммә бер ниндәй ҙә лампочка бында күренмәй. Ер аҫтында дымлы һәм һыуыҡ. Егет баҫҡысҡа менгәндә пакеты стенаға һуғылды. Ундағы фанера шылып китте, ахыры. Ниндәйҙер ҡыштырлаған тауыш ишетелә башланы. Дим бынан берәй ҡомаҡ килеп сыҡмаһын, тип, тиҙерәк тышҡа ашыҡты. Үҙе артынан люкты ябып торғанда ғына унның ҡолағына шыбырлау тауышы ишетелде. Ул тауыш өс кенә хәреф еткерҙе: "Дим..."

- Сыҡтың дамы ни? Ҡайҙа? Эрерәктәре юҡ инеме? - Тамара бауылдарға кереште.

- Теләһәгеҙ, төшөп башҡаларын алам, - тип яуапланы Дим.

- Юҡ, ярай, әлегә бара ул. Аҙаҡ, Сашка ҡайтҡас, тағы берәй рейс сығартырмын, - тигән һүҙҙәр менән әбей баҙҙы йоҙаҡларға кереште.

* * *

– Аша, аша, - Саша Маһмайға сей ит киҫәген һуҙҙы. Ул яңы ғына шабашканан ҡайтты. Бер аҙ һаҡау булғанлыҡтан, ир заманында һөнәри белем алырға ояллы. Ояллы, тип, булдыра алманы. Техникум программаһы ла уға ауыр бирелде. Шуға киләсәккә бер ниндәй ҙә пландар ҡороп тормай, ниндәй эш килеп сыға, шуға тотондо. Тик башҡа шабашкасыларҙан айырмалы рәүештә, ул аҡсаны эскегә түгел, ә Маһмайға бөтөрҙө.

Саша икенсе ит киҫәген кеҫәһенә һалып, баҙын аса башланы. Сыйылдап асылған люкты артҡа ырғытып, ҡулын аҫҡа һуҙып, эстә ут тоҡандырҙы. Бына ул Дим ҡыйшайтҡан фанера киҫәген ситкә ташлап эскә үтте. Бында урын иркенерәк. Дөрөҫөрәге, был гастарбайтерҙар йәшәй торған вагончик. Тик ул ер аҫтына күмелгән һәм бөтә яҡлап йомшаҡ матрастар менән йылытылған.

Иҙәндә хәлһеҙ һәм яланаяҡ Гөл ята. Өҫтөндә лә үҙенең кейеме түгел, еңелсә генә йәйге күлдәк. Александр кеҫәһенән ит киҫәген сығарып, ҡыҙ янына сүкәйеп ултырҙы.

- Мин һиңә ашарға килтерҙем. Мә, - тип Гөлдөң кипкән ирендәренә сей ит киҫәге менән төрттө.

Ҡапылдан ҡыҙ һуңғы көстәрен туплап, аяғүрә торҙо һәм таштай ҙур әҙәмдең елкәһенә тутыҡҡан сөй менән сәнсте. Яранан сағыу ҡыҙыл ҡан аға башланы.

- Дим, Дим! - тип һөрәнләне ҡыҙ. Саша тиҙ аңына килеп, ҡыҙҙың сикәһенә усы менән һуғып ебәрҙе. Быны көтмәгән ҡыҙ "аһ" тип тә әйтеп өлгөрмәй, аңып юғалтып, иҙәнгә ҡоланы.

Ир ашыға-ашыға тышҡа үрмәләне. Инде кейеме ҡыҙыл ҡанға буялып бөттө. Сашаның быңдай ҡиәфәттә килеп сығыуына Маһмай өрә башланы. Ир ыңғырашыуын тыйып, баҙ ҡапҡасын йоҙаҡларға кереште.

Эт өрөүенә Дим сыҡты. Ҡанға батҡан күршеһенең баҙ бикләгәнен күреп, тиҙ генә кире өйөнә йәшенде. Гөл шунда! Башҡа бер ҡайҙа ла булыуы мөмкин түгел. Ахунйәновҡа шылтыратырға кәрәк!

- Алло, - телефондың теге яҡ осонда тыныс тауыш ишетелде.

- Алло, был Дим! Мин Гөлдөң дә, теге малайҙың да ҡайҙа юғалғанын таптым! Улар күрше Сашаның баҙында. Әле генә ул шунан ҡанға батып килеп сыҡты, - Дим тулҡынланыуынан бөтә хәрефтәрҙе лә аныҡ әйтә алманы.

- Ашыҡма. Тимәк, һин, ҡыҙың күршенең баҙында, тиһең?

- Эйе!

- Быны нисек дәлилләрһең?

- Көндөҙ мин унда әбейҙең йәшелсәһен алырға төштөм. Унда бер фанера алына ине, әле Саша шунан ҡанға батып килеп сыҡты!

- Шунан? Бәлки күршең яңылыш ҡырҡылғандыр?

- Юҡ, Гөл шунда. Малай ҙа шунда. Һеҙ был енәйәттең осона сығырға теләмәйһегеҙме ни?

- Туҡтале, Дим, малай табылды.

- Нисек инде табылды?

- Буйға, төҫкә оҡшаш малай кәүҙәһен кисә төҙөлөштә тапҡандар. Лифт шахтаһында ҡыҫылып торған булған.

- Ә кем ҡысҡырҙы һуң төнөн?

- Этем белһен, унда төнөн кем генә йөрөмәй. Башҡаса миңә шылтыратма, йәме? Мин ниндәйҙер истеричка өсөн документһыҙ-ниһеҙ кеше баҙына төшөп йөрөй алмайым.

- Ә? - Дим ниҙер әйтергә уйланы, тик башҡа бер ниндәй ҙә фекер килмәй ине.

- Ҡыҙыҡай һинән үҙе ҡасҡандыр әле. Бик сәйерһең, - Ахунйәнов трубканы ташланы.

Аңлашылды. Бында ғәҙелһеҙлек эҙләп башҡаларға мөрәжәғәт итеү мәғәнәһеҙ. Хөкөмсө ҡоралын үҙ ҡулыңа алырға кәрәк. Ҡул һелтәр өсөн инде һуң. Күп аҙымдар үтелгән. Ә бәлки, Дим бер ҡайҙа ла бармағандыр? Ул бит бөтөн көстән тырышып та ҡараманы? Бер урында тыпырсыныу был. Юҡ. Хәҙер алға һәм алға, үҙеңә енәйәт ҡылырға кәрәк булһа ла ҡурҡмаҫҡа кәрәк. Полиция бында барыбер килмәй. Хәҙер бер кем яҡлау тәҡдим итеп, ишек шаҡымаҫ, үҙеңә бар ишектәрҙе осора тибергә кәрәк.

Дим атылып тышҡа сыҡты. Тик артабан ни эшләргә белмәй ине. Сашаға инеп, уға пистолет тоҫҡарғамы? Ә еңергә көс етерме? Әллә лом тотоп, баҙ ҡапҡасын шаҡарып ҡарарғамы? Ни эшләргә?

Ҡапыл йорт алдынан Маһмай йүгереп үтте лә туҡтап ҡалды. Ауыҙына ниҙер ҡапҡан. Эт һуҙылып ятып табышын кимерергә тотондо. Был бит ҡыҙыл кеды! Дим кире өйөнә инеп, үҙе тапҡан һыңарын эҙләргә тотондо, әллә был берәҙәк шуны һөйрәтеп йөрөтәме? Юҡ, Дим тапҡаны өйҙә. Шул саҡ егет этҡә тоҫҡап ата башланы. Тик пистолеттың зыяны күберәк пулянан түгел, тауышынан килә ине.

Маһмай ашыҡмай урынынан торҙо. Биш тапҡыр яңғыраған атыуҙың береһе лә этҡә эләкмәгән, ахыры. Улайһа, мә һиңә тағы, мә! Атыуҙан сыҡҡан шартлау урынына буш затвор тауышы ишетелде. Маһмайҙан һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә булып ҡан аға.

**(Дауамы бар).**

**✓ *Замандаштары тарафынан ҡабул ителмәй йәшәгәндә лә бөгөн беҙ нигеҙләнер әҙәби байлыҡ ҡалдыра алған. Һәм әле беҙгә тап шундай Рәмиҙәр етмәй. Мәктәптәргә, заводтарға, хакимиәткә, ил етәкселегенә етмәй Рәмиҙәр...***



*ИЖАДХАНА*

# БЫЛ ТАРИХ...

## тәрбиәләй, һабаҡ бирә, рухты уята



**Билдәле режиссер, Ш.Бабич исемендәге йәштәр премияһы лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Булат Тимербай улы Йосоповтың "Беренсе Республика" фильмы С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһына тәҡдим ителде. Ҡынылышлы мәл алдынан режиссерҙың үҙенә бер нисә һорау менән мөрәжәғәт итек.**

**➔ Булат Тимербай улы, тамашасы бер-бер артлы ҡараған билдәле фильмдарығыҙ халыҡҡа ниндәй мәғлүмәт алып килергә тейеш ине: республиканың йөҙ йыллығына бәйле тарихтымы, әллә айырым шәхестәр хаҡындағы иҫтәлектеме?**

-"Беренсе Республика" фильмы тәүге төшөргән "Бабич" фильмының дауамы. "Бабич" фильмы уҙған быуаттың 20-се йылдар башындағы сағыу ижтимағи-сәйәси эшмәкәр, шағир Шәйехзада Бабичтың тормош һәм ижад тарихы ине. Картинала төп ролде Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры артисы Илгиз Таһиров башҡарҙы. Был тема менән 1996 йылда уҡ, Ғәзим Шафиҡовтың Бабичҡа арналған китаптарын уҡығандан һуң дәртләнеп киткәйнем. Унан студенттарҙың авторҙары Таңсулпан Бабичева һәм Гөлсәсәк Саламатова булған "10 июль" диплом спектакле йәнә темаға әйләнеп ҡайтырға мәжбүр итте. Ошо темалар минең тыуасаҡ фильмымдағы бөтә геройҙарҙы күҙ алдына баҫтырҙы ла ҡуйҙы. "Бабич"тан һуң, йәғни республиканы төҙөүселәр, ҡороусылар, уға нигеҙ һалыусылар быуынынан һуң, республиканы артабан үҫтереүсе, формалаштырыусы, рухи яғын бар итеүселәр тураһында фильм тыуырға тейеш ине.

Башта миңә тулы метражлы сериал төшөрөргә һәм унда һәр герой үҙ тарихы менән бер серияны биләргә тейеш һымаҡ тойолғайны. Мәҫәлән, беренсе серия "Бабич" булһа, икенсеһе театрға, әҙәбиәткә, өсөнсөһө Дауыт Юлтыйға, дүртенсеһе Амантайға һәм башҡаларға арналырға тейеш ине. Был тәңгәлдә һөйләшеүҙәр, бәхәстәр барҙы һәм беҙ, ижади коллектив, әле һеҙ күргән вариантта туҡталдыҡ.

Беҙ был фильмдар менән тамашасыға нимә күрһәтергә теләнек? Бына ошондай бөйөк шәхестәребеҙ репрессияланған тигәнде генә түгел, ә бына ошо бер быуын беҙҙең бөгөнгө телдең, әҙәбиәттең, мәҙәниәттең, мәғарифтың, сәнғәттең нигеҙен булдырған, үҙ милләтебеҙ вәкилдәре эшләгән быны, ә кемдәрҙер ситтән килеп түгел. Һәм улар беренсе республиканы яһаусылар, йәғни ошо идеяны уйлап табыусылар һәм беренсе булып тормошҡа ашырыусылар. Йәғни, улар уникаль, ҡабатланмаҫ, ҡыйыу, белемле, һәләтле кешеләр. Һәм бына ошо беренселәр - улар тап беҙҙең милләт вәкилдәре. Улар алғы сафта, беренселектә барып, үҙҙәрен шәһит иткән, ҡорбанлыҡҡа биргән. Улар ошо юлды үҙ ирке, аңы менән һайлаған. Дан өсөн, мал өсөн, исем өсөн йәшәмәгән улар, ә тап үҙ милләтенең киләсәге өсөн үҙ ғүмерҙәрен фиҙа иткән. Бына шундай шәхестәребеҙҙе һәм улар башҡарғанды күрһәтергә теләнек беҙ бөгөнгө быуынға. Белһендәр, онотмаһындар, әленән-әле хәтерҙәренә төшөрөп торһондар өсөн.

**➔ Ә бөтөн ошо геройҙарыбыҙҙың яҙмышы трагик тамамланыуы, йәғни уларҙың атылыуы, аҫылыуы, язалап үлтерелеүе ниндәйҙер агрессияға йәки өмөтһөҙлөккә алып килмәйме?**

- Юҡ, сөнки был фильмдар беҙҙең тарихты белгән, аңлаған тамашасы өсөн. Йә булмаһа, ошо фильмдарҙы ҡарағандан һуң халҡыбыҙ тарихын белергә теләк уянһын өсөн. Фильм геройҙарының барыһы ла ил алдында аҡланған һәм иң мөһиме беҙ улар нигеҙ һалғандың өҫтөндә ил төҙөйбөҙ, тимәк, был хаҡлыҡ юлы.

Беренсе республика төҙөүселәрҙең барыһы ла тигәндәй бер нисә тәүлек эсендә ҡулға алынып, атып бөтөрөлгән, был тарихи хәҡиҡәттән дә ҡасып булмай. Әммә беҙ был асылдан ниндәйҙер сәйәсәт тә, агрессияға йәки өмөтһөҙлөккә этәргес, ҡаралыҡ та эҙләмәйбеҙ. Беҙ бөгөнгө барлығыбыҙға ниндәй хаҡтар түләнгәнде генә күрһәтәбеҙ. Тимәк, ошо факттарҙы белгән быуын, йәшәйештең ҡәҙерен белеп, һаҡлап һәм тағы ла юғарыраҡ үҫештәр даулап көн итергә тейеш. Туған телде, мәҙәниәтте, сәнғәтте, фәнде, әҙәбиәтте һаҡлау өсөн генә кемдәрҙер ғүмерҙәрен йәлләмәгән, ә беҙ шуны күрһәтергә лә ҡурҡып ултырайыҡмы? Был дөрөҫ булмаясаҡ.

**➔ Милләттең милләт булараҡ күрһәткесе барыбер ҙә уның рухи ҡиммәттәренә ҡайтып ҡала, шулай бит?**

- Быны беҙгә тарих быуаттар аша ҡайта-ҡайта иҫбатлай, әммә күптәр шуны аңламай аптырата. Әллә ҡасан ер йөҙөнән юғалған халыҡтар һәм цивилизациялар хаҡында ла беҙгә уларҙан ҡалған рухи ҡиммәттәр генә һөйләй. Беҙ уларҙан ҡалған әҙәбиәтте, сәнғәтте, тарихты, фәнде һәм башҡаларҙы өйрәнәбеҙ. Уларҙың сәйәсәте, иҡтисады, закондары йәки башҡа матди төшөнсәләре ҡалмаған, улар һаҡланмай торған ҡиммәттәр. Һәм беҙҙә лә шулай. Киләсәк быуындарыбыҙ ниндәйҙер сода заводын, акцияларҙы, кемдәрҙер менән килешеүҙәрҙе мираҫҡа алып ҡалмаясаҡ. Замандар үҙгәргән һайын ул заводтарҙың һәм килешеүҙәрҙең яңынан-яңылары төҙөләсәк. Ә рухи ҡиммәттәр, мәҙәни ҡиммәттәр һаҡланасаҡ һәм йөҙ, мең йылдан һуң да да милләттең күрһәткесе буласаҡ.

Һәр бер шәхестә ижадһыҙ үҫеш булмаған кеүек, илдә лә ижади кешеләрһеҙ алға китеш булмаясаҡ. Ижади кешеләр улар донъяны барлыҡҡа килтерә: яҙа, уйлап таба, яңылыҡ аса, идеялар тыуҙыра. Бөгөн төрлө программалар, телефондар, интернет селтәрҙәре, бестселлерҙар, фильмдар, фәнни асыштар уйлап табыусылар ҙа шулар. Кешелек ана шул ижади йәндәрҙең илһамына күҙ терәп тора, әммә һаманға тиклем ижадилыҡты баһалай белмәй. Ижад халыҡтың рухи кимәлен, эмоцияларын күтәрә ала торған көс. Һәм бары рухи күтәренкелеге булғандар ғына әллә ниндәй батырлыҡтарға, байлыҡ туплауға, ерҙәр үҙләштереүгә һәм хатта һуғышҡа күтәрелә ала икәнде онотмайыҡ.

**➔ Тағы ла бер фильм әҙерләгәнегеҙҙе беләбеҙ. Шул хаҡта ла һөйләп китһәгеҙ ине.**

- "Бабич" һәм "Беренсе Республика"ны дауам итеүсе фильм үҙенән-үҙе үк аңға һалынды, ул - Рәми Ғарипов. Башҡорт халҡында милли аң һәм рух тергеҙеүсе шәхес. Ул шағир ғына түгел, ә милләттең үткәнен, үҙ заманын һәм киләсәкте бәйләп тороусы бер ыҙан да. Ул үткәндәр йәки үҙ тормошо хаҡында ғына зарланып, һағышланып яҙыуҙы үҙәккә ҡуймаған, ул хатта үҙ заманы өсөн дә түгел, киләсәк быуындарға төбәп яҙған. Замандаштары тарафынан ҡабул ителмәй йәшәгәндә лә бөгөн беҙ һәм беҙҙең балалар нигеҙләнер әҙәби байлыҡ ҡалдыра алған. Һәм әле беҙгә тап шундай Рәмиҙәр етмәй. Мәктәптәргә, гәзит-журналдарға, заводтарға, хакимиәткә, ил етәкселегенә етмәй Рәмиҙәр...

Бындай фильмдар халыҡты үҙгәртергә, уны таҙараҡ, изгерәк, юғарыраҡ булыуға ынтылдырырға тейеш. Бөгөн иң беренсе сиратта беҙгә үҙебеҙгә үҙгәрергә кәрәк һәм шунан һуң ғына беҙҙең тәбиғәткә, донъяға, бер-беребеҙгә ҡарашыбыҙ асыласаҡ.

Рәми Ғарипов үҙенең ниндәй ҡыҫҡа ғына ижад юлында тотош бер быуын ҡәләмдәштәрен тәрбиәләп ҡалдырған. Унда шундай илаһилыҡ, изгеләргә генә хас юғары фәлсәфәүи аң, кешеләргә үҫләшмәй ижад итә белеү төшөнсәләре булған. Ул донъялыҡтың бысраҡтары менән буталмаған. Хатта ябай ғына көндәлектәрендә лә, юҡлыҡ, сикләнгәнлек араһында ла бөйөклөк ярылып ята. Асылда, был кешенең, ысын Кешенең булмышы. Һәм киләһе фильм тап шул ысын Кеше хаҡында буласаҡ та.

**➔ Республикабыҙҙа кино сәнғәте нисек үҫешә? Уның киләсәге бармы?**

-Үкенескә ҡаршы, беҙҙә кино сәнғәте һаманға тиклем етди ҡараш көтә. Етәкселек менән был өлкә араһында килешеү булдырылмаған. Ни өсөн дәүләткә кинематография кәрәк? Сөнки был өлкә мәғариф, мәҙәниәт, сәнәғәт кеүек үк, илдең йәшәйешендә ҙур роль уйнай торған звено. Ул мәктәп һымаҡ уҡ тәрбиә эшен алып бара, институт кеүек үк белем бирә, мәҙәниәт һымаҡ уҡ биҙәй, арбай. Юлдарҙы төҙөү, дауаханалар булдырыу, космосты өйрәнеү кәрәк булғандай, кинематография ла йәмғиәттең алға китешенә йоғонто яһаусы өлкә. Беҙ әле "Беренсе Республика"ны ла Башҡортостан буйлап йөрөтөп күрһәтәбеҙ, халыҡҡа еткерергә тырышабыҙ. Иң мөһиме, ошондай фильмдарҙың халҡыбыҙға кәрәк икәнен тоябыҙ.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА
яҙып алды.**













✓ *Күптәр сүп-сарҙы айырым йыйыуҙы ауыр эштәй күрә. Ғәмәлдә, ҡоро сүпте зәңгәр контейнерҙарға ташларға ғына кәрәк. Әлегә программа барлыҡ төбәктәрҙә лә тулы ҡеүәтенә эшләмәй, әммә уның географияһы киңәйәсәк.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# ЙӘШЕЛ СӘЙ...
## күҙҙәргә лә файҙа

■ Күптән түгел ғалимдар йәшел сәйҙең тағы ла бер үҙенсәлеген асыҡлаған. Ҡытайҙың Гонконг университеты офтальмологтары иҫбатлауынса, йәшел сәй составында булған матдәләр глаукома һәм башҡа киң билдәле күҙ ауырыуҙарын булдырмаҫҡа ярҙам итә. Эсемлектә булған катехиндар тәьҫире 20 сәғәткә тиклем һуҙыла икән.

■ Артыҡ ауырлыҡ йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы һәм диабет сирҙәренә килтерә. Күптән түгел Австралия ғалимдары артыҡ ауырлыҡтың кешенең иммун системаһына ла кире йоғонто яһауын асыҡлаған.

■ CyberSecurity материалдарына ҡарағанда, иммун системаһы төрлө күҙәнәктәрҙән тора. Кеше сәләмәт булһын өсөн, был күҙәнәктәр бер үк нисбәттә булырға тейеш. Быға төрлө факторҙар, шул иҫәптән, туҡланыу рәүеше лә йоғонто яһай. Артыҡ май ҡатламы бүлеп сығарыуға мәжбүр иткән күҙәнәктәр кире йоғонтоға эйә һәм ул ҡан менән бөтә организмға таралып, уны ауырыта башлай.

■ Сәстәрҙең иртә салланыуында эш урынындағы стрестар һәм башҡа сәбәптәр генә түгел, ә төрлө диеталар һәм итле аҙыҡты аҙ ашау ғәйепле. Сәстең иртә салланыуының иң киң таралған сәбәбе - тирозин аҡһымының етешмәүе. Ул башлыса ит һәм майҙа осрай, шуға ла диетала ултырыусылар һәм ит ашамаусылар быға йышыраҡ дусар була. Тулы булмаған рационда тирозин һәм баҡыр етешмәй, ә тап улар буяусы пигменттар барлыҡҡа килеүенә яуап бирә.

■ Бөгөн тәм-том, башҡа татлы аҙыҡтар етештергәндә мотлаҡ рәүештә буяуҙар һәм консерванттар ҡулланыла. Диетологтар әйтеүенсә, бөтөн буяуҙар ҙа организм өсөн зарарлы түгел, куркума, бета-каротин кеүек тәбиғи буяуҙар файҙалы ла. Шулай ҙа хәҙерге ваҡытта аҙыҡ-түлек сәнәғәтендә осһоҙло, E102 тип аталған буяу киң ҡулланыла. Ул аллергия тыуҙырып, тиренең ялҡынһыныуына килтереп кенә ҡалмай, күреү һәләтен дә түбәнәйтеүе ихтимал. Бынан тыш, кеше үҙен насар тоя башлай, кәйефе булмай. Тәм-том составында тартразин тигән матдә булғанда ла уны һатып алыуҙан баш тартырға кәңәш итә белгестәр. Был матдә витаминдарҙың үҙләштерелеүенә тотҡарлыҡ яһай.

■ Яңыраҡ үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, машинаны хәүефле йөрөтөүселәр башҡаларға ҡарағанда депрессия менән йышыраҡ яфалана. Быға тиклем психик стресс, хәүеф тойғоһо, депрессия һәм алкоголизмдың бер-береһе менән бәйле булыуы дәлилләнгән инде. Хәҙер ғалимдар кеше кисергән стрестың һәм уның машина йөрөткәндә даими рәүештә үҙенең ғүмерен хәүеф аҫтына ҡуйыуы араһында бәйләнеш эҙләй. Тест һөҙөмтәләре күрһәтеүенсә, хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен инҡар итеүселәр араһында стресс кимәле ысынлап та юғарыраҡ була. Был һөҙөмтә бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ водителдәрҙә күберәк күҙәтелә. Тимәк, машина руле лә кешенең психикаһына ҙур зыян килтерә ала, ти тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе доктор Скотт-Паркер.

■ Олатайығыҙ йәки өләсәйегеҙ 97 һәм унан да олораҡ йәштәме? Тимәк, һеҙ ҙә оҙаҡ йәшәйәсәкһегеҙ. Америка гериатрия йәмғиәте табиптары белдереүенсә, оҙаҡ йәшәүселәрҙең балаларында, ейән-ейәнсәрҙәрендә йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре - 78, инсульттар - 83, шәкәр диабеты 86 процентҡа һирәгерәк осрай.

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

**Күптәребеҙ бала саҡтан ололарҙың ризыҡты ташларға ярамай, тигән тыйыуын ишетеп үҫкәндер, моғайын. Ҡағиҙә булараҡ, быны аслыҡ афәтен күргән олатай-өләсәйҙәр йыш ҡабатлай ине. Ырым-инаныуҙар буйынса ла быны тыйыусылар булғандыр. Әммә беҙҙең көндәрҙә ни өсөн ризыҡты ысынлап та сүплеккә түгергә ярамай икәненә аныҡ фәнни нигеҙ бар.**

# РИЗЫҠТЫ ТӘЛӘФЛӘРГӘ ЯРАМАЙ!

### Ни өсөн аҙыҡты ташларға ярамай?

Иң элек ырымдарҙы тикшерәйек. Улар, тарихи мираҫ булараҡ, айырым нигеҙгә эйә. Борондан икмәк аҙыҡ символы булып тора. Быны бик күп мәҡәлдәр ҙә раҫлай. Ул элек-электән крәҫтиәндең төп ризығы булып һанала һәм уның өсөн сеймалды ҡышҡылыҡҡа әҙерләп, һаҡлап та була. Өҫтәүенә, ул бик туҡлыҡлы ла. Тап шуның өсөн икмәк юғары баһалана, хатта уға табыналар ҙа. Крәҫтиәндең тире менән һуғарылған икмәкте ташлау ҙур гонаһ һаналған, шуға ҡулы күтәрелгән кешене хәйерселек, аслыҡ көтә, тип һаналған. Оҙон ҡыш буйына тамаҡты туҡ тотҡан башҡа ризыҡты табыуы бик ауыр. Ә инде ҡойма ямғырҙар йәки ҡоролоҡ уңыш йыйып алыу мөмкинлеген бирмәһә, аслыҡ булырын көт тә тор.

Һуңыраҡ, ризыҡ һәм уларҙы һаҡлау мәсьәләһе хәл ителгәс, бик күп һуғыштар, эпидемиялар булған, улар ҙа аҙыҡ-түлекте һаҡлап торорға мәжбүр иткән. Блокадалы Ленинградты ла онотторға ярамай. Ул тамуҡты үтеүселәр аҙыҡ-түлеккә айырыуса ихтирамлы һәм һаҡсыл мөнәсәбәттә. Барлыҡ был сәбәптәр бигерәк тә өлкән быуында ризыҡтарҙы һаҡлау ғәҙәтен булдыра ла инде. Ғәмәлдә иһә, быны бер насарлығы ла юҡ. Ләкин ризыҡты былай ғына, донъяла миллиардлаған кеше астан үлеүен уйлап та ҡарамай ташлағанда, барыбер ҡылыҡтарыңа ҡайтанан баһа бирергә бер сәбәп бар.

### Сүплектә ризыҡтар нимә эшләй?

Тәү сиратта, ризыҡтарҙың органика икәнен онотторға ярамай. Башҡа ҡалдыҡтарҙан айырмалы, ул ерҙә сереү һәләтенә эйә. Был ниндәйҙер кимәлдә баҡсасылар, үҙ йорттарында йәшәүселәр файҙаланған компост соҡорҙарын хәтерләтә. Тик бында үҙ баҡсаңда күмеү һәм сүп-сар өйөмөнә ҡушыу араһында ҙур айырма бар. Әгәр компост соҡорҙары йәки өйөмө хаҡында һүҙ йөрөтһәк, унда сереү аэроб бактериялар ҡатнашлығында бара. Улар органик ҡалдыҡтарҙы компостҡа әйләндерергә ярҙам итә. Быны өсөн кислород кәрәк. Сүп-сар йыйыу урындарында ҡалдыҡтарҙы бульдозерҙар ярҙамында тығыҙлайҙар һәм грунт ҡатламы менән ҡаплайҙар. Был иһә аҙыҡ ҡалдыҡтарының кислородҡа юлын яба. Һөҙөмтәлә сереү процесы кислород талап ителмәгән анаэроб бактериялар ҡатнашлығында бара.

Бөтөн проблема шунда ла инде. Эшмәкәрлек барышында улар углерод двуокисе, метан һәм көкөрт водороды бүлеп сығара. Сүплектәр шулай уҡ экология күҙлегенән генә түгел, тиҙ яныусан булыуҙары менән дә хәүеф тыуҙыра. Ҡайһы бер осраҡтарҙа был ҡатнашманы сүплек газы тип атайҙар. Атап үтелгәндәрҙән тыш, уларға шулай уҡ метан (50-75 процент), углекислый газ (25-50 процент), азот (0-10 процент), көкөрт водороды (0-3 процент), кислород (0-2 процент), водород (0-1 процент) инә. Газдар күләме төрлө сәбәптәр менән үҙгәреп тора, әммә уртаса күрһәткес шундай.

Метандың шундай ҙур күләмен производствола энергия сығанағы итеп ҡулланып булмаймы ни, тип һорарһығыҙ һәм хаҡлы булырһығыҙ. Донъяла, ысынлап та, сүплек газын йыйыу һәм эшкәртеү программаһы эшләй. Әммә йыйыу системаһы ярайһы ғына ҡатмарлы һәм хатта экологияға бик талапсан илдәрҙә лә сүплектәр ундай ҡорамалдар менән йыһазландырылмаған.

Уның ҡарауы, АҠШ-та, мәҫәлән, сүплек газын йыйыу иҫәбенә йылына 14 миллион автомобиль бүлеп сығарған газға тиң булған парник газы бүленеүе туҡтатыла. Бындай күләмдәге газ йыйыу өсөн 20 миллион акр урман ултыртырға кәрәк булыр ине. Шунса күләмдәге газды утилләштереү АҠШ-ҡа 169 миллион баррель нефтте экономиялау мөмкинлеге бирә.

Беҙҙең илдә сүплек газын йыйыу киң танылыу тапмаған. Күп осраҡта был полигондарҙың уҙған быуаттың 80-90-сы йылдарында төҙөлөүенә һәм ул ваҡытта экология тураһында артыҡ уйланмауҙарына бәйле.

Һауала сүплек газы булыуын һәр кем тоя ала. Мәҫәлән, уның еҫе тәбиғи газ еҫенә оҡшаш. Ҙур сүп-сар өйөмө эсендә газ ҡыуыҡтары барлыҡҡа килә һәм улар көслө баҫым аҫтында була. Ҡайһы берҙә улар үҙҙәре сыға, ҡайһы бер осраҡта, шартлау булмаһын өсөн, махсус рәүештә сығаралар. Ҡайһы берҙә янғындар ҙа башлана. Был осраҡта газ еҫенә сүп-сар янған еҫ тә өҫтәлә. Был осраҡта еҫ полигондан тиҫтәләрсә километр алыҫлыҡта ла тойола.

Шул ваҡытта сүплектәрҙең тәбиғәтте ни тиклем бысратыуын күҙалларға һәм ни өсөн сүп-сарҙы эшкәртеү һәм уны дөрөҫ һаҡлау саралары күреү мөһим икәнен аңлайһың. Европала, мәҫәлән, хатта ҡайһы бер ҡунаҡханаларҙа сүп-сарҙы айырым йыйыу контейнерҙары бар. Рәсәйҙә лә һуңғы ваҡытта экология мәсьәләләренә етди иғтибар бирелә.

Күптәр сүп-сарҙы айырым йыйыуҙы ауыр эштәй күрә. Ғәмәлдә, ҡоро сүпте зәңгәр контейнерҙарға ташларға ғына кәрәк. Әлегә программа барлыҡ төбәктәрҙә лә тулы ҡеүәтенә эшләмәй, әммә ул үҙенең һөҙөмтәлелеген күрһәтһә, зәңгәр контейнерҙарҙың географияһы киңәйәсәк.

Ҙур ҡалаларҙа сүп-сарҙы айырым йыйыуҙың алдынғы системалары ла, пункттары ла бар. Улар нимәне ҡайһыһына ташларға икәнлеге күрһәтелгән бер нисә контейнер торған ҙур бокс. Бындай контейнерҙар, ғәҙәттә, ихаталарҙа ла йышыраҡ күренә башланы. Иҫәпләүҙәр буйынса, улар йылына 1 миллион тонна сүп-сарҙың өйөмдәргә эләгеүенә юл ҡуймай. Сүп-сарҙы айырым йыя башлау артыҡ ауырлыҡ тыуҙырмай, әммә ергә йәки йылғаға ташланған пластик шешә унда йөҙәр йылдар серемәй ятасаҡ йәки йөҙөп йөрөйәсәк. Әлбиттә, бер шешә бер нәмә лә хәл итмәй, ләкин, мин генә ташлағандан бер нәмә лә булмаҫ, тип уйларға ярамай.

*ҠАТЫН-ҠЫҘ ҠОЛАҒЫНА*

# ТҮШЕҢ ШЕШТЕМЕ?
## Бесәй үләне, һары мәтрүш ярҙам итер

**Мастопатия (түш шешеүе) диагнозын ишетеү менән күп ҡатын-ҡыҙҙар ҡурҡып ҡала, сөнки врачтар йыл һайын тикшерелеп торорға кәңәш итеүҙән башҡа бер ниндәй дауалау ысулын тәҡдим итмәй. Шул уҡ ваҡытта халыҡ медицинаһында был сирҙе иҫкәртеү саралары бик күп.**



Мәғлүм булыуынса, мастопатия гормондар тайпылышы сәбәпле барлыҡҡа килә. Ул хәүефле түгел, шулай ҙа ҡайһы бер табиптар уны яман шешкә сәбәпсе тип иҫәпләй. Әммә Америка врачтарының яңы тикшеренеүҙәре был фекерҙе инҡар итте. Тик был түштәге шеште онотторға кәрәк тигәнде аңлатмай. Шуның өсөн йыл һайын ҡатын-ҡыҙҙар консультацияһында, хирургта, онкологта, шулай уҡ рентген һәм ультратауыш тикшеренеүе үтергә кәңәш ителә. Шуны иҫегеҙҙә тотоғоҙ: мастопатия ваҡытында йылы физиотерапия процедуралары, эҫе мунса, массаж, кварц лампаһы менән дауаланыу, ҡояшта ҡыҙыныу ярамай!

***Донъяла төрлө кешеләр бар: бер мәл генә дәртләнеп китеп эшләп алыусылар һәм көн һайын тырышып-тырмашып, ныҡышмалы эшләүселәр. Икенсе төрлө әйткәндә, "күбәләктәр" һәм "һабансылар" бар.***





май. Әгәр Өфөлә йәшәгән һәр кем берәр шешә ташлаһа, ул 1,4 миллиондан ашыу буласаҡ. Хәҙер сүп биҙрәгеҙгә күҙ һалығыҙ ҙа, ҙур ҡалаларҙа миллионлаған, донъя буйынса миллиардлаған кеше шундай уҡ күләмдә сүп-сар түгә икәнен күҙ алдына килтерегеҙ. Әгәр ошо күләмдең яртыһын ғына эшкәрткәндә лә, донъябыҙ бер ни тиклем таҙараҡ буласаҡ. Был хатта батарейка, лампочка кеүек тәү ҡарашҡа ваҡ-төйәк күренгән нәмәләргә лә ҡағыла.

Күптәр Скандинавия илдәрендә экологияның культ кимәленә күтәрелгәненә һоҡлана һәм, ни өсөн беҙҙә улай түгел, тип һуҡрана. Был, моғайын, ҡанға һалынғандыр. Беҙҙә лә шулай эшләргә тырышып ҡарайҙар, әммә халыҡ яғынан тейешле хуплау юҡ. Әгәр булһа, актив саралар күрелер ине.

## Сүп-сар түгеү урындарын нисек эшләйҙәр?

Әгәр шундай һорау бирһәк, күптәр, тау итеп өйөп ҡуялар, тип яуаплар, моғайын. Ниндәйҙер кимәлдә улар хаҡлы ла, әммә уның да күҙгә күренмәгән үҙенсәлектәре бар. Сүп-сар түгеүҙән алда махсус инфраструктура төҙөлә. Мәҫәлән, бер нисә административ ҡоролма һәм үткәреү пункты эшләнә, юл һалына. Полигонға машиналар көнө-төнө туҡтауһыҙ килеп тора. Параллель рәүештә ҙур соҡор ҡаҙыла, күләме 10-20 йыл ҡулланыуға етерлек итеп иҫәпләнә. Уның төбө һәм стенаһы бер метр балсыҡ йәки бер нисә ҡат полиэтилен пленка менән ҡаплана. Был тупраҡҡа бысраҡ һыу эләкмәһен өсөн эшләнә. Күпселек осраҡта, төҙөлөш алдынан геологик хәлторошто өйрәнеп, тикшереү үткәрелә, йәғни сүп-сар йыйыу урынының ер аҫты һыуҙарына һәм яҡынтирәләге флора, фаунаға йоғонтоһо тикшерелә.

Котлован тулыһынса түгел, ә ячейкалар буйынса тултырыла. Бер үк ваҡытта сүплек газын сығарыу өсөн торбалар һәм башҡа системалар һалына. Әгәр газды ҡайтанан эшкәртеү кәрәк булһа, өҫтәмә инфраструктура, мәҫәлән, ҡаҙанлыҡ һәм башҡа объекттар төҙөлә. Котлован тулғас, ул, изоляция өсөн, ҡалын балсыҡ менән ҡаплана. Өҫтөнә үлән ултыртыла һәм эш тамам кеүек күренә. Әммә сүплектең дөрөҫ эшләүен, газдың бүленеүен күҙәтеп торорға кәрәк. Әйткәндәй, тәүге 2-3 айҙа, нигеҙҙә, углекислый газ бүленеп сыға. Артабан яйлап метан һәм башҡа газдар бүленә башлай. Улар 40-70 йыл бүленә, әммә 20 йылдан һуң кәмеүгә табан бара. Әлбиттә, был эштәр барыһы ла рәсми урындарҙа башҡарыла, әммә рәсми булмаған сүплектәр ҙә бар бит әле...

## Ҡалдыҡтар менән перспективалы көрәш ысулдары

Бөгөнгө ысулдар барыһы ла күҙалланған ысулдарға инә. Йәғни ҡайтанан эшкәртеп булған материалдар эшләүгә ҡайтып ҡала. Шулай уҡ сүп-сарҙы айырым йыйыу буйынса ла етди агитация бара. Был да уны ҡайтанан эшкәртеүҙе еңелләштерәсәк. Әммә ҡайһы бер эксперттар тәҡдим иткән фантастик ысулдар ҙа бар. Мәҫәлән, уны Йыһанға сығарырға һәм Ҡояш яғына ебәрергә. Бер заман был теория бик популяр булды һәм күптәр тап шулай эшләргә кәрәк, тине. Хәҙер иһә был уй яйлап онотола башланы.

Әлбиттә, был яҡынса һандар, әммә Интернетҡа ышанһаҡ, бер килограмм сүпте орбитаға сығарыу хаҡы 2000 долларҙан башлана. Йәғни, бер биҙрә сүп 8000-10000 доллар тора. Йыһан караптарының экологияға килтергән зыянынан сығып баһалағанда, был мәсьәләне ябырға ла мөмкин.

Күреүегеҙсә, ташланған ризыҡ, тәү ҡарашҡа ғына зыянһыҙ кеүек күренә. Бер яҡтан, ул тарҡала, әммә мегаполис шарттарында ҙур проблемаға әйләнә. Әлбиттә, банан ҡабығын, һөйәктәрҙе ташламай булмай. Әммә һатып алынып та, ҡулланылмай ташланған ризыҡтарҙы алғанда, уйлабыраҡ эш итергә кәрәктер, моғайын. Был осраҡта тирә-яҡ мөхит ресурсын ғына түгел, аҡсағыҙҙы ла янда ҡалдыраһығыҙ.

Әгәр гинеколог түштәге төйөрҙәр хәүефһеҙ тип иҫәпләһә, иртән ашар алдынан В6 витаминын (100 г), йоҡлар алдынан цинк (30 г), ашар алдынан энотера майын (1 г), көнөнә ике тапҡыр Е витаминын (400 г) эсегеҙ. Уларҙы төйөр тулыһынса бөткәнсе ҡабул итергә мөмкин.

## Халыҡ дауаһы ысулдары

**Әстерхан сәтләүегенең** эсендәге бүлкәләр (перегородки) бик файҙалы. Уны әҙерләү өсөн 2025 сәтләүектең эсендәге бүлкәтен алып, 70 процентлы 100 грамм спиртҡа һалып, 10 көн төнәтегеҙ. Уны ашар алдынан өс тапҡыр 15-20-шәр тамсы стакандың өстән бер өлөшө самаһындағы һыуға ҡушып эсегеҙ. Дауаланыу курсы 2 ай. Был төнәтмә башҡа ағзаларҙағы шештәрҙе лә иҫкәртә. Ауыртҡан осраҡта күгүлән йәки бәпкә үләненән (горец птичий) сылатҡыс ҡуйығыҙ.

## Дарыу үләндәре йыйылмалары

**1-әр өлөш** меңъяпраҡ, артыш емеше, ҡырҡбыуын, 2 өлөш кукуруз емешлеген барыһын бергә ваҡлап турағыҙ. Ҡулланыр алдынан 1 ҡалаҡ үләнде ҡайнар һыу менән бешерегеҙ. Ярты сәғәттән һөҙөп, көнөнә өс тапҡыр ашағандан һуң 50-70 грамм эсегеҙ.

**1-әр өлөш** өс төҫлө миләүшә сәскәһен, бесәй үләнен, ҡырҡбыуын, 2-шәр өлөш эт дегәнәге һәм кесерткән ҡушылған төнәтмә әҙерләгеҙ. 1 ҡалаҡ үләнгә 1 стакан һыу һалып, һүрән утта ҡайнатып сығарығыҙ. Һөҙөп, һыуытып, иртәле-кисле стакандың өстән бер өлөшөнә ҡойоп эсегеҙ.

**1 өлөш** бесәй үләне, 2-шәр өлөш юл япрағы, һары мәтрүшкә, 4 өлөш эт дегәнәге ҡушылған үләндән 1-әр ҡалаҡ алып, 1 стакан ҡайнар һыуҙа бешерегеҙ. 40 минут төнәткәс, көнөнә 3-4 тапҡыр ашағандан һуң 2-шәр ҡалаҡлап ҡабул итегеҙ.

**Ҡылысъяпраҡтың** (сабельник) үләнен йәки тамырын, ҡайын япрағы, сөйәл үләне, бәйғәмбәр тырнағы сәскәһе, меңъяпраҡ, боланут, һары мәтрүшкә, бәпкә үләне, бәпембә тамыры, юл япрағы, үгәй инә үләне, ҡарағат япрағы, мәтрүшкә һәм ҡыҙыл миләш емешен барыһын бергә ҡушып, кофе турағыста үткәрегеҙ. Әгәр ҙә улар йәш булһа, ит турағыс аша үткәрегеҙ. 1 ҡалаҡ ҡатнашманы термосҡа һалып, өҫтөнә 1 литр ҡайнар һыу ҡойоғоҙ ҙа төнгөләккә ҡалдырығыҙ. Иртән һөҙөп, көн дауамында эсегеҙ. Дауаланыу курсы - 2-3 ай.

**10-14 көндән** һуң ошо ҡатнашманы эшләгеҙ: ҡурай еләге япрағы, бәпембә тамыры, ҡыҙыл миләш емеше, һары мәтрүшкә япрағы, бәпкә үләне (лапчатка гусиная), ҡайын япрағы, дегәнәк тамыры, юл япрағы, аҡ сәскә, бәйғәмбәр тырнағы сәскәһе һабағы, меңъяпраҡ, ҡандала үләне, әлморон емеше. Дарыу үрҙәге ысул кеүек әҙерләнә.

Артабан бер тигеҙ өлөштә бәпембә тамыры, мәтрүшкә, дегәнәк тамыры, энәлек емеше, ҡандала үләне, әнис орлоғо, ҡыҙыл миләш емеше, йәшән (боровая матка) үләне ҡушылған ҡатнашманы төнәтеп эсегеҙ.

Был үлән йыйылмалары менән дауаланыу ваҡыты яҡынса бер йыл тирәһе. Төйөрҙәр 2-3 айҙан бөтөүе лә ихтимал. Ҡайһы берҙә 15 айға һуҙылыуы ла бар.

**Н. АЛЕКСЕЕВА,**
**врач-натуропат, биология фәндәре кандидаты.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

## 38-се идея
## Кисәге ҡаҙаныштар менән йәшәмә

Һин ҡасан да булһа, тормошта һине етерлек баһаламайҙар, тип уйланғаның бармы? Бәлки, ҡайһы берҙә артҡа әйләнеп ҡарайһыңдыр ҙа: "Эштәр бөтөнләй башҡаса барырға тейеш ине бит - мин бит шуларҙы, шуларҙы башҡарҙым", - тип әйтәһеңдер. Һин кисәге ҡаҙаныштарың менән йәшәргә маташҡан кешегә оҡшағанһыңмы? Әгәр шулай икән, тимәк, һин тупаҫ фекер йөрөтәһең. Бер кем дә кисә бешерелгән һыуыҡ картуфты ашамай, һәм бер кем дә кисәге ҡаҙаныштары менән йәшәй алмай. Моғайын, һин берәй етди эш эшләп, был турала ҡалын китап, һуңынан йоҡағыраҡ, аҙаҡ килеп, памфлет яҙған һәм һөҙөмтәлә ҡалған ғүмерен ҡасандыр ошо үҙе башҡарған эште онотмаҫҡа мәжбүр итергә маташып үткәргән кешеләрҙе күргәнең, ишеткәнең барҙыр. Кисәге еңеүҙәр менән йәшәргә тырышып, беҙ бөгөн үләбеҙ. Ошо турала уйлан әле!

Бер нисә юғары чиндағы хәрби начальник бер көндө Наполеонға килеп, йәш капитанды махсус тәғәйенләнешкә тәҡдим итә. Наполеон: "Ни өсөн һеҙ тап уны тәҡдим итәһегеҙ?" - тип һорай. Бер нисә көн элек ул ҡыйыулығы һәм хәрби оҫталығы арҡаһында мөһим еңеү яулағайны, тип яуап бирәләр уға. Наполеон саҡ ҡына уйланып тора ла: "Быныһы яҡшы, әлбиттә, ләкин икенсе юлы ул ни эшләр?" - ти. Уға ни тип яуап биргәндәрҙер, бер кем дә белмәй, ләкин был йәш кеше хаҡында башҡа бер ерҙә лә телгә алынмай. Донъяла төрлө кешеләр бар: бер мәл генә дәртләнеп китеп эшләп алыусылар һәм көн һайын тырышып-тырмашып, бөтә дәртен һалып, ныҡышмалы эшләүселәр. Икенсе төрлө әйткәндә, "күбәләктәр" һәм "һабансылар" бар. Бер мәлгә генә гөлт итеп ҡабынып алыу ҡалған көндәреңдә рәхәт тормош тәьмин итәсәк, тигән идея менән йәшәһәң, тормошоң пыран-заран киләсәк. Бөгөнгө наградаларың бөгөнгө хеҙмәттәрең өсөн генә; бөгөнгө мөхәббәтең бөгөн һөйөү өсөн генә кәрәк. Һин: "Кисә мин уны нисек яратҡайным, ни өсөн ул бөгөн мине яратмай?" - тип әйтә алмайһың. Әгәр бөгөн яратылырға теләһәң, бөгөн яратырға тейешһең; иртәгәһе һөйөү юҡ әле, ә кисәгеһе булған да үткән, яуабын да кисә үк алғанһың. БӨГӨНГӨ НАГРАДАҢДЫ БӨГӨНГӨ ТЫРЫШЛЫҒЫҢ ӨСӨН АЛАҺЫҢ. Кисәге еңеүҙәреңә ләззәтләнеүҙән туҡтамаһаң, бөгөн һин мәғәнәле итеп йәшәй алмайһың. Кисәге ҡаҙаныштарыңа шатлан, тик улар менән аңыңды, ғорурлығыңды, үҙ образыңды томалама - был һыуыҡ картуф ашатыу менән бер.

Бөгөн бәләкәй генә булһа ла ҡаҙанышҡа өлгәш һәм шуның менән йәшә. Әгәр ҙур ҡаҙанышҡа өлгәшә алһаң - бигерәк тә яҡшы, ләкин өлгәшә алмаһаң, үҙеңде бәләкәй булһа ла тап бөгөнгө ҡаҙаныштарың менән һуғар.

Бөгөн йәшә, шатлан, ярат, уртаҡлаш һәм ярҙам ит. Бөгөнгө тырышлыҡтарың өсөн награданы ҡабул итеп ал, шул саҡта бөгөнгө рухи аҙыҡ менән йәшәрһең, ә кисәге ҡаҙаныштарыңдың һыуыҡ картуфы менән түгел.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



### 14 СЕНТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
#### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.10, 16.00, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 4.15 Давай поженимся! [16+]
17.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Шифр". Новые серии. [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Т/с "Поединок". [16+]

#### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны следствия-16". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Тайна Марии". [12+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Каменская-3". [16+]
3.40 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Бабушка". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 "Пофутболим". [12+]**
**18.00 "Бай бакса". [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**22.00 Спортивная история. [12+]**
**23.00 "Теге өсәү!" [12+]**
**23.30 Х/ф "Двое и одна". [12+]**
**1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**2.15 Спектакль "Асылъяр". [12+]**
**4.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.00 "Наука 102". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 15 СЕНТЯБРЯ ВТОРНИК
#### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.10, 16.00, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 4.15 Давай поженимся! [16+]
17.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Шифр". Новые серии. [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Т/с "Поединок". [16+]

#### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны следствия-16". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Тайна Марии". [12+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Каменская-3". [16+]
3.40 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Бабушка". [12+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Ради добра. [6+]**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Спортивная история. [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Торпедо" (Нижегородская область). КХЛ.**
**22.00 Детей много не бывает. [6+]**
**23.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30 Х/ф "Смелого пуля боится". [0+]**
**2.15 Спектакль "Оль-ля-ля!" [12+]**
**4.30 "Весело живем!" [12+]**
**4.45 "Автограф". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 16 СЕНТЯБРЯ СРЕДА
#### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.10, 16.00, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 4.20 Давай поженимся! [16+]
17.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Шифр". Новые серии. [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Т/с "Поединок". [16+]

#### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны следствия-16". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Тайна Марии". [12+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Каменская-3". [16+]
3.40 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Бабушка". [12+]**
**11.15 "Автограф". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Учим башкирский язык. [0+]**
**18.00 Автограф. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00, 5.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Ҡустәнәс. [12+]**
**23.30 Х/ф "Рябиновые ночи". [12+]**
**2.15 Спектакль "Камикадзе". [12+]**
**4.15 Вопрос+ответ=Портрет. [6+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 17 СЕНТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ
#### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.10, 16.00, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 4.20 Давай поженимся! [16+]
17.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Шифр". Новые серии. [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Т/с "Поединок". [16+]

#### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны следствия-17". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Тайна Марии". [12+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Каменская-3". [16+]
3.40 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Бабушка". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 23.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай бакса". [12+]**
**15.00, 17.45 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Учим башкирский язык. [0+]**
**18.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.30 Хоккей. "Ак барс" (Казань) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**23.30, 4.15 Х/ф "Год телёнка". [12+]**
**2.15 Спектакль "Лебедушка моя". [12+]**
**4.00 "Весело живем!" [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 18 СЕНТЯБРЯ ПЯТНИЦА
#### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50, 3.00 Модный приговор. [6+]
12.10, 16.00 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 3.50 Давай поженимся! [16+]
17.00, 4.25 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.40 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос 60+". Новый сезон. [12+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
0.20 Д/ф Премьера. "Ронни Вуд: Кто-то там наверху любит меня". [16+]
1.30 Я могу! [12+]

#### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны следствия-17". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Юморина-2020. [16+]
23.40 Х/ф "Вдовец". [12+]
3.10 Х/ф "Ромашка, кактус, маргаритка". [12+]
4.55 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Д/с "Невероятная наука". [12+]**
**11.15, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 Башкорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 3.30 Үткән гүмер. [12+]**
**14.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00, 17.45 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.15 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**19.00 "Башкорт йыры-2020". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**19.45 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.30 "История Ассамблеи народов РБ в песнях и танцах народа". Фильм-концерт. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [16+]**
**23.00 Башкорттар. [12+]**
**23.30 Уфа. Живое. [12+]**
**0.15, 5.15 Х/ф "Уснувший пассажир". [12+]**
**1.30 Спектакль "Весело живем". [12+]**
**4.00 "Бай". [12+]**
**4.30 Бирешмә. Профи. [12+]**

### 19 СЕНТЯБРЯ СУББОТА
#### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "101 вопрос взрослому". [12+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Премьера. "На дачу!" с Наташей Барбье. [6+]
15.10 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
16.40 Музыкальный фестиваль "Белые ночи". "25 лет "Русскому радио". [12+]
18.15 "Горячий лед". Фигурное катание. Кубок России-2020. Женщины. Короткая программа.
19.30, 21.20 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
23.00 "КВН". Премьер-лига. [16+]
0.15 Х/ф "Любовник моей жены". [18+]
1.50 Я могу! [12+]
3.20 Давай поженимся! [16+]
4.05 Мужское / Женское. [16+]

#### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 "Тест". Всероссийский потребительский проект. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
12.30 Доктор Мясников. [12+]
13.40 Х/ф "Мои дорогие". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Танец для двоих". [12+]
1.10 Х/ф "Отцовский инстинкт". [12+]
4.23 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.15 Посмотрим... [6+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 Преград. net. [6+]**
**10.30 "Книга сказок". [0+]**
**10.45 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**11.00 "Апчхи". [0+]**
**11.15 "Байтус". [6+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Ҡустәнәс. [12+]**
**12.30 Үткән гүмер. [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30 Хазина о Хазине. [12+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Концерт в рамках Международного фестиваля балетного искусства им.Р.Нуреева. "Гала-Чайковский". [12+]**
**18.50 Хоккей. "Куньлунь" (Пекин) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Башкорт йыры-2020". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.00 Х/ф "Отель "У погибшего альпиниста". [12+]**
**1.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**2.15 Спектакль "Долгое-долгое детство". [12+]**
**4.30 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**4.45 Әлләсе... [6+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

### 20 СЕНТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
#### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.05, 6.10 Х/ф "Судьба человека". [0+]
6.00, 10.00 Новости.
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 Часовой. [12+]
8.10 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.10, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Премьера. "На дачу!" с Ларисой Гузеевой. [6+]
15.10 Музыкальный фестиваль "Белые ночи". "25 лет "Русскому радио". [12+]
16.20 Х/ф "Джентльмены удачи". [12+]
18.00 "Горячий лед". Фигурное катание. Кубок России-2020. Женщины. Произвольная программа.
19.15 "Три аккорда". Новый сезон. [16+]
21.00 Время.
22.00 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
0.15 Х/ф "Большие надежды". [16+]
2.10 Наедине со всеми. [16+]
2.50 Модный приговор. [6+]
3.40 Давай поженимся! [16+]

#### РОССИЯ 1

4.25, 1.30 Х/ф "Там, где есть счастье для меня". [12+]
6.00, 3.15 Х/ф "Кузнец моего счастья". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Устами младенца.
9.20 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Х/ф "Изморозь". [12+]
13.35 Х/ф "Серебряный отблеск счастья". [12+]
17.50 Удивительные люди. Новый сезон. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]

#### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТеко!" [6+]**
**10.30 "Сулпылар". [0+]**
**10.45 Семь чудес. [6+]**
**11.00 "Гора новостей". [6+]**
**11.15 "Ал да гөл". [6+]**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [6+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 Башкорттар. [6+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Торжественный концерт, посвященный празднованию "Дня работников леса". [12+]**
**18.30 Д/ф "Рыцари леса". [12+]**
**19.15 Лидеры региона. [12+]**
**19.45 Әлләсе... [6+]**
**20.30, 4.30 Теге өсәү. [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**23.45 Х/ф "Проект "Альфа". [12+]**
**1.15 Спектакль "Путем взаимной переписки". [12+]**
**3.30 Концерт в рамках Международного фестиваля балетного искусства им.Р.Нуреева. "Гала-Чайковский". [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**

✓ *Ҡурҡаҡлыҡ шул тиклем зарарлы, сөнки ул файҙалы эштәргә йүнәлтелә торған ихтыярҙы тотҡарлай.*

*(Рене Декарт).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ТЕЛЕН ЮҒАЛТҠАН ХАЛЫҠ - ТАБАЛА ЯТҠАН БАЛЫҠ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**36-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Алдар. Аралбай. Алмас. Баҡса. Өйрәк. Ҡырмыш. Боролош. Әхүәл. Алдыр. Бутҡа. Шаһ. Тирәк. Ылау. Ишәк. Йопар. Ваҡыф. Ыуыҙ. Мал. Суҡ. Алҡым. Сарапул. Ҡәбилә.

**Вертикаль буйынса:** Бикбаев. Барымта. Логорифм. Ағас. Аласыҡ. Аҡшам. Аласа. Шәк. Сиражи. Маҡтымһылыу. Уҡлау. Рәйес. Ля. Өшә. Туйҙа. Хажи. Әшнә. Күл. Кәрим.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Сентябрь (Мөхәррәм - Сәфәр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 14 (26) дүшәмбе | 5:19 | 6:49 | 13:30 | 18:03 | 19:33 | 21:03 |
| 15 (27) шишәмбе | 5:21 | 6:51 | 13:30 | 18:00 | 19:30 | 21:00 |
| 16 (28) шаршамбы | 5:22 | 6:52 | 13:30 | 17:58 | 19:28 | 20:58 |
| 17 (29) кесе йома | 5:24 | 6:54 | 13:30 | 17:55 | 19:25 | 20:55 |
| 18 (1) йома | 5:26 | 6:56 | 13:30 | 17:52 | 19:22 | 20:52 |
| 19 (2) шәмбе | 5:28 | 6:58 | 13:30 | 17:50 | 19:20 | 20:50 |
| 20 (3) йәкшәмбе | 5:30 | 7:00 | 13:30 | 17:47 | 19:17 | 20:47 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# ДУҪЛЫҠ МОНУМЕНТЫ...

Өфөлә 55 йыл элек Дуҫлыҡ монументы төҙөлгән, тип белдерҙеләр Башҡортостандың Мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы идаралығында. Уға 1957 йылда Башҡортостандың Рәсәйгә ҡушылыуына 400 йыл тулыу уңайынан нигеҙ һалынған. Ике халыҡтың дуҫлығын символлаштырған һәйкәл ҡалаға ингән ерҙә, 16-сы быуат уртаһында ағастан эшләнгән беренсе Өфө кремле урынында ҡуйылған. "Дуҫлыҡ монументында - ысынбарлыҡта булған кешеләрҙең һындары. Прототиптар - скульптор Бабуриндың ҡыҙы һәм Мәскәү Гнесин институтының инглиз теле уҡытыусыһы Зөһрә Моратова", - тип иҫкә төшөрҙөләр Идаралыҡта. 1975 йылда Дуҫлыҡ монументы федераль әһәмиәттәге һәйкәл статусын алды. Гранит, бетон һәм бронза һәйкәлдең авторҙары - Мәскәү скульпторҙары Михаил Бабурин һәм Галина Левицкая, архитекторҙар Евгений Кутырев һәм Геннадий Гаврилов.

*ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ*

# БАШ МЕЙЕҺЕН ДӘ...

**Даими рәүештә баш мейеһе тамырҙарын таҙартһағыҙ, башығыҙ ауыртыуы бөтөр, кәйефегеҙ күтәрелер, остеохондроз, атеросклероз урап үтер. Таҙарыныуҙың биш ысулын тәҡдим итәбеҙ.**

**Беренсе:** 5 әстерхан сәтләүеген ваҡлағыҙ ҙа, 1 ҡалаҡ йүкә балы, бер семтем онталған корица һәм имбир һалып бутағыҙ. Ҡатнашманы 1 тәүлеккә һыуытҡысҡа ҡуйығыҙ. Уны 1-әр ҡалаҡлап көнөнә өс тапҡыр ярты сәғәт ҡалғас ашарға.

**Икенсе:** стакандың өстән бер өлөшө һуған һутына 1 стакан бал бутап, 1 тәүлеккә һыуытҡысҡа ҡуйығыҙ. Көн һайын өс тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр балғалаҡлап эсегеҙ. Был сара ҡан тамырын ғына таҙартмай, иммунитетты ла нығыта.

**Өсөнсө:** көн һайын төшкө һәм киске аш алдынан ярты сәғәт ҡалғас тәбиғи (сиратлап гранат, алма, кишер) һуттар эсегеҙ. Үҙегеҙ һығып эсһәгеҙ, тағы ла яҡшыраҡ.

**Дүртенсе:** 10 грамм тирәһе дегәнәк япрағын термосҡа һалып, ҡайнар һыу ҡойоғоҙ. 8-10 сәғәттән һуң һөҙөп алығыҙ ҙа һыуыҡ урынға ҡуйығыҙ. Төнәтмәне иртәнге аш алдынан ярты сәғәт алда 4-әр ҡалаҡ эсегеҙ. Дауаланыу курсы - 1 ай.

**Бишенсе:** организмды дөйөм дауалау һәм ҡан тамырҙарын таҙартыу өсөн көн һайын иртәнге аштан ярты сәғәт алда 1 мандарин, бер ус йөҙөм, әстерхан сәтләүеге ашағыҙ. 15-20 минуттан һуң 1 балғалаҡ бал, лимон киҫәге һалынған 1 стакан һыу эсегеҙ. Тағы 10-15 минуттан ғына иртәнге ашығыҙҙы ашағыҙ. Был сараны һимереүгә ҡаршы ҡулланырға ла мөмкин.

# ТАМАҠТА - ЛАЙЛА

**Иң күп лайла йыйылған урын - ул үпкә, ҡурылдай (бронхылар) һәм ашҡаҙан. Йыш һыуыҡ тейеп ауырыу, хәлһеҙлек, игтибарһыҙлыҡ - зарарлы бактериялар йыйылыуҙың төп билдәһе. Ул артыҡ күбәйеп китһә, оҫкә күтәрелә һәм танауҙан сыға башлай. Шуға күрә организмды алты айға бер тапҡыр токсиндарҙан таҙартыу мөһим. Танау тонһа - дарыу һалып, температура күтәрелһә - аспирин эсеп, йүткертһә - антибиотик ашап организмдың лайланан таҙарыныҙға теләүен баҫырға ярамай.**

Токсиндан, зарарлы бактерияларҙан, лайланан имбир эсеп ҡотолорға мөмкин. Бының өсөн ҙур булмаған тамырҙы таҙартып, 1 балғалаҡ самаһы нәҙек итеп турағыҙ ҙа, ҡайнар һыу ҡойоғоҙ. Төнәтмә бер аҙ һыуынғас, 1 балғалаҡ бал, бер аҙ лимон һуты һығып ҡушығыҙ. Ашарға ярты сәғәт ҡалғас, көн дауамында әҙләп эсегеҙ.

Ашҡаҙан һәм эсәкте таҙартыу өсөн 1 балғалаҡ бөртөклө ҡара боросто сәйнәмәй йотоғоҙ ҙа һыу эсегеҙ. Был процедураны киске 6-ға тиклем төшкө һәм киске аш араһында эшләгеҙ. Дауаланыу курсы - ике көн аша 7 көн.

Лайланан таҙарыныу өсөн лимон һәм керән ҡулланырға мөмкин. Бының өсөн 5 лимондан һығылған һутҡа 150 грамм ҡырылған керән ҡушып, яҡшылап болғатығыҙ. Ҡатнашманы иртән ас ҡарынға һәм йоҡлар алдынан ашағыҙ.

Шулай уҡ аҡ сәскә, ҡарағай һәм кедр ағасы бөрөһө, эвкалипт, ҡара ҡарағат, бөтнөк япраҡтары, ҡомалаҡ сәскәһенән эшләнгән төнәтмәләр, сәйҙәр организмды лайланан таҙарта. Ошондай эсемлек бик файҙалы: ҡайнар һыуға 1 ҡалаҡ йүкә сәскәһе, 2 балғалаҡ татлы тамыр (корень солодки) һалып, ярты сәғәт төнәтегеҙ ҙә, һөҙөп, эсе көйөнсә көнөнә 3-әр тапҡыр ашар алдынан 150 мл эсегеҙ. Дауаланыу курсы - 30 көн.

Ҡыҫҡаһы, туҡланыу рационын үҙгәртегеҙ. Менюҙа Е һәм С витаминлы аҙыҡтар күберәк булһын, майлы һәм әсе ризыҡтарҙы сикләгеҙ. Лайланан ҡотолорға шулай уҡ тын алыу гимнастикаһы ярҙам итә. Көнөнә кәмендә 1,5 литр һыу эсегеҙ. Эвкалипт майы менән ингаляция эшләгеҙ һәм содалы иретмә менән тамағығыҙҙы сайҡағыҙ. Тәмәке тартыуҙы ташлағыҙ. Алкоголле, кофеинлы, кока-кола кеүек газлы эсемлектәрҙән баш тартығыҙ.

АФАРИН!

# ТАМАШАЛАРЫ...

## киноға торошло



**Сибай концерт-театр берекмәһенең "Эйәрле ат беҙ менгәндәр" тамашаһын "Ҡурай" каналынан ҡараныҡ. Тамашасы йыя алмаған сикләнгән ваҡыт булыуға ҡарамаҫтан, яңы программа сығарып, халыҡҡа күрһәтеү юлын тапҡан бит әле сибайҙар.**

Бөйөк Еңеүҙең һәм Башҡорт кавалерия дивизияһының 75 йыллыҡ данлы юбилейына һәм халҡыбыҙ батыры Миңлеғәли Шайморатовтың Герой йондоҙон алыуына арналған берҙән-бер ошо кимәлдәге мәҙәни сара булды был программа. Кино кеүек итеп ҡараныҡ. Сюжетлы, кульминациялы, лирик сигенеүҙәр һәм музыкаль биҙәлештәргә бай булған нәфис фильм итеп ҡабул иттек. Быға аптырарға ла түгел, тамашаның сценарий авторы билдәле яҙыусы Миләүшә Ҡаһарманова һәм уның тәҡдимендәге музыкаль драма бер тамашасыны ла битараф ҡалдырмай. Әҫәрҙе сәхнәгә Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, күп кенә программаларҙы сәхнәләштереүсе Миңзәлә Ҡотошова ҡуйған. Музыкаль драмала яңғыраған йырҙарҙың композиторы - Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, билдәле композитор һәм йырсы Рәмил Туйсин. Хореографы Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, тиҫтәләгән бейеүҙәр авторы Фәнил Әсәҙуллин.

Программала Еңеүгә арналған яңы йырҙар яңғыраны. Һуңғы Еңеү тураһындағы йырҙарға ла ярты быуаттан ашыу йәштер инде, был өлкәлә ижад итеүселәр булмай торҙо. Һәм бына, Сибай концерт-театр берекмәһе ошо концертында Башҡорт атлы ғәскәренә һәм Бөйөк Еңеүгә бағышланған бер түгел, дүрт яңы йыр сығарҙы. Әйткәндәй, был йырҙар "Юлдаш" радиоһының хит-парадында ла беренселекте яуланы. Халыҡ тарафынан яратылып, радиола йыш яңғырап, Еңеү байрамы миҙгелен биҙәп торҙо.

Сибай концерт-театр берекмәһенең ижади эшмәкәрлеген аңғармай булмай. Был коллектив илдәге һәм республикалағы иң мөһим, халыҡҡа кәрәкле булған ваҡиғаларҙы яҡтыртып бара. Уларҙың программалары һәр ваҡыт актуаль һәм көнүҙәк була. Әлеге "Эйәрле ат беҙ менгәндәр" программаһы ла Бөйөк Еңеүҙә Башҡорт кавалерия дивизияһының өлөшө ҙур булыуын, Башҡортостан Республикаһының был изге яуҙа ир-егете һәм ҡатын-ҡыҙы ғына түгел, ә аттарына тиклем оло яу юлы үтеүен, батырлыҡтар ҡылыуын һәм герой исемдәренә лайыҡ булыуын күрһәтә. Һәм бөтөн шул яугир аттарҙың рухы барыбыҙға ла билдәле булған герой-ат Керчь сүрәтендә килеп баҫа.

Берекмәлә филармония һәм "Сулпан" балалар театрының берләшеүе коллективтың ижади эшмәкәрлеген күтәреп ебәрҙе. Театрлаштырылған тамашаларҙың юғары художестволы килеп сығыуының сәбәбе бында йырсы-бейеүселәр менән берлектә һәләтле драма артистарының да уйнауынандыр. Һәр кем үҙ һөнәрен белгән һәм ихлас башҡарған ойошмала концерт программалары ла халыҡсан, бай йөкмәткеле һәм тамашасы күңелен арбарлыҡ кимәлдә килеп сыға.

Сибай концерт-театр берекмәһенең "Эйәрле ат беҙ менгәндәр" тип исемләнгән театрлаштырылған тамашаһының С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһына тәҡдим ителеүен хуплайбыҙ һәм коллективҡа юғары уңыштар теләйбеҙ.

**Сәрүәр СУРИНА, драматург, фольклор белгесе.**

БАШҠОРТСА ҺҮҘЛЕК

# БАРСАЛЫ...

## биҙәкле була

**Байпаҡ** 1) валенки 2) войлочные чулки

**Байы** - часть чего-либо, оставляемая в запас (например, припуск ткани на швы)

**Баҡта, пакта** *(урта)* 1) *(ҡыҙыл)* овечья шерсть весенней стрижки 2) *(мейәс, әй)* грубая овечья шерсть.

**Балабик** *(мейәс)* сепрәк балаҫ

**Балитәк, бәләкәйтәк** *(дим)*, **пәбәйтәк** *(урта)* - оборка.

**Балаҡ** - штанина

**Эсле балаҫ** - палас, подшитый кошмой

**Бап** *(һаҡмар)* оҫталыҡ

**Баплап** *(туҡ-соран, һаҡмар)* 1) мастерски 2) детально

**Барса** - парча, парчевый

**Барсалау** *(дим, урта)* - выполнять узоры

**Барсалы** *(әй)* - биҙәкле

**Барсын** - шелковая ткань

**Баса** - мех с лисьих и куньих лап

**Басиса** *(әй)* - высший сорт кудели

**Басма** *(ғәйнә)* - ситец

**Басыу** *(ғәйнә)* сигеү

**Баҫа** - посконь (мужская особь конопли)

**Баҫа киндере** - посконная суровая ткань

**Бастил** *(дим)* - стёганая подстилка для сидения

**Басыныу** *(ғәйнә)* - заниматься вышиванием

**Батул** (мейәс, әй) сепрәк балаҫ

**Батшай I - әҙрәс** - адрас (набивная ткань с характерными заходящими один в другой восточными узорами)

**Батшай** II *(диалект)*, **ҡырпыу** - опушка, выпушка, меховая оторочка

**Сабата бауы** - оборы

**Сәлтер бауы** *(урта)* - подвязки для чулок

**Бауыр ағасы** *(дим, урта)*, **борғоса 1** *(ғәйнә, төньяҡ-көнбайыш, туҡ-соран, урта урал, һаҡмар)* - пришва (вал в передней части ткацкого станка, на который наматывают сотканный материал по мере готовности)

**Бауырҙау** *(арғаяш)* - выдерживание шкуры в сквашенном овсяном растворе

**Башағас** *(ҡыҙыл)*, **башһалғыс ағасы** *(дим)* - палочка, палочка с петлями основы вставляется к валу пришвы (в домашнем ткачестве)

**Башалтай, башакай** *(дим, ҡыҙыл, урта)*, **башатай, башалай** *(урта)*, **бәшәлтәй** *(һаҡмар)*, **бәшәй** *(әй)*, **башантай, башлантай, бышантай** *(дим)*, **башойоҡ** *(салйоғот)* - носки (шерстяные, ручной вязки)

**Ҡунысһыҙ башалтай** - шерстяные носки ручной вязки, без паголёнок

**Башйеп** *(көнсығыш)* - тряпка с палочкой, которой основа прикрепляется к пришве (в домашнем ткачестве)

**Рәмилә КӘРИМОВА.**

**"Башҡортса-урыҫса туҡыусылыҡ һәм ҡул эштәре терминдары һүҙлеге" китабынан.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИКЕ ШОҢҠАР ТАЛАШҺА...

## бер ҡарғаға ем булыр

Ояңа ҡарап ҡанат ҡаҡ, дуғаңа ҡарап ҡыңғырау таҡ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Кемдер уның өсөн ғүмерен биреүгә ҡарамаҫтан, идеяның да ысынбарлыҡҡа тап килмәүе бик мөмкин.

**(Икрам Антаки).**

Изгелек - ул һаңғырау ишетә, һуҡыр күрә ала торған нәмә.

**(Марк Твен).**

Үҙ-үҙеңде яратыу теләһә ниндәй ярыҡ аша үтеп инә ала торған тойғо.

**(Уильям Хэзлитт).**

Ҡурҡаҡлыҡ шул тиклем зарарлы, сөнки ул файҙалы эштәргә йүнәлтелә торған ихтыярҙы тотҡарлай.

**(Рене Декарт).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше үҙенең бер дуҫына ҡарата суд эше ҡуҙғата. "Мин алыҫ ергә сәйәхәткә киткәндә был дуҫыма өйөмдәге иң ҡиммәтле нәмә - ике бөртөк ынйыны һаҡлауға ҡалдырып торҙом. Ҡайтҡас, уларҙы һорап дуҫыма барҙым, әммә ул ынйыларҙы биреүҙән баш тартты..." ти ул судьяға. Дәғүәсе шунан һуң ынйыларҙың ниндәй рәүештә булыуын, ауырлығы күпме булыуын аныҡлап һөйләп бирә. Әммә дуҫы был дәғүәләрҙе кире ҡаға, мин бер ниндәй ҙә ынйы күрмәнем һәм алманым, тип раҫлай. Тәжрибәле судья яуапҡа тарттырылыусыны диҡҡәт менән тыңлай һәм күҙәтә. Шунан ул эште ҡарауҙы күсереүе тураһында белдерә. Бер нисә көндән судья баяғы дәғүәсе һүрәтләгән рәүештәге һәм ауырлыҡтағы туҡһан һигеҙ бөртөк ынйы һоратып ала. Уларҙы иҫке, өҙөлөргә торған епкә теҙҙерә. Шунан яуапҡа тарттырылыусыны саҡырып ала һәм уға: "Һине муйынсаҡтар теҙергә оҫта тип ишеттем. Бына һиңә йөҙ бөртөк ынйы, шуларҙы матур, ныҡлы епкә теҙеп килтерсе", - ти. Яуапҡа тарттырылыусы өйөнә ҡайтып, ынйыларҙы епкә теҙә башлай һәм уларҙың йөҙ түгел, ә туҡһан һигеҙ бөртөк кенә икәнен аңлап ҡала. "Моғайын, икәүһен юлда юғалтҡанмындыр инде", тип уйлай ҙа үҙендәге дуҫының ике ынйыһын ҡушып теҙергә мәжбүр була. Иртәгәһенә ынйы муйынсаҡты судьяға алып китә. Судья ынйыларҙы һанай һәм уларҙың йөҙ бөртөк икәнен күргәс, йылмайып, яуапҡа тарттырылыусыға: "Мин бит һиңә туҡһан һигеҙ ынйы биргәйнем. Икәүһе артыҡ һәм улар һинең дуҫыңдыҡы булып сыға инде", - ти. Шулай итеп, ынйылар үҙ хужаһына ҡайтарыла. Ә яуапҡа тарттырылыусы ҙур сумма штраф түләй..."**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттен Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
10 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3007
Заказ - 731/09